ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 ғинуар (һыуығай) 2021

№3 (941)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы йылда ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыуығыҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Йәнәшәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында баҫмабыҙға яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, иҫкәртә күрегеҙ: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, уны марттан алдыра башлаясаҡтар. ПР905 индекслы баҫмабыҙ дүрт айға 483 һум 72 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Башҡорт теле йылынан…
башҡорт тарихы йылына
6



Атыбыҙ - уран,
затыбыҙ башҡорт беҙҙең
7



Ниңә туҡмалып йәшәүгә күнәһең?
Был һорау ғаиләһендә йәберләнеп йәшәүсе ҡатынға
8-9



Айыуҙы баҫтырған…
13



ТВ-программа 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Баймаҡ районы биләмәһендә урынлашҡан Талҡаҫ күле тиҙҙән тәбиғәт ҡомартҡыһы статусы аласаҡ, тип хәбәр итәләр Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһенән. Был бик тә ваҡытлы ҡарар, тип баһалана, шулай бит?***

***Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, профессор:*** Эйе, әлеге ваҡытта Баймаҡ район хакимиәте башланғысы менән һәм БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының финанс ярҙамында тәбиғәт ҡомартҡыһын проектлау, уны һаҡлау зоналарын, сиктәрен, режимын билдәләү буйынса эштәр алып барыла тигән хәбәр бар. Һис арттырмайынса шулай тип әйтергә була: Башҡортостан картаһының ниндәй генә нөктәһенә төртһәң дә - хазина. Ана шул хазиналарҙың береһе - Баймаҡ районындағы "Урал ынйыһы" тигән исемгә лайыҡ булған Талҡаҫ күле. Республикабыҙ күлдәргә бик бай, шөкөр - улар 2 меңдән ашыу. Шуларҙың иң ҙур һәм мөһимдәренән булған Асылыкүл, Яҡтыкүл, Өргөн, Ҡандракүл, Аҡкүл, Атауҙы, Сыбаркүл һәм башҡалар араһында Талҡаҫ айырым урын алып тора. Оҙонлоғо 4 км, киңлеге 1 км-ға яҡын, уртаса тәрәнлеге 4,5 метр булып, иң тәрән урыны 12 метр тирәһе тәшкил итә. Ләкин иң мөһиме уның был күрһәткестәрендә лә түгел.

Әйтеүемсә, унан күпкә ҙурыраҡ күлдәребеҙ бар беҙҙең. Һыуының таҙалығы, сафлығы буйынса Талҡаҫты бөтөн донъяға билдәле Байкал күленә тиңләйҙәр. Баймаҡ районындағы был биләмә таҙа экологик зонала урынлашҡан, яҡын-тирәлә, бәхеткә, һыу һәм һауа бысратыусы бер генә лә сәнәғәт объекты ла юҡ. Был күл шифалы батҡаҡ сығанағы ғына түгел, һәр төрлө балыҡтарға ла бай. Талҡаҫ тәбиғәте иҫ китмәле: уның көнсығыш яр буйҙары Ирәндек һырттарының урманлы-таулы итәгенә терәлеп ята һәм был биләмәлә Ҡыҙыл китапҡа ингән күп төрлө үҫемлектәр үҫә. Көнбайыш яр буйҙарын биләгән ҡылғанлы дала ҡайын аҡландары, еләкле туғайҙары менән алмашына. Күлдең төньяҡ һөҙәк яр буйҙарындағы һаҙлыҡлы ҡамышлыҡтар араһында Башҡортостан тәбиғәте өсөн һирәк күренеш булған ҡоштар оя ҡорорға ярата: ҡыр өйрәктәре, һоро ҡаҙҙар, ҡара муйынлы гагара, турпан, аҡсарлаҡ һәм башҡалар.

Талҡаҫтың көньяҡ-көнбайыш яр буйҙарында урынлашҡан "Талҡаҫ" шифаханаһын белмәгән кеше һирәктер. Бында заманса ысулдар, шулай уҡ тәбиғи батҡаҡ һәм шифалы күл һыуы ярҙамында нервыларҙы нығытырға була, һөйәк-мускулдар системаһын, тын юлдарын, тире ауырыуҙарын, гинекология һәм урология сирҙәрен дауалайҙар. Йәй көндәре ял итергә килгән туристарҙан Талҡаҫ буйында энә төртөр урын да булмай. Шунлыҡтан, күл биләмәһен даими контролдә тотоу һәм бында таҙалыҡ, тәртип һаҡлау бурысы айырыуса һуңғы йылдарҙа бик киҫкен мәсьәләгә әүерелде.

Дөрөҫөн әйткәндә, был бик күптәнге мәсьәлә ул. Әле 2000 йылдар башында уҡ "Ирәндек" тәбиғәт паркын төҙөү проекты әҙерләнгән ваҡыттарҙа уның төп һаҡлау объекттарының береһе тап ошо Талҡаҫ күле тип ҡарала ине. Үкенескә, был программа тормошҡа ашырылмай ҡалды. Әле килеп, Талҡаҫ күленә айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәһе статусы биреү хаҡындағы ҡарар республикабыҙ тормошонда мөһим ваҡиға булып тора һәм ул әлеге проекттың бер өлөшөн ғәмәлгә ашырасаҡ, тигән һүҙ. Бик хуп, хәйерле булһын!

## КӨНАУАЗ

# КӨТМӘГӘНДӘ...

## юлдар икенсе йүнәлеш алды



**8 ғинуарҙан Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге юл реконструкцияға ябылды. Ҡалаға аэропорт яғынан көньяҡтан инеү "ҡапҡаһы" булған урын иң йәнлеләрҙән һәм көсөргәнешлеләрҙән һанала һәм ул үҙенең үткәреү һәләтен түбәнәйтеп, бик йыш "тығын"дар барлыҡҡа килтерә ине.**

• Ағиҙел йылғаһы аша һалынған ике күпер араһында төҙөлгән яңы күпер уның үткәреү һәләтен арттырырға тейеш тип күҙаллана, әммә артабан юл киселеше ихтималлығы килеп баҫа, сөнки транспорт ағымы артып, "тығын"дар проблемаһы тағы ла киҫкенләшеүе мөмкин. Реконструкция ихтыяжы ошо киләсәкте күҙаллауҙан килеп тыуа ла инде. Эштәрҙе 2021 йылдың ноябренә тамамлау планлаштырыла, 2022 йылдың төҙөлөш миҙгелендә Ҡала көнөнә тиклем уны ахырына еткереү күҙаллана. Йәғни реконструкция эштәре 11 ай туҡтауһыҙ, ялһыҙ, байрамдарһыҙ тәүлек әйләнәһенә ике сменала алып барыласаҡ. Яһалма ҡоролмаларҙа (юлдар һәм күперҙәр) эшләү махсус технологик циклдарҙы һәм процестарҙы һаҡлау талап иткәнлектән, унда эшселәр талап буйынса эшләй. Тәүҙә проект буйынса эштәр өлөшләтә башҡарылырға тейеш булһа, төҙөлөштө 5-6 айға ҡыҫҡартыу маҡсатында юлды тулыһынса ябыу схемаһы ҡабул ителә.

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

12+

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# МЕНДӘР ҘӘ КИЛЕМ КИЛТЕРӘ

**Бөгөнгө көндә бер юлы ике эштә эшләгән кешеләр, бигерәк тә ҡала ерендә, әҙ түгел. Замана талаптары ҡаты - яҡшы йәшәгең килһә, ниндәйҙер өҫтәмә килем алыу юлын эҙләргә, һәр саҡ яңы идеяларға асыҡ булырға кәрәк. Мин дә төп эшемдән башҡа төрлө варианттарҙы барланым, ләкин үҙемә тура килгәнен таба алманым. Унан ҡала, ауылда бер хеҙмәт урының булһа ла бик яҡшы, ике эш урыны тураһында хыялланырға ғына ҡала. Шуға күрә миңә тик өйҙә эшләй алырҙай, үҙемдең ваҡытыма һәм мөмкинлегемә ҡарап башҡарырҙай өҫтәмә аҡса килтереүсе шөғөл табырға тура килде. Гәзит уҡыусылар менән бүлешкем килә, моғайын, кемдеңдер ҡолағына төшөр.**

Хәҙер экологик яҡтан таҙа аш-һыуға, тауарға һорау арта. Һәм был тенденция артабан да үҫер, тип уйлайым, сөнки кеше үҙенең һаулығы тураһында күберәк ҡайғырта, балаларының киләсәге хаҡында уйлай, ерҙең экологик хәле лә күптәр өсөн беренсе урынға сыҡты. Шуға күрә ошо йүнәлештә эшмәкәрлек алып барыусы ҙур компаниялар ҙа, бәләкәй ойошмалар ҙа, айырым кешеләр ҙә артты. Мин дә уларҙың рәтен тулыландырып, үҙемдең эшемде башланым: файҙалы, экологик яҡтан таҙа, үҙебеҙҙең урман-тауҙарҙа үҫкән үләндәрҙе ҡулланып мендәр (яҫтыҡ) эшләйем. Мендәр эсенә ниндәй үлән һалыныуына ҡарап, уларҙың һөҙөмтәһе лә төрлөсә. Мин күберәк мәтрүшкә һәм һары мәтрүшкә, меңъяпраҡ, кейәү үләне, ҡомалаҡ, бөтнөк үләндәрен ҡулланам. Тағы ла аҡ сәскәнән эшләнгән мендәргә лә һорау арта бара. Шулай уҡ махсус заказдар буйынса башҡа төрлө үлән һәм сәскәләрҙән дә эшләгәнем бар. Иң күп заказ - ҡомалаҡтан эшләнгән экомендәрҙәр.

Әйберҙәрҙе сифатлы кәпрән һәм матур мендәр тыштарын ҡулланып ҡына эшләйем. Ҡайһы саҡта һатып алыусының заказы буйынса мендәр тышына ниндәйҙер яҙма сигеп биҙәйем. Был, әлбиттә, мендәрҙең хаҡын арттыра, тик минең өсөн мәшәҡәтлерәк, шуға күрә бик һирәк осраҡта ғына тотонам. Күптәр ғаиләһендәге һәр ағза өсөн төрлө составлы мендәргә заказ бирә. Өс мендәрҙән күберәк алыусыларға ташлама яһайым, йәки өҫтәп тағы бер бәләкәй генә мендәр ҡушып бирәм. Ошо рәүешле үҙемә клиенттар йыйҙым ике йыл тирәһе, хәҙер күмәртәләп һатылған мендәрҙәр һанын арттырырмын, тип торам. Шулай уҡ мендәрҙең хаҡын да күтәрергә уй бар. Әлегә тиклем бер мендәрҙең хаҡы, ҙурлығына, мендәр тышы ниндәй материалдан тегелеүенә һәм ул ниндәй үлән менән тулыландырылыуына ҡарап, 500 һумдан башлана. Ғәҙәттә, 50*60 размерлы мендәрҙәргә һорау ҙур. Быңдай экомендәрҙәр, ғәҙәттә, баш аҫтына һалынмай, ә хуш еҫ таратып, тынысландырып янда ята, шуға күрә уны артыҡ ҙур эшләү кәрәкмәй. Бер айлыҡ килемем, күп осраҡта, 2000-4000 һумдан кәм булмай. Тәү ҡарашҡа күп түгел, ләкин ғаилә бюджетындағы финанс тишекте ямарға ярап ҡала. Байрамдар һәм ҡыш етер алдынан заказдар арта. Кәпрән һәм мендәр тыштары өсөн материалды күмәртәләп һатып алам да, үҙем тегәм, шуға күрә сығымы күп түгел. Почта аша алдырғандар уның хаҡын үҙҙәре күтәрә.

Был шөғөлдө еңел һәм үтә килемле, тип әйтә алмайым, шулай ҙа ул артыҡ көс талап итмәүе менән уңайлы. Шулай уҡ бер йыйып алған үләндәрҙе матур итеп киптереп ҡуйғанда ҡулланыу арауығы ла бер-ике йылға етә. Ауылда йәшәүселәр йәй айҙарында бесәнгә, еләккә һәм башҡа еләк-емешкә күп йөрөй, юл ыңғайы үләндәр ҙә йыйып алып ҡайтырға һәм ошондай мендәрҙәр эшләп һатырға мөмкин. Шуға күрә, мендәр килем килтерә, тип ышаныслы әйтә алам. Ләкин шуныһы - үләндәр астма һәм аллергик сирҙәр менән ауырығандар өсөн зарарлы булыуы мөмкин, шуға күрә мотлаҡ рәүештә һатып алыусыны ошо хаҡта яҙма рәүештә иҫкәртергә онотмағыҙ!

**Рәйлә ИСМӘҒИЛЕВА.**
**Бөрйән районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Баймаҡ районы биләмәһендә урынлашҡан Талҡаҫ күле тиҙҙән тәбиғәт ҡомартҡыһы статусы аласаҡ, тип хәбәр итәләр Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһенән. Был бик тә ваҡытлы ҡарар, тип баһалана, шулай бит?**

***Булат ТАЙБУГИН, Баймаҡ районы Ниғәмәт ауыл хакимиәте башлығы:*** Талҡаҫ күле территорияһы буйынса беҙҙең ауыл биләмәһенә ҡарай, шуға күрә, беҙ унда ниҙәр булып ятҡанын белеп-күреп торабыҙ һәм, әйтергә кәрәк, күл яҙмышы бөтөн ауыл халҡын инде оҙаҡ йылдар хафала тота. Бигерәк ныҡ ҡәҙерһеҙләнде күлебеҙ һуңғы йылдарҙа. Беҙ, ауыл халҡы әүҙемселәре, үҙ көсөбөҙ менән хәлебеҙҙән килгәнде эшләргә тырышабыҙ, биләмәне таҙартабыҙ, йыйыштырабыҙ, ләкин, аңлашыла торғандыр, был эш беҙҙең генә көстән килерлек түгел. Былтыр, мәҫәлән, пандемия сәбәпле сит илдәргә юлдар ябылды һәм бөтөн халыҡ иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем тәбиғәт ҡосағына ябырылды. Талҡаҫ буйын да баҫып алдылар, әлбиттә, шулай әйтергә яраһа... Ысын мәғәнәһендә баҫып алдылар тип әйтергә була, сөнки бер ниндәй контроль-тикшереү юҡ, теләгән береһе күл буйына машинаһы-ние менән үтеп инә, махсус туҡталҡа эшләнмәгән. Ҡайҙан ғына килмәй халыҡ: Башҡортостандың бөтөн ҡала-райондарынан, күрше өлкәләрҙән: Магнитогорск, Силәбе, Гай, Орск ҡалаларынан, хатта Ҡаҙағстандан килеп етәләр. Үкенескә, ҡайҙан ғына килһәләр ҙә, барыһының да аң һәм мәҙәни кимәле шундай: улар ял итергә килә, ә кемдер арттарынан йыйыштырып йөрөргә тейеш. Үҙҙәрен бик иркен тота улар: күл буйында машина йыуа, сүп-сарын ырғыта, һүгенә, музыка аҡырта... Күлде арҡырыға-буйға иңләп, моторлы кәмәләрҙә уҙыша...

Дәүләт тарафынан һаҡланыусы биләмә булараҡ статус, исмаһам, бында тейешле тәртип һәм контроль булдырырға ярҙам итһә ине: Талҡаҫ күле биләмәһенә инеүҙе түләүле итергә; машиналарҙы күл биләмәһенән ситтәрәк айырым туҡталҡаға ҡуйырға; осраҡлы кешеләргә бында юлды ябырға һәм ял итеүселәр тәртибен ныҡлы контролгә алырға; биләмәне бысратҡан, сүпләгән һәм башҡа төрлө тәртип боҙоуҙарға ҡарата штраф санкциялары булдырырға. Был минең шәхси фекер генә, әлбиттә, ләкин киләсәктә ошо йүнәлештә саралар тормошҡа ашырылыр, тип бик өмөтләнәбеҙ. Ул саралар хатта күпкә ҡәтғиерәк булырға ла мөмкин, тигән уйҙабыҙ, сөнки бөгөн халыҡты тәртипкә күндереү еңел эш түгел. Һәр урында ла контроль кәрәк бында, сөнки күлдең һыуын, таҙалығын һаҡлау ғына түгел, ә ошо биләмәләге бөтөн территорияға күҙ-ҡаш булыу кәрәк. Ҡайһы берәүҙәрҙең хаттин ашыуы шуға тиклем барып етте: күлдең төньяҡ яр буйы биләмәһендәге ағастарҙы моторлы бысҡы менән бысып йөрөүселәр бар. Шул ағастарҙан бура бурап, ошонда уҡ мунсалар эшләп ултырта башланылар. Кемдәр улар, кем рөхсәт биргән уларға? Көнө-төнө моторлы кәмәләрҙә елдерәләр, балыҡ аулайҙар - шулай уҡ рөхсәтһеҙ, әлбиттә. Талҡаҫҡа дәүләт тарафынан һаҡланыусы тәбиғәт ҡомартҡыһы булараҡ статус бирелеү ошондай башбаштаҡлыҡтарға юлды ябыр ине, исмаһам, тип, бында ныҡлы тәртип булдырылыуға бик тә өмөтләнәбеҙ.

ИҢ МАТУР ҺҮҘ

# ҺАУМЫҺЫҒЫҘ!



**Башҡорт телендә әсәй, рәхмәт һүҙҙәренән ҡала, сәләмләшеүҙе белдергән һүҙҙәрҙе иң матур тип иҫәпләйем. Иртәнсәк торғас та "Хәйерле иртә" тип өндәшәбеҙ, туғандарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, хеҙмәттәштәребеҙгә хәйерле көн, хәйерле эштәр, хәйерле осрашыуҙар теләйбеҙ, ҡыҙарып сыҡҡан ҡояшҡа "Һаумы, ҡояш!" тип сәләмебеҙҙе юллайбыҙ.**

Башҡорттарҙа иҫәнләшеү йолаһы бик ҙур урынды алып тора. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдән бер кеше: "Эй, Аллаһтың илсеһе, Ислам динендә иң хәйерлеһе нимә?" - тип һораған. Ул: "Мохтаждарға ярҙам итеү, таныш һәм таныш булмағандарға сәләм биреү" , - тип яуап биргән.

Беҙгә сәләм биреү әҙәбен дә белеү кәрәк. "Әссәләмәғәләйкүм" тигәнгә, "Вәғәләйкүмәссәләм " тип яуаплау - оло кешеләр менән иҫәнләшеү, динле, иманлы, мосолман кешеләренең берҙәм булыу билдәһе. "Һаумыһығыҙ" тиеү - кешеләрҙең дәрәжәле, белемле булыу билдәһе. "Иҫәнмеһегеҙ" тип, ғәҙәттә, үҙеңдең яҡындарың менән иҫәнләшәһең. "Шәпмеһегеҙ " - был һыбайлы кеше менән иҫәнләшеү, бер үк ваҡытта атҡа ла сәләм биреү билдәһе. Ауырыу кеше менән осрашҡанда "Арыумыһығыҙ", йәғни "Арыуланаһыңмы?" тигәнде аңлатып сәләмләшәләр. Өлкәндәр менән иҫәнләшкәндә йәш ир-егеттәр баш кейемен һалып, күкрәгенә ҡуйырға тейеш - был хөрмәт билдәһе. Ике ҡул менән күрешеү - дуҫлыҡ билдәһе. "Сәләм" тип йәш-елкенсәк иҫәнләшә. Уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр балаларға үҙе башлап сәләм бирергә тейеш, тигән ҡағиҙә лә бар.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм әйткән: "Аттағылар йәйәүлеләргә, үтеп барыусылар ултырғандарға, аҙ һанлылар күп һанлыларға, балалар ололарға сәләм бирергә тейеш". Әссәләмәғәләйкүм, һаумыһығыҙ, иҫәнмеһегеҙ, шәпмеһегеҙ, арыумыһығыҙ, сәләм тигән кеүек матур һүҙҙәр менән бер-беребеҙҙең хәлен белешәйек, сәләмәтлек теләйек.

**Сөмбөл ӘСФӘНДИЙӘРОВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибовҡа үҫмерҙәр спортында коронавирус сикләүҙәрен бөтөрөргә ҡушты. Бынан алда Башҡортостан Башлығы указы менән "Юғары әҙерлек" режимын индереүгә бәйле үҫмерҙәр араһында спорт ярыштарын сикләү тураһында хәбәр ителгәйне.

✓15 ғинуарға мәғлүмәттәр буйынса, тәүлек эсендә республикала яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 167 осрағы асыҡланған. Төбәктә сир йоҡторғандарҙың дөйөм һаны - 21 569. Әлеге ваҡытта COVID-19 диагнозы раҫланған 826 пациент дауаханала ята, 4 392-һе амбулатор шарттарҙа дауалана. Вафат булғандар һаны - 163 кеше. Был көнгә республикала тәүлек эсендә 302 кешегә "дауахананан тыш пневмония" диагнозы ҡуйылған.

✓Республика халҡы БашРТС-тан декабрь айы өсөн килгән йылытыу иҫәп-хисап ҡағыҙҙарына ризаһыҙлыҡ белдерә. Төрлө баһалар буйынса, түләү 30-70 процентҡа артҡан. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса төҙөлгән эшсе төркөмгә тиҙ арала хәлде асыҡлау һәм сумманың дөрөҫлөгөн тикшереү, нигеҙһеҙ түләүҙәр күрһәтелгән осраҡта халыҡҡа аҡсаны кире ҡайтарыу бурысы йөкмәтелгән.

✓Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, әлегә Өфөнән 2030 йылда Олимпия уйындарын уҙғарыуға кандидат сифатында ғариза биреү идея булараҡ ҡарала. "Халыҡ-ара Олимпия комитеты билдәләгән тәртип бар. Ғариза уҙғарырға йыйынған ҡаланан, төбәктән һәм Рәсәйҙең Олимпия комитетынан бирелә", - тип аңлатты Руслан Хәбибов брифингта.

✓Өфөлә Башҡортостан Республикаһы Башлығының республиканың дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен яҡлауға, үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттары конкурсына йомғаҡ яһалды. Башҡортостан Республикаһының Граждандлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды мәғлүмәте буйынса, конкурста 8 ойошма еңеүсе тип иғлан ителде. Еңеүселәр араһында - коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙан 16 проект, 15 проектты - муниципаль, ете проектты дәүләт бюджет учреждениелары әҙерләгән.

✔ *Әгәр ҙә ошо баҡсам булмаһа, йә ҡулым эш белмәһә, бер пенсияны хет әллә нисәгә һуҙһаң да, экономияламаһаң да, еткерә алмаҫ инем. Таныш-белештәр араһында ундайҙар ҙа юҡ түгел.*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Башҡортостанда Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексҡа үҙгәрештәр көсөнә инде. Былтыр ноябрь аҙағында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары ошо төҙәтмәләрҙе хупланы. Атап әйткәндә, яңылыҡтар урамда сауҙа иткән йәки тәғәйенләнмәгән урында көнкүреш хеҙмәттәре күрһәткән өсөн штрафты байтаҡҡа арттырыуҙы күҙ уңында тота. Тейешле документҡа Башҡортостан Башлығы ҡул ҡуйҙы. Документ тексынан күренеүенсә, хәҙер граждандарға - 500 һумдан 3 меңгә тиклем, вазифалы кешеләргә - 20-40 мең һум, ойошмаларға 40-100 мең һум штраф һалына. Законды ҡабаттан боҙған осраҡта штраф граждандарға - 5 мең, вазифалы кешеләргә - 50 мең, ойошмаларға 150 мең һумға тиклем арттырыла. Парламент спикеры Константин Толкачев фекеренсә, был проблема ҙур ҡалалар, тәү сиратта республиканың баш ҡалаһы өсөн айырыуса көнүҙәк. Халыҡҡа ҙур күләмдә штраф һалыу мөмкинлеге был хәлде ҡырҡа үҙгәртергә тейеш. Ә шулай ҙа... Мохтажлыҡ кисергән, осон осҡа ялғап йәшәгәндәр ни ти һуң?**



# БАҠСАМДА ҮҪТЕРГӘНДЕ ҺАТЫП...

## донъямдың осон осҡа ялғайым

*Люция ЙӘҒӘФӘРОВА, Салауат ҡалаһы:* Урамда рөхсәтһеҙ сауҙа иткән өсөн штраф күләме артыуын, әлбиттә, һағайып ҡаршы алдым, сөнки мин үҙем йәйге-көҙгө миҙгелдә баҡсала үҫтергән йәшелсә, еләк-емештәрем менән һатыу итәм. Был яңылыҡ үҙ көсөнә инһә, хәҙер граждандарға ла, вазифалы кешеләргә лә штраф һалынасаҡ. Законды ҡабаттан боҙған осраҡта уның суммаһы тағы ла артыуы күҙаллана.

Эш стажым ҙур булһа ла, минималь пенсия алам. Яңынан иҫәпләтеп тә, һораған белешмәләрен, документтарын да алып барып ҡараным, тик барыбер артманы. Коммуналь хеҙмәттәргә түләгәндән һуң йәшәү өсөн аҙ ғына аҡсам тороп ҡала. Шуға ла, иш янына ҡуш булһын тип, иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә баҡсала бил бөгәм. Укроп, йәшел тәмләткестәрҙе февралдә үк өйҙә тәҙрә төбөндә үҫтерә башлайым. Сират тороп алмайҙар, әлбиттә, әммә көнө буйы ултырһаң, укроптар ҙа, тоҙланған әйберҙәр ҙә, ҡайнатмалар ҙа йәйлап һатыла. Баҙарсыҡта ултырғанда ҡулыма бәйләм дә алам. Ойоҡ-ойоҡбаштар, бейәләй, бирсәткә, шарф бәйләп һатам. Хаҡын алыусыһына ҡарап билдәләгәс, килем артыҡ ҙур түгел. Шулай ҙа ейәндәр килеүгә ҡулына тотторорлоҡ уйынсыҡмы, кәнфитмә ала алам. Кемдер, бәлки, балаларыңды ни өсөн таптың, ни өсөн укыттың, улар һине аҡса, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итмәгәс, тип, мине тәнҡитләргә лә маташыр. Улымдың да, ҡыҙымдың да эш хаҡы минең пенсиянан саҡ ҡына артығыраҡ. Икеһе лә бала үҫтерә, үҙҙәре лә осто-осҡа ялғап йәшәй.

Әгәр ҙә ошо баҡсам булмаһа, йә ҡулым эш белмәһә, бер пенсияны хет әллә нисәгә һуҙһаң да, экономияламаһаң да, еткерә алмаҫ инем. Таныш-белештәр араһында ундайҙар ҙа юҡ түгел. Магазинда бөртөкләп һанап ҡына картуф, кишер алған, бер-ике дана ғына йомортҡа өсөн иҫәпләшеп торған әбей-бабайҙарҙы күрһәгеҙ, улар - ана шул минең кеүек бәләкәй пенсияға йәшәгәндәр инде.

Йәйге миҙгелдә тырышып эшләп ҡалырға тырышам, көндәлек килем 500-ҙән артып киткән ваҡыттар ҙа була. Ташландыҡ баҡсаларға ла йөрөргә тура килә. Ҡарағат, ҡурай еләге кеүек ҡыуаҡтар тәрбиә күрмәгәс, улары күптән ҡороно инде. Ә бына алма, сейә, слива йылына ҡарап мул ғына уңыш бирә. Уларҙы барыбер бер кем дә йыймай бит, әрәм булғансы тип, тәгәрмәсле сумка менән барып, матурҙарын ғына йыйып, һатырға алып сығам.

Баҙарға сыҡҡандар араһында аҡсаға ҡытлыҡ күрмәгәндәр ҙә бар. Ундайҙарҙың күбеһе балалары, ейәндәре менән йәшәй. Улар - йыш ҡына өйөндәге ығы-зығынан, шау-шыуҙан ҡасып сығып киткән оло быуын вәкиле. Аҫ тамағым - тыныс ҡолағым тип, көнө буйы тәғәм ризыҡ ҡапмай, йөтом һыу эсмәй ултырһалар ҙа, риза улар.

Балаларына ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә теләп, һатырға сыҡҡандар бар. Уларҙы балаһы, йә ейәне алып килә, алып ҡайта, көн дауамында термос менән ашын, сәйен килтереп китә.

Шулай ҙа баҙарсыҡта һатып торған оло йәштәгеләрҙең күбеһе - яңғыҙ көн итеүселәр. Улар башлыса аралашыу өсөн сыға. Бер нәмәләре һатылмаһа ла, алып сыҡҡандары ла бер кемгә кәрәкмәгән көнкүреш әйберҙәре инде, артыҡ бошонмайҙар, күрешеү, һөйләшеү шатлығын, тағы ла бер көн үтеп китеү ҡыуанысын кисереп ҡайтып китәләр. Ана шундайҙарҙы күреү аяныслы. Йәштәргә атай-әсәйегеҙҙе онотмағыҙ, аҙнаһына бер булһа ла барып, хәлен белешегеҙ, көн һайын шылтыратып торорғоҙ, тип әйтергә теләйем. Иртәгә барам, һуңынан шылтыратырмын әле, тип, бөгөн эшләй алғаныбыҙҙы иртәгәгә ҡалдырмағыҙ, һуң булып ҡуйыуы ихтимал...

*Гүзәл ЗАҺИҘУЛЛИНА, Мәләүез ҡалаһы:* Ҡала урамдарындағы бәләкәй баҙарҙар янынан үтергә яратам. Айырыуса үҙенең баҡсаһында үҫтергәненән, һарайында аҫрағанынан һатырға алып сыҡҡандар минең иғтибарҙы йәлеп итә. Айырыуса йәй көнө. Унда һатыусылар иртән иртүк йыйыла. Иртә килгән урын өсөн тиһәләр ҙә, баҙарҙың үҙ тәртибе - бында һәр кемдең үҙ мөйөшө-майҙансығы бар. Кемдер ҡыйығы ябыҡ рәттәр артына баҫа. Икенселәре, дөрөҫөрәге, ауылдан килгәндәр, тротуарҙың ике яғынан теҙелә. Тап ошо аллы-гөлле сәскәләрҙән, йәшел тәмләткестәрҙән, емеш-еләк, йәшелсәләрҙән, май-ҡаймаҡтан барлыҡҡа килгән "коридор" аша үтеү оҡшай. Бынан инде нимә булһа ла алмай үҙып китеү уңайһыҙ һымаҡ хатта. Нисек инде, ауыҙ итегеҙ, тип итәгенә һөртөп булһа ла алма һуҙған инәйҙәр, бабайҙар янынан ҡул һелтәп үтәһең? Үҙендең баҡсаңда күпереп ултырһа ла, бер бәйләм укроп булһа ла алып китмәй сараң юҡ. Юҡ хаҡҡа ла биреп ебәрергә әҙер бит уларҙың ҡайһы берәүҙәре.

Ҡышын да буш тормай баҙарсыҡтар. Уның рәттәре йәй көнөндәге кеүек йәнле түгел, әлбиттә. Шулай ҙа иртәнге сәғәттәрҙә үк күптәр өйрәнгән урынына ашыға. Хәҙер инде унда миҙгелгә ярашлы әйберҙәр урын алған: салат, əҙерләмә, ҡайнатма, киптерелгән дарыу үләндәре, миндек, һөт аҙыҡтары, йомортҡа, дебет шәл, ойоҡбаш, бейәләй һәм башҡа кәрәк-яраҡ.

Шулай бер үтеп барғанда ултырғыста ике төрлө никель сәйнүккә күҙем төштө. Өр-яңы түгел, тотонолған, әммә бик матурҙар. Аҫтарына ырғаҡ менән бәйләнгән аҡ салфетка йәйелгән. Әйтерһең дә, улар һатырға түгел, ә күргәҙмәгә сығарылған. Янында туҡталыуым булды, ситтәрәк һөйләшеп торған был кухня приборҙары эйәһе йүгереп килеп етте. Ҡыуанысы эсенә һыймағанын йәшерә алмай: "Бына бит сәйнүктәремде ҡараусы кеше табылды!" - тип, минең иғтибар күрһәткәнемә рәхмәт әйтеп, уларҙың тарихы менән бүлешергә ашыҡты.

Бәләкәй баҙарҙа һатыусыларҙың барыһы ла аралашыу, эс сере менән уртаҡлашыу, көн үткәреү уйы менән генә сыҡмай, әлбиттә. Улар араһында мохтажлыҡтан, үҙ ауыҙынан өҙөп, юғын бар итеп, һатырға ҡуйғандар ҙа күп. Кемдер пенсияһын еткерә алмай, икенселәре ейәндәрен уҡытырға ярҙам итә. Ә, бәлки, ҡайһы берәүҙәрҙең төп килем алыу сығанағылыр ҙа.

Урамда сауҙа иткән, тәғәйенләнмәгән урында көнкүреш хеҙмәте күрһәткәндәргә әбей-һәбей генә инмәй. Йыш ҡына эшҡыуарҙар, берәр оло кешене ултыртып, үҙ тауарын кеше күпләп йөрөгән урындарға шулай һатыуға сығара. Башлыса миҙгел өсөн кәрәкле әйберҙәрҙе генә һата. Йәй көнө, мәсәлән, бер-ике раскладушка йәйеп, ҡояштан һаҡлай торған күҙлек, эшләпә, кепка, сланцы һата. Көҙөн йылы ойоҡтар, башлыҡ, бейәләй-бирсәткәләргә күсә. Улар оло майҙансыҡ алып тороуы, өҫтәл тирәһе ҙур-ҙур сумкалар менән тулы булыуы менән айырыла. Бындай сауҙа рәте янынан үтеп китеүе лә ауыр. Был проблема башҡа ҡалалар өсөн дә көнүҙәк. Әлеге законға ярашлы штраф һалыуҙар бына шундайҙарға ҡағылһа, һис насарлығы юҡ. Ә бына осто-осҡа ялғаған әбей-бабайҙарға түгел. Бәлки, улар өсөн ниндәйҙер айырым урын тәғәйенләү кәрәктер?

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Баймаҡ районы биләмәһендә урынлашҡан Талҡаҫ күле тиҙҙән тәбиғәт комарткыһы статусы аласаҡ, тип хәбәр итәләр Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһенән. Был бик тә ваҡытлы ҡарар, тип баһалана, шулай бит?***

*Әҙһәм КӘЙЕКБИРҘИН, пенсионер:* Талҡаҫҡа тәбиғәт ҡомартҡыһы статусы биреү күптән кәрәк ине, һуңлай яҙҙыҡ: юғиһә, бик ҙур кер йыуыу машинаһына әйләнеп бара ине. Йәй көндәре яр сите, ҡышҡыһын боҙ өҫтө тулы автомобиль. Уларын йыуып, күлде бысратыуҙары етмәгән, арттарынан ҡый-һай, буш шешәләр генә ятып ҡала. Шул тиклем дә вәхши булыр икән әҙәм балаһы! Былтыр күлдең Түбә ҡасабаһы яҡлап осонда булырға тура килде. Кемдер матур итеп таҡтанан палаткалар яһаған, бер нисә бәҙрәф бар. Юҡ, ағас төбө һайын әҙәм ярауы. Ауыл халҡы улай ҡыланмай. Ҡаланыҡыларҙың ғына эше был. Үҙҙәре ҡупшы кейенеп йөрөһәләр ҙә ҡылған эштәре шул хәтле хәшәрәт.

Тағы бер мәсьәлә буйынса шундай тәҡдимем бар: Талҡаҫ яры буйлап тиерлек үтә торған юлды ябырға кәрәк. Ул күлдең көнбайышынан, Исмәғил, Моратша һәм Динамит таУынын арьяғынан һалынһа, бик шәп буласаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы комиссия балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһына эштәр ҡабул итә. Документтар түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: Өфө, Революция урамы, 18, Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы, 23-сө бүлмә. Белешмәләр өсөн телефон: 280-87-75.

✔Былтыр мәктәп автопарҡы 115 яңы транспорт сараһы менән тулыланды. Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Ғафури, Дыуан, Йәрмәкәй, Йылайыр, Иглин, Ишембай, Ҡалтасы, Мәләүез, Туймазы, Учалы, Хәйбулла, Ағиҙел, Нефтекама, Стәрлетамаҡ, Өфө һәм башҡа район-ҡалалар, шулай уҡ Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығы ведомствоһындағы алты белем биреү ойошмаһы яңы автобуслы булды. Былтыр августа республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы төбәк бюджеты иҫәбенә (104,7 миллион һум) 44 автобус алды, тип хәбәр ителәйне.

✔Башҡортостанда ҡышҡы каникулда "Ирәмәл" тәбиғәт паркына 1,5 меңдән ашыу турист килгән, тип хәбәр итәләр республиканың Экология министрлығынан. Ә 390 кеше "Моразым тарлауығы"на барған, 20 турист "Асылыкүл" тәбиғәт паркында ял иткән. "Кандракүл" һәм "Еҙем" парктарында туристарҙы иҫәпләмәгәндәр.

✔Башҡортостанда 18-31 ғинуарҙа Холокост ҡорбандарын иҫкә алыу аҙналығы уҙғарыла. Тейешле бойороҡҡа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Саралар Халыҡ-ара Холокост ҡорбандарын иҫкә алыу көнөнә һәм Ҡыҙыл Армия көсө менән Аушвиц (Освенцим) үлем лагерын азат итеүҙең 76 йыллығына арнала. Уларҙы әҙерләү һәм уҙғарыу өсөн Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов етәкселегендә ойоштороу комитеты төҙөлгән, саралар планы әҙерләнгән.

✔Башҡортостан ауылдарында 2020 йылда социаль ҡуртым килешеүҙәре буйынса 61 йорт төҙөлдө, тип хәбәр иттеләр Ауыл хужалығы министрлығынан. Билдәләнеүенсә, программаның был йүнәлеше, тәү сиратта, ауылдарға квалификациялы белгестәр - агросәнәғәт комплексы, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеүгә йүнәлтелгән. Программа федераль, республика һәм урындағы бюджеттарҙан финансалана.

ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ

# ҒӘЛИ СОҠОРОЙҒА АРНАП...



**Тәтешле районында күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе һәм дин әһеле Ғәли Соҡоройҙоң (Мөхәммәтғәли Ғәбдессалих улы Кейеков) тыуыуына 195 йыл тулыуға арналған саралар үтте. Табын башҡорттарынан булған данлыҡлы шәхестең исемен мәңгеләштереү байрамында республика Хөкүмәте вәкилдәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары, тарихсылар, Кейековтар нәҫеләнең вариҫтары ҡатнашты.**

Ғәли Соҡорой 1826 йылда Өфө губернаһы Бөрө өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Тәтешле районы) Иҫке Соҡор ауылында тыуған. Шаҡтай бай һәм күп яҡлы әҙәби мираҫ ҡалдырған. Беҙҙең көндәргә ундан артыҡ баҫма китабы һәм бер нисә тиҫтә ҡулъяҙма әҫәре килеп еткән. Ғәли Соҡорой сығышы менән мулла ғаиләһенән. Уның ҡартатаһы Кейек старшина Ҡара Табын башҡорт ырыуында иң атаҡлы кешеләрҙең береһе булған. Мөхәммәтғәли үҙ тыуған ауылы, яҡын-тирәләге һәм алыҫыраҡ мәҙрәсәләрҙә 22 йәшенә тиклем һабаҡ алған, дин ғилемен ныҡлы үҙләштергән. Күпмелер ваҡыт Көньяҡ Урал, ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡытып йөрөгәндән һуң 1849 йылда Стәрлебаш мәҙрәсәһенә килә һәм бер ни тиклем белемен камиллаштырып, үҙе шунда шәкерттәргә дәрес бирә башлай. Мәҙрәсәлә уҡыткан шағир Шәмсетдин Зәки менән дуҫлаша, унан шиғриәт серҙәренә өйрәнә. 1852 йылда тыуған ауылына әйләнеп ҡайта һәм ғүмеренең аҙағынаса шунда йәшәп, крәҫтиән эше менән шөғөлләнеп, балалар уҡытып ғүмер итә.

Ғәли Соҡорой 3 ҡыҙ, 5 ул тәрбиәләп үҫтерә. Ғатаулла, Ғиниәтулла, Ғарифулла исемле улдары шулай уҡ заманының уҡымышлы кешеләре булып таныла. Әйткәндәй, Ғарифулла Кейеков та яҙыусы булараҡ билдәле. "Беҙ урман башҡорто булабыҙ. Урман әрсеп, бесәнлек вә игенлек яһап, бар ваҡытымды һәм көсөмдө шул шөғөлдәргә сарыф ҡылдым, - тип яҙған Ғәли Соҡорой. - Мәсет һәм мәҙрәсә араһында хеҙмәт итеп, ирәкте башҡортоноң иң ғәли миннәтле заты булып торамын". Ғәли Соҡорой ун ете йәшендә беренсе шиғырҙарын әсәһенә һәм уҡытыусыһына бағышлап яҙған. Уның ижадына Урта Азия шағирҙары Әхмәт Йәсәүи, Аллаяр-Суфи, Фирҙәүси, Сәғҙи, Хафиз йоғонто яһай. Ул бик күп китаптар авторы. Ләкин уның байтаҡ әҫәрҙәре әле лә баҫтырылмаған. Ҡулъяҙмаларының күп өлөшө Башҡортостан Республикаһының Милли китапханаһында һаҡлана. Был ҡулъяҙмаларҙы улы Ғарифулла Кейеков тапшырған. Ғәли Соҡоройҙоң иң ҙур әҙәби мираҫы итеп уның шәжәрәһен атарға була. Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе XVII-XVIII быуаттар тирәһендә яҙылған. Ул башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем Ҡазан ханлығы менән мөнәсәбәтен сағылдыра. Шулай уҡ "Тәүарихи Болғарийә, йәки Тәкриби Ғари" тигән тарихи-әҙәби әҫәре лә иғтибарға лайыҡ. Әлеге көндә китап Рәсәй Фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының Санкт-Петербург бүлеге фондында һаҡлана.

КӨНАУАЗ

# КӨТМӘГӘНДӘ...

## юлдар икенсе йүнәлеш алды

(Башы 1-се биттә).

● Автомобилдәр ағымының йүнәлешен бер аҙ үҙгәртеү маҡсатында быға тиклем Посадская, Сун-Ят-Сен, Октябрь Революцияһы, Минһажев һ.б. урамдарҙа юлдар ремонтланған. Посадская урамында Салауат Юлаев проспекты йүнәлешендә һәм Минһажев урамында ҡала үҙәге йүнәлешендә бер яҡлы хәрәкәт индерелә, бынан тыш, Октябрь Революцияһы урамынан төшкәндә һул яҡҡа боролоу һәм эргәләге урамдарҙа транспорт сараларын парковкалау, Зәки Вәлиди, Пушкин, Октябрь Революцияһы, Коммунистик, Минһажев, Ветошников урамдарында автотранспорт парковкалары тыйыла. Менделеев, Сун-Ят-Сен, Воровский, Минһажев урамдары сатында светофорҙарҙың эш режимы көйләнгән. Шулай уҡ Яр буйы урамы менән Дуҫлыҡ Монументы майҙаны, Зәки Вәлиди урамы менән "Торатау" Конгресс-холы районында яр буйына төшкән урында өҫтәмә светофорҙар ҡуйылған. Ҡала үҙәгенән Дуҫлыҡ Монументына йәки кире йүнәлештә хәрәкәт иткәндә граждандар Яр буйы урамын файҙалана ала. Бынан тыш, Октябрь Революцияһы, Бәкалы, Киров, Ғәбәйҙуллин урамдарын һәм башҡа төньяҡтараҡ урынлашҡан урамдарҙы файҙаланырға мөмкин. Төҙөлөш эштәре барышында Салауат Юлаев проспектынан Әй урамына тиклемге арауыҡта көндөҙгө ваҡытта йөк транспорты хәрәкәте туҡтатылған. Тейешле мәғлүмәт барлыҡ сауҙа селтәрҙәренә һәм транспорт компанияларына еткерелгән.

Реконструкция эштәре барышында автомобиль хужалары тығындарҙы булдырмау өсөн урау юлдарҙы һайлай ала. Мәҫәлән, Дим районы халҡы Өфөгә Затон бистәһе аша йөрөй ала. Шулай уҡ "Пугачев урамы - Нуғай шоссеһы - М5 федераль трассаһы" маршрутын да файҙаланырға була. Ҡаланың төньяҡ өлөшөндә йәшәүселәргә "Интернациональ урамы - Перспективалы урам - М5 федераль трассаһы" маршруты тәҡдим ителә.

● Автотранспорт хәрәкәте үҙгәреүе сәбәпле, ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында барлыҡ мәғлүмәт, схемалар, урау юлдар варианттары һәм барлыҡ һорауҙарға аңлатмалар тупланған махсус бүлек эшләй. Йәмәғәт транспорты ла маршрутын үҙгәртә, әммә туҡталыштар үҙгәрмәй. Был юл буйынса 31, 51, 51а, 211, 234, 291, 14, 57, 57а, 214, 216, 257к, 277, 298, 54, 232, 235 һанлы автобус маршруттары үтә, уларҙың хәрәкәтен № 2А, № 2Б, № 2В схемаһында күрергә мөмкин. Транспорт урау юлдан йөрөгәс, йәмәғәт транспорты менән файҙаланыусыларға юлдағы ваҡыттың оҙайлыраҡ булыуын иҫәпкә алырға кәрәк. Әйткәндәй, № 31, 51, 57, 234, 235, 262к, 291 маршруттарында автобустар һаны 22 берәмеккә арттырылған. Шулай уҡ шәхси автотранспорт хужаларына ла хәрәкәт маршрутын алдан планлаштырыу зарур.

● Әлбиттә, ҡала ҙурайған һәм халыҡтың йәшәү кимәле үҫкән һайын тәү сиратта юл проблемаһы тыуып торасаҡ. Әммә граждандарҙы проект хаҡында алдан тейешле кимәлдә иҫкәртмәйенсә, 30 декабрҙә генә иғлан итеп, 8 ғинуарҙа уны тормошҡа ашыра башлауҙары борсой. Ғәмәлдә иһә Өфө ҡалаһының генераль планында Салауат Юлаев проспекты проекты беренсе тапҡыр уҙған быуаттың 70-се йылдарында барлыҡҡа килә. Һуңынан проект 2000 йылда эшләнеп бөтөп, 2007 йылда ҡулланыуға тапшырыла. Шул ваҡытта уҡ юл сиселешенең камил булмауы, унан төшөү юлдарының етмәүе билдәле була. 2017 йылда ғына юл сиселешен реконструкциялау проекты раҫлана һәм ул өсөнсө күпер төҙөлөшө менән тығыҙ бәйләнгән, әммә финанстар бары тик 2020 йылда ғына бүленә һәм шунда уҡ эш тә башлана. Заманса мәғлүмәт технологиялары заманында йәшәйбеҙ, тиһәк тә, ҡайһы берәүҙәр Яңы йыл каникулдарында махсус рәүештә яңылыҡтарҙан ял итеү өсөн цивилизациянан ситкәрәк китергә, аҙна-ун көн бер ниндәй бәйләнеш булмаған ерҙәрҙә йөрөрөргә тырыша... һәм ҡайтыуҙарына шундай яңылыҡ ҡаршы ала.

● Эш аҙнаһы башланыуы юлдарҙа "тығын"дар барлыҡҡа килтермәһен өсөн баш ҡала муниципалитеты хакимиәтенең һәм ҡала хеҙмәттәренең (20,5 мең самаһы кеше) эш көнө иртәнге 9-ҙан түгел, ә 8-ҙән башлана хәҙер. Был иртәнге 8-ҙән 9-ға тиклем барлыҡҡа килгән "тығын"дарҙы бер аҙ кәметеүгә лә килтерергә тейеш. Шулай уҡ ҡаланан ситтә йәшәгән (аэропорт йүнәлешендә) ғаиләләр балаларын балалар баҡсаһына һәм мәктәптәргә иртәнге 7-лә килтерә ала. Уларҙы дежур төркөмдәр ҡабул итәсәк. Ә мәктәп уҡыусылары дәрестәр башланғанын тантаналар залында йәки дежур кластарҙа көтөп тора ала.

Ауыҙың бер бешкәс, һалҡын ҡатыҡты ла өрөп ҡабаһың, тигәндәй, халыҡ хәҙер алдағыһын хәстәрләп, киләсәктә Шаҡша һәм Затон күперҙәрендә лә ремонт башланып, уларҙа ла шундай проблема килеп тыумаҫмы, тип борсола. Ҡала хакимиәте мәғлүмәттәренә ҡарағанда, был объекттар буйынса проекттар эшләнә, әммә әлегә финанс мәсьәләһе хәл ителмәгән.

### Теманы дауам итеп...

**"Вести-Башкортостан" телеканалының "Интервью" программаһы эфирында Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Төҙөлөш, юлдар һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы вазифаһын башҡарыусы Константин Паппе көнүҙәк һорауҙарға яуап бирҙе.**

**▸ Республика Башлығының реконструкция эштәре мөҙҙәтен ҡыҫҡартыу буйынса күрһәтмәһе булды. Уны нисек тормошҡа ашырырға уйлайһығыҙ һәм был башҡарылған эштең сифатында сағылмаҫмы?**

- Был мәсьәлә өҫтөндә эшләйбеҙ, инженерҙар советын йыйҙыҡ. Әле үк төҙөлөш ваҡытын ҡыҫҡартыу мөмкинлеге биргән фекерҙәр бар. Әммә быны өсөн ҡайны бер эксперт советтарын үткәрергә кәрәк. Шунан ғына һуңғы һүҙ әйтергә мөмкин. Эштәр тәүлек әйләнәһенә алып барыла, ләкин ҡайһы бер технологик мәсьәләләр арҡаһында эш туҡтатылып тороуы ла ихтимал. Мәҫәлән, ҡышҡы осорҙа бетон һалыу өсөн ул тәүҙә йылытылырға тейеш, йәғни бетон ныҡымай тороп, башҡа эштәрҙе дауам итеү ярамай.

**▸ Баштан уҡ юл ноябрь һуңында тапшырыласаҡ тип күҙалланғайны, ә хәҙер ниндәй мөҙҙәт ҡарала?**

- Беҙ ваҡыттан бер ни тиклем алда барабыҙ, аныҡлап әйткәндә, реконструкцияны өс этапта үткәрергә, беренсеһендә ғәмәлдәге юлға Һупайлы бистәһе яғынан тағы бер юл, икенсе этапта Ағиҙел яғынан бер юл төҙә-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Комиссия биш кандидатҡа Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы вазифаһына конкурста ҡатнашырға мөмкинлек бирҙе: Ғафаров Артур, Греков Сергей, Слепнёв Алексей, Тимиров Марат, Хафизов Рөстәм. Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын биләүгә конкурс 2021 йылдың 15 ғинуарында үтте. Ҡала Советы депутаттары кандидаттарҙың береһен раҫлау тураһында ҡарар ҡабул итергә тейеш.

✓Билдәле көрәшсе Джефф Монсон 49 йәшендә профессиональ карьераһын тамамланы. Владимир Путин 2018 йылда көрәшсегә Рәсәй граждандарлығы биргәне. Хәҙер Монсон Өфөлә йәшәргә, Башҡортостанда джиу-джитсу һәм грэпплинг мәктәптәрен асырға, Рәсәйҙең ошо спорт төрө буйынса йыйылма командаһына етәкселек итергә ниәтләй. Әлеге ваҡытта ул - Мәскәү өлкәһе Красногорск ҡала советы депутаты.

✓2021 йылдың 18 ғинуарында 34-се мәктәптең тамашалар залында (Зоя Космодемьянская урамы, 38) Өфөнөң Киров районында Ҡояшлы пляжын төҙөкләндереү буйынса йәмәғәт тыңлауҙары була. Төҙөкләндереү проектының презентацияһы www.gorodufa.ru сайтында, Өфө хакимиәтенең Баш архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығының социаль селтәрендә урынлаштырылған. Йәмәғәт тыңлауҙарында теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Киске сәғәт 7-лә башлана.

✓Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 2020 йылдың апреленән декабренә тиклем Рәсәйҙә коммуналь хеҙмәттәрҙе ваҡытында түләмәгән өсөн пеня һәм штраф һалынманы. 2021 йылдың 1 ғинуарынан иһә йыйылған бурыс өсөн пеня һәм штраф һалыу тергеҙелде. Ҡанунлаткә ярашлы, пеня бөтә бурыс, шул иҫәптән 2020 йыл өсөн дә һалыныға тейеш. Өҫтәмә сығымдар булмаһын өсөн бурыска юл ҡуймаҫҡа, әгәр йыйылып китһә, билдәләнгән ваҡытта түләп бөтөрөргә кәрәк. Ауыр финанс хәлендә ҡалған граждандар өсөн бурысты һәм ағымдағы сумманы бүлеп түләү механизмы ҡаралған.

✓"Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йорто Октябрь проспектында урынлашҡан "Китап" нәшриәтен һатыуға ҡуйған. Аукцион 2021 йылдың 12 февраленә тәғәйенләнгән, тип хәбәр итәлә һатыулашыуҙың рәсми сайтында. Башланғыс хаҡы - 498,2 миллион һум. Дөйөм майҙаны 8,5 мең квадрат метрлыҡ 35 бина, шул иҫәптән склдатар, гараж, трансформатор станцияһы һатыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ *Юл үткәргестә реконструкциялау Зәки Вәлиди урамын 4 һыҙаттан 6 һыҙатҡаса киңәйтеүҙе генә күҙалламай, беҙ Салауат Юлаев проспекты буйлап киңәйтелгән айырым хәрәкәт һыҙатына ла эйә булабыҙ.***



тергә тейеш инек. Өсөнсө этапта ур-та өлөштә һүтеп, шул урында тағы бер юл үткәргес эшләргә планлаштырғайныҡ. Бөгөн эшләнгән һәм тормошҡа ашырылған хәрәкәт схемаһы барлыҡ эштәрҙе бер этапта башҡарыу мөмкинлеге бирә. Өҫтәүенә, хәҙер тимер-бетон кострукциялар объектта түгел, ә цех биналарында эшләү мөмкинлеген ҡарайбыҙ, йәғни әҙер материалды килтереп, урында монтаж ғына эшләргә була. Былар барыһы ла төҙөлөш ваҡытын ҡыҫҡартырға ярҙам итә.

**▸ Ҡала был объектты реконструкцияларға күптән планлаштыра, әммә ни өсөн ошондай киң ҡоласлы эш башланасағы тураһында халыҡҡа алдан хәбәр ителмәне?**

- Тап ошо эш мөҙҙәтен ҡыҫҡартыу маҡсатында проект институттары тарафынан ҡарарҙарҙы оптималләштереү, макро кимәлдә транспорт моделләштереүе буйынса эш алып барылды. Йәғни юл сиселеше үҙе генә түгел, уның эргә-тирәһендәге кварталдар ҡаралып, тикшерелеп, һыңғай һөҙөмтә алғас ҡына ҡарар ҡабул ителде. Ә быдай схемалар бик күп булды.

**▸ Ниндәй варианттар булды? Юғары иҡтисад мәктәбе белгестәре ярҙам иттеме?**

- Улар моделләштереүҙә, схеманы Мәскәүҙән Гипростроймост институты эшләне. Тәжрибәле институт, Рәсәйҙең яртыһында тиерлек, шул иҫәптән яҡын сит илдәрҙә лә күперҙәрҙе улар проектлаған. Схеманы улар тәҡдим итте, уларҙың техник хәл ителешен Юғары иҡтисад мәктәбе тикшерҙе. Иң ҡулай вариант һайланғас ҡына халыҡҡа хәбәр иттек, йәғни һөҙөмтә алынғанға тиклем тиҙерәк һәм яҡшыраҡ эшләп була икәнлеге хаҡында әйтергә лә ҡурҡтыҡ.

**▸ Был бөгөн беҙ күргән вариантмы?**

- Эйе, тап шул. Өс этаплы реконструкция эштәрен моделләштереү һөҙөмтәләрен шулай уҡ "тығын"дар күрһәтте. Ғөмүмән, реконструкцияға тиклем дә ғәҙәти көндәрҙә Салауат Юлаев проспекты йүнәлешендә 300 метрға тиклем "тығын"дар күҙәтелде, эштәрҙе өс этапта үткәрһәк, ул 950 метрға тиклем һуҙылыр ине. Бөгөн тормошҡа ашырған вариант буйынса "тығын" 1200 метрға етә, әммә төҙөлөш ваҡыты ярты йылға тиклем ҡыҫҡара.

**▸ Эштәр ҡышын башланды һәм юлдарҙы таҙартыу ихтыяжы менән дә ҡатмарлаша. Ә махсус хеҙмәттәр, МЧС, тиҙ ярҙам, ЮХХДИ техникаһы хәрәкәте нисек көйләнәсәк?**

- Барлыҡ хеҙмәттәр, шул иҫәптән "Башавтотранс" һәм башҡа йәмәғәт транспорты иҫкәртелгән. Ҡайһы бер маршруттарҙа маршрут оҙайлығы 15-25 минутҡа артыуы һөҙөмтәһендә өҫтәмә автобустар сығарыла. Ни өсөн эштәр ҡышын башланды? Яҙҙы көтһәк, эштәрҙе ҡыҫҡа ваҡытта тамамлау өсөн күҙалланған 11 ай иртә яҙға йәки һуң ҡышҡа тура килә. Төҙөлөш эштәре асфальт-бетон һалыу менән тамамланырға тейеш, ә был ваҡытта асфальт түшәү ярамай. Тимәк, эштәр тулыһынса тиерлек тамамланыу алдында булһа ла өҙөклөк барлыҡҡа килә. Әлеге схема буйынса, төп төҙөлөш конструкциялары буйынса эштәр июль-августа тамамланып, ҡалған эштәрҙе ноябргә тиклем тулыһынса башҡарып бөтөргә тейешбеҙ.

**▸ Барлыҡ эштәр тамамланғандан һуң беҙ ниндәй һөҙөмтә алырбыҙ? Был эштәр хәл-торошто яҡшыртыу теләгеме, әллә ихтыяжмы?**

- Транспорт хәл-торошон яҡшыртыу теләге һәр саҡ бар, ғәмәлдә ул - ихтыяж. Барыбыҙ ҙа өсөнсө күпер төҙөлөүе хаҡында хәбәрҙар. Ул төҙөлөп бөтһә, өс күперҙән сыҡҡан транспорт бер нөктәгә килеп туктай һәм шуға ла уны киңәйтергә кәрәк. Юл үткәргестә реконструкциялау Зәки Вәлиди урамын 4 һыҙаттан 6 һыҙатҡаса киңәйтеүҙе генә күҙалламай, беҙ Салауат Юлаев проспекты буйлап киңәйтелгән айырым хәрәкәт һыҙатына ла эйә булабыҙ. Тимәк, был теләк кенә түгел, ә ихтыяж.

**▸ 11 ғинуарҙы алып ҡарағанда, транспорт хәл-торошон яҡшыртыу буйынса саралар ғәмәлдә һөҙөмтә бирҙеме?**

- Ысынлап та, нимәлер эшләнде, уларҙың ҡайһы берҙәре һөҙөмтәле булды, ҡайһылары - юҡ. Мәҫәлән, 11 ғинуарҙа иртәнге 8-се ярты менән 10-сы ярты араһында 9 баллы "тығын"дар күҙәтелһә, икенсе көндө улар кәмене. Саралар ҡулланыла һәм улар һөҙөмтә бирә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СҮП-САР ӨСӨН...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостанда сүп-сар сығарыу өсөн түләүҙе арттырырға кәрәклеге тураһында белдерҙе.**

2019 йылдың ғинуарынан республикала әлеге коммуналь хеҙмәт өсөн граждандарға берҙәм билдәләнгән хаҡ индерелгәйне. 2020 йылдың 1 сентябренән элек 70 һум түләгәндәр өсөн хаҡ айына 75 һумға, элек 35 һум түләгәндәр өсөн 55 һумға күтәрелде. Властар белдереүенсә, сумма 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем тораҡ пункттан сүп-сар сығарыуға йәки сығармауға ҡарап ваҡытлыса билдәләнде. "Беҙ билдәләгән тариф иҡтисади яҡтан нигеҙләнмәгән, ул күпкә түбәнерәк. Беҙ быға аңлы рәүештә барҙыҡ. Хәҙер бурыстың беренсе этабы үтәлде - сүпте сығара башланылар. Киләһе этапты тормошҡа ашырырға - ҡалдыҡтарҙы эшкәртә башларға кәрәк. Шуға күрә сүп-сар сығарыу өсөн тарифты арттырыуҙың киләһе этабы тураһында уйлау мөһим", - тине Радий Хәбиров. Шулай итеп, республикала сүп-сар сығарыу өсөн түләү Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса дәүләт комитетының биш зона өсөн билдәләгән күләменә - 75-106 һумға тиклем арттырыла.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

**Ҡала хакимиәтендә үткән видеобәйләнеш форматындағы оператив кәңәшмәлә оҙайлы ял көндәрендәге хәл-күренештәр анализланды.**

Байрам көндәрендә баш ҡалала барлығы 612 юл-транспорт ваҡиғаһы күҙәтелгән, унда 33 кеше зыян күргән, бер кеше һәләк булған. Боҙ ҡаласыҡтарында хоҡуҡ һаҡсылары дежурҙа булған, 55 видеокамера тәүлек әйләнәһенә майҙансыҡтарҙы күҙәткән. Боҙ ҡаласыҡтарын даими тикшереү һөҙөмтәһендә халыҡтың йәрәхәтләнеү ихтималлығы кәмегән. Шулай ҙа 11 кеше, шул иҫәптән 10 бала, уларҙың 2-һе - рөхсәт ителгән тауҙан шыуғанда, 8-е рөхсәт ителмәгән урында тау шыуыу һөҙөмтәһендә, 1 бала катокта зыян күргән. Мәғлүмәт-диспетчер үҙәгенә килгән мөрәжәғәттәр буйынса, Әҙләү-ҡотҡарыу хеҙмәте 35 тапҡыр эҙләүгә сыҡҡан, 6 кеше ҡотҡарылған.

Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, байрам көндәрендә ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре тәүлек әйләнәһенә эшләгән. Һәр сменаға 260 берәмек техника һәм көндөҙ - 450, төнгөлөккә 180 кеше йәлеп ителгән. Көҙгө-ҡышҡы осорҙа ҡар полигондарына һәм ҡар иретеү пункттарына 315 мең кубометрҙан ашыу, ә 1-11 ғинуарҙа 138 кубометр ҡар сығарылған.

"Ҡаланы таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ" предприятиеһы директоры Айрат Әхмәтов белдереүенсә, көн һайын Өфөнән 97 маршрут буйынса көнкүреш ҡалдыҡтары сығарылған. Предприятиелар сығарған күләмде лә индергәндә, байрам көндәрендә барлығы 11 мең тонна сүп-сар түгелгән.

Баш ҡаланың Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова уҡыусыларҙың каникулын ойоштороу тураһында һөйләне. Уның әйтеүенсә, ҡышҡы каникул осоронда саралар тематик көндәр сиктәрендә саф һауала һәм онлайн форматта үткән. Уларҙа барлығы 90 мең бала һәм уларҙың ата-әсәһе ҡатнашҡан. 3-6 ғинуарҙа үткән "Яңы йыл ғаиләүйындары"нда 3579 кеше ҡатнашҡан. 10 мең бала хоккей ҡумталарында һәм боҙ шыуғалаҡтарында күнекмәләр үткән, 13 милли йәкшәмбе мәктәбендә Башҡортостан халыҡтары традицияларын һаҡлауға йүнәлтелгән ижади саралар һәм дәрестәр уҙғарылған. Бынан тыш, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында 250 спорт һәм күңел асыу сараһы ойошторолған, уларҙа 47 мең самаһы тәрбиәләнеүсе һәм уларҙың ата-әсәһе ҡатнашҡан. Шулай уҡ каникул ваҡытында уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһына әҙерлек алып барылған, профиль сменалар ойошторолған, онлайн форматта уҡыу-күнекмә йыйындары үткән.

Әйткәндәй, яңы йылдың яңы аҙнаһында уҡыусылар оффлайн уҡыуға күсте. Иң мөһиме, сир таралмаһын да, яңы усаҡтар барлыҡҡа килмәһен. Юҡһа, онлайн уҡыу һөҙөмтәһендә уҡыусыларҙың белем кимәле түбәнәйеүен Мәғариф министрлығы ла бер тапҡыр ғына телгә алманы инде...

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк һәм нервы

❖ Берәр өлөш валериана тамырын, арыҫлан ҡойроғо үләнен, аҡ әнис (тмин) орлоғон, фенхель орлоғон бергә ҡушырға. Йыйылманың 2 ҡалағына 2 стакан (400 грамм) ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә. Төнәтмәне нервылар ҡуҙғығанда, йөрәк йыш типкәндә, йоҡлай алмай яфаланғанда көнөнә 3 тапҡыр 50-шәр мл эсергә. Бер нисә көн эсеү ҙә хәлде яҡшырта.

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы күтәрелеүгә һиҙгәс тә 2 ҡалаҡ мүк еләген ҡалаҡ менән иҙеп, 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Дауаны көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда берәр ҡалаҡ ҡабул итергә. Хәл тиҙ яҡшыра.

### Бала йүтәлләһә

❖ Ярты стакан баланды иҙеп, 1 стакан бал ҡушып бутарға. Көнөнә 4 тапҡыр, ашағандан һуң 1 балғалаҡ бирергә. Дауаны һыуытҡыста һаҡларға.

❖ Баландан әҙерләнгән төнәтмә лә балаларҙың йүтәлен дауалағанда бик файҙалы. 10 грамм баланға 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 40 минут төнәтергә һәм йылы көйөнсә көнөнә өстән бер стакан эсергә.

### Бөйөр

❖ Бөйөр сирҙәрен дауалағанда цикорий яҡшы ярҙам итә. 2 ҡалаҡ ваҡланған цикорий үләненә (сәскәләре менән) ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта йәки боҫта 10 минут торорға. Шунан һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Иҫкәртмә: ашҡаҙан һәм бөйән яҙваһы, нервы ярһыуы, гастрит булғандарға цикорийҙы ҡулланырға ярамаҫҡа мөмкин. Цикорий тамырынан яһалған эсемлектәр ҡан тамырҙарын киңәйтә һәм ҡан баҫымын күтәрә.

❖ 1 ҡалаҡ һарыүҙ (золототысячник), 1 ҡалаҡ еҫле һырмауыҡ (ясменник душистый), 2 ҡалаҡ айыу ҡолағы (коровяк скипетровидный), 2 ҡалаҡ аҡбаш (лабазник шестилепестной) үләндәрен ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. 1/3 стаканлап көнөнә биш тапҡырға тиклем эсергә ярай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Нияз Мәжитов уның боронғо тарихы тураһында күп хеҙмәттәр яҙҙы, бик күп фәнни-ғәмәли конференциялар ойошторҙо, һөҙөмтәлә Өфөнөң төрлө донъя карталарында билдәләнгән Башҡорт ҡалаһының варисы булыуын иҫбат итте.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Туҡыусылыҡ - сеймалды эшкәртеү, еп иләү һәм махсус ҡорамалдар, станоктар ярҙамында шунан туҡыма әҙерләүҙе үҙ эсенә алған боронғо йорт производствоһы. Күптән түгел һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙы был уғата кәрәкле оҫталыҡҡа эйә булған. Ҡулдан һуғылған туҡыманың күп өлөшө кейем тегеүгә сарыф ителгән, бер өлөшө йорт ҡаралтыға һәм хужалыҡ кәрәк-ярағы өсөн тотонолған.

Боронғо сығанаҡтарҙа һәм тарихи әҙәбиәттә мәғлүмәттәр, һүрәтләмәләр булмауы башҡорт туҡыусылығын хужалыҡтың традицион тармағы булараҡ өйрәнеүҙә ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Туҡыусылыҡ XX быуат урталарында ғына тәрәнәйтеп өйрәнелә башлай. 40-сы йылдар аҙағында Художестволы сәнғәт фәнни-тикшеренеү институтының бер төркөм ғалимдары һәм рәссамдары Л.И. Воронова етәкселегендә Өфө ҡалаһы музейҙарында эшләй. Башҡорт коллекциялары менән танышҡандан һуң Мәскәү ғалимдары республикала һөнәрсе кәсептәрен үҫтереү буйынса кәңәштәр төҙөлгән, туҡыусылыҡҡа ҙур иғтибар бирелә. Ҡыҙғаныска күрә Л.И. Вороновандың "Башҡорт туҡыусылығы" (1949) атамалы белешмәһе нәшер ителмәгән. Был ғилми үҙәк хеҙмәткәрҙәренең башҡорт халыҡ һөнәрҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы артабан да көмәмәй. 1962 йылда Е.Г. Яковлева етәкселегендәге Мәскәүҙән килгән ҙур булмаған экспедиция балаҫ һуғыу һәм туҡыусылыҡты өйрәнә. 1966 һәм 1967 йылдарҙа донъя күргән хеҙмәттәр йыйынтыҡтарында Е.Г. Яковлеваның Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында туҡыусылыҡтың торошо тураһында мәҡәләләре баҫыла. Юғары художестволы шаршауҙар, таҫтамалдар һәм йортто биҙәү өсөн ҡулланылған башҡа төр әйберҙәр яһаған башҡорт туҡыусыларының ижади ҡомарын тейешле баһалап, сәнғәт белгесе А.Г. Янбухтина ғилми хеҙмәттәрен йорт интерьерында биҙәкле туҡымаларҙы ҡулланыуға арнай.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 50-се йылдар аҙағында "Башҡорттарҙың биҙәү-ҡулланма сәнғәте" темаһы асылғас, этнографтар туҡыусылыҡҡа иғтибарын йүнәлтә һәм һөҙөмтәлә коллектив монография сығарыла (1964). Туҡыусылыҡ һәм биҙәкле туҡымалар буйынса Н.В. Бикбулатов төплө бер бүлек яҙа. Этнографтар әҙерләп, 1960 - 70-се йылдарҙа донъя күргән китаптарҙа һәм альбомдарҙа тап ошо тәрән тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп биҙәкле туҡымаларға һүрәтләмәләр яҙылған. Баҫмаларҙа XIX быуаттың иң һуңғы йылдарында йәки XX быуаттың тәүге ун йыллығында ауыл оҫталары эшләгән һәм Өфө, Ҡаҙан, Санкт-Петербург ҡалалары музейҙары фондтарында һаҡланып ҡалған иң яҡшы, зауыҡлы ҡулдан һуғылған туҡыма үрнәктәре күрһәтелгән. Этнографик экспедициялар барышында ла башҡорт ауылдарында байтаҡ әйберҙәр фотоға һәм һүрәткә төшөрөп алынған.

Этнографтар һәм сәнғәт белгестәре башҡорттарҙа туҡыма туҡыуҙы художестволы ижадтың үҙенсәлекле күренеше итеп өйрәнә. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре һәм айырым күҙәтеүҙәр тарихи-сағыштырма анализ методы буйынса этногенетика мәсьәләләрен хәл итеүгә йәлеп ителгән. Туҡыусылыҡ материалдарында, туҡымалар үҙенсәлегендә, орнамент төҙөлөшөндә, технологик процеста Көнсығыш (оҡшашлыҡтарҙың тәүге осор йүнәлеше) йәки Урал-Волга буйы һәм Көнбайыш Себер халыҡтары (һуңғы осор йүнәлеше) менән бәйләнештәр булыуы күҙәтелә. Әммә ғалимдарҙың иғтибары тәү сиратта биҙәкkә йүнәлтелгән булыуы һәм малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең туҡыусылыҡ һөнәренең бер төрлө үҙенсәлекле булыуы арҡаһында, башҡорт халҡының көньяҡ массивы өҫтән-мөҫтән генә өйрәнелгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ЙЫЛЫНАН...

## башҡорт тарихы йылына



**Былтыр декабрь һуңында уҙған Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышында 2021 йыл Башҡорт тарихы йылы тип иғлан ителде.**

Күптәр хәтерендә насар хәтирәләр ҡалдырған 2020 йыл Башҡорт теле йылы булараҡ һәм башҡа йәһәттән бик күп яҡшы эштәре менән тарихҡа инәсәк. Ҡоролтайҙың тарихи шәхестәрҙең исемен мәңгеләштереү буйынса эшен дә хуплау кәрәк. Мәҫәлән, былтыр Нуриман районы Иҫке Бүрес ауылында башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре Рәүеф Сәфәровҡа, Милли музей бинаһы фасадында билдәле дәүләт эшмәкәрҙәре Хафиз Ҡушаев һәм Муллаян Халиковҡа, Стәрлетамаҡ ҡалаһында легендар полководец Муса Мортазинға, Башҡорт дәүләт университеты бинаһында лингвист, Башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусы Ғәббәс Дәүләтшинға, Краснокама районы яңы Аҡтанышбаш ауылында 112-се кавалерия дивизияһы яугирҙары Хәнәфи Нурғәлиев һәм Әхмәтхужа Әхмәҙуллинға мемориаль таҡталар асылды; Яңауыл районы Яңы Артауыл ауылында башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыусы Хәлим Әмировҡа, Пермь крайы Барҙа ауылында билдәле шәхес, Гәйнә улысы старшинаһы, Уложенная комиссияның тәүге депутаты, Е. Пугачев ғәскәре полковнигы Туктамыш Ишбулатовҡа бюстар ҡуйыуҙы тормошҡа ашырыуын бөгөнгө глобаллашеү ваҡытында тамырҙарыңды һәм тарихыңды белеү өсөн күҙ алдында торған күргәҙмә әсбап менән сағыштырырға мөмкин. Көн һайын беҙҙе өнһөҙ генә сәләмләһәләр ҙә, хатта тормош ығы-зығыһы менән иғтибар бирмәһәк тә, улар беҙҙең арала һәм, иң мөһиме - ҡабаттан беҙҙең сафтарҙа.

Шулай уҡ "Шайморатов вариҫтары" проекты ла халыҡ тарафынан ихлас хупланды һәм күтәреп алынды. Ҡоролтай вәкилдәренең Рәсәйҙең хәрби архивында тикшеренеү эштәре алып барыуы һәм халыҡ ярҙамы һөҙөмтәһендә бөгөн 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары тураһында мәғлүмәт тупланыуы (барлығы 3901 исем йыйылған) берҙәмлекте тағы бер раҫланы. Әле был мәғлүмәттәр "Башҡорт энциклопедияһы" коллективына тапшырылған, унда энциклопедия талаптарына ярақлаштырып эшкәртелгәс, "Шайморатовсылар - легендар 112-се кавалерия дивизияһы яугирҙары" тип аталған биографик белешмәнең электрон варианты әҙерләнә, унын 200 данаһы баҫма рәүешендә донъя күрәсәк.

Шулай уҡ йылдың уңышлы проекттарының береһе тип "Без башкортлар" проектын (етәксеһе - Юлдаш Йосопов) билдәләп китеү зарур. Уның сиктәрендә 20 төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ районлары башҡорттары тарихына арналған бай материал туплаған брошюралар баҫыла, Тарихи башҡорт картаһы - башҡорт ырыуҙары һәм ауылдары картаһы төҙөлә. Медиа-материалдар донъя күрә: төньяҡ-көнбайыш диалектында клиптар яҙыла, видеоматериалдар сығарыла. Һәм шулар араһында иң ҙур эш - Мәскәү геральдика белгестәре ярҙамында ырыуҙарҙың гербтары эшләнә, уларҙы рәсмиләштереү тора. Ҡыҫҡаһы, яңы 2021 йылды Башҡорт тарихы йылы тип иғлан итеү өсөн Ҡоролтайҙа ныҡлы һәм ентекле база булдырылған.

"2020 йылдың Башҡорт теле йылы тип иғлан ителеүе һәм шул йүнәлештә маҡсатлы эштәр алып барылыуы бик ҙур этәргес көс булып торҙо, шуға ла киләһе йылды Башҡортостан, башҡорттар тарихында мөһим ваҡиғалар үтәсәген иҫәпкә алып, урындарҙағы ҡоролтайҙарҙың эшен әүҙемләштереү маҡсатында Башҡорт тарихы йылы тип иғлан итергә кәрәк, - тип белдерҙе Ҡоролтай Башҡарма комитетының Тарих комиссияһы етәксеһе Азат Ярмуллин. - Был матур башланғыстарҙы еренә еткереп теүәлләп ҡуйыу, яңы ҡыҙыҡлы проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн дә мөһим "Шайморатов вариҫтары" проекты 2021 йылда ла дауам ителәсәк, сөнки йыйынтыҡ эшләгәндән һуң уны халыҡҡа таратырға ла кәрәк. "Без - башкортлар" проекты ла дауам итәсәк.

Тағы ла "Мортазин яуҙаштары, кәрәштәштәре" тигән проект әҙерләйбеҙ. Муса Мортазин менән бергә Совет-Польша яуында Өфө ҡалаһы, Учалы, Әбйәлил, Белорет, Баймаҡ, Йылайыр райондарынан, Силәбе, Ҡурған өлкәләренән һуңынан юғары вазифалар биләгән шәхестәр ҡатнашыуы билдәле. Уларҙы бөгөн беҙ белмәйбеҙ, тиерлек, шуға күрә исемдәрен мәңгеләштереү зарур. Шулай уҡ Каруанһарайҙың 175 йыллығы - башҡорттар өсөн ҙур юбилей һәм көньяҡ йүнәлеш буйынса "Каруанһарайға сәйәхәт" тарихи-мәғариф проектын тәҡдим итергә ниәтләйбеҙ, сөнки бөгөн күпме һөйләһәк тә йәштәр был турала бик белмәй, ә улар өсөн заманса технологияларға нигеҙләнеп эшләнгән виртуаль сәйәхәт ҡылыу платформаһы юҡ.

Тағы бер проект - "Мин - Төньяҡ амурҙары ырыуы нәҫеле". Ул кавдивизия яугирҙары проекты кеүегерәк буласаҡ, "Төньяҡ амурҙары" исемен алған ата-бабаларыбыҙҙың исемлеге билдәле. Ә 5-се, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан торған полк, Парижға барып етә. Бөгөн Нефтекама ҡалаһында казактар хәрәкәте әүҙемләште һәм заманында Бородино яланында башҡорт атлылары хөрмәтенә стела ҡуйған кеүек, Нефтекамала ла ошондай стела ҡуйылһа, ул төньяҡ-көнбайыш үҙәге булып китер, интеграцияға ярҙам иткән эштәрҙең береһе булыр ине. Шулай уҡ 2021 йылда арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең юбилейҙары һәм уларҙың исемен мәңгеләштереүҙе, "Башҡорт ырыуҙары" проектын дауам итәсәкбеҙ. Мөмкинлек булһа, башҡорт ырыуҙары йыйындарын үткәреүҙе планлаштырабыҙ..."

Азат Ярмуллин тағы бер мөһим тема тураһында әйтеп үтте. 2024 йылда Өфөнөң 450 йыллығы федераль кимәлдә үткәреләсәк, әммә Өфө тарихын төрлө этаптарға бүлеп өйрәнеүҙе дауам итергә кәрәк. Мәҫәлән, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының беренсе рәйесе Нияз Мәжитов уның боронғо тарихы тураһында күп хеҙмәттәр яҙҙы, бик күп фәнни-ғәмәли конференциялар ойошторҙо, һөҙөмтәлә Өфөнөң төрлө донъя карталарында билдәләнгән Башҡорт ҡалаһының вариҫы булыуын иҫбат итте. Шуға, буласаҡ байрамды Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүҙең - 450 йыллығы тип нарыҡларға, саралар программаһына Нияз Абдулхаҡ улының тыуыуына 90 йыллығы билдәләүҙе, шулай уҡ "Боронғо Өфө" музей комплексын төҙөп бөтөрөүҙе, уны туристарҙы ылыҡтырып торған үҙәккә әйләндереүҙе лә индерергә кәрәк.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

***Игорь КЫЗЛАСОВ, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы Өфөнөң тарихы тураһында бына нимә ти:***

"Һораужы Өфөгә нисә йәш тип түгел, нисә быуат, тип ҡуйыр инем. Уның нигеҙләнеү йылы 4-се быуат, бәлки, 3-сө быуат һуңылыр, шуға күрә, Өфөнөң йәше 16-17 быуат булырға мөмкин. Һәм һәр быуатта ул бөтөнләй икенсе ҡала булған, тип күҙаллана. Тәүҙә ул бер урында урынлашҡан, һуңынан яйлап ҡына күсенә башлаған һәм ахырҙа алда булған барлыҡ биләмәләрҙе "йотоп", шул уҡ майҙанды биләгән. Өфөнөң тарихи күсәгилешлеге 15-16 быуат дауам итеүенә шик юҡ. Хәйер, ундай ҡаласыҡтар ҙа юҡ тиерлек. Ҡала төҙөлөшө элементтары ҡарайыҡ. Өфө-II ҡаласығындағы иң ҙур мәҙәни ҡатлам дүрт метрҙан ашыуыраҡ. Был ҡатламдар ҡаласыҡтың бик боронғо булыуын раҫлай һәм уның Ер шарында аналогы юҡ. Был - феномен, был - Башҡортостан Республикаһының, Рәсәйҙең иғтибарға ғына лайыҡ түгел, ә халыҡ-ара әһәмиәткә эйә объект. Әгәр бында датаны аныҡ йылына тиклем билдәләргә, нисек итеп һауа торошонон, малсылыҡ, керамика тарихының үҙгәреүен күрергә мөмкин икән, ошо ҙур булмаған майҙанға әллә күпме халыҡ-ара экспедиция килтерергә, археология белгестәрен саҡырырға була. Күрәһегеҙме, ниндәй мөмкинлектәр бар!

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Ҡырҡтан ашыу башҡорт ырыуҙары араһында, әлеге ваҡытта башҡа бер төрки халыҡтарында ошо исемдәге этник төркөм булмаған хәлдә лә, тарихи сығанаҡтарҙа иҫкә алынған ҡәүемдәрҙең береһе - уран атамалы ырыу ҙа бар. Уран ырыуы башҡорттары, башлыса, хәҙерге Яңауыл районы ауылдарында йәшәй һәм төньяҡ башҡорт ырыуҙары составына инә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, хәҙерге заман башҡорт теле өсөн уран этнонимының бер ни тиклем ятыраҡ тойолоуы ла тиккә түгелдер - бында ла, бәғзе бер башҡорт ырыу атамаларына хас булғанса, тарихи боронғолоҡ саҡтылары сағылышы асыҡ һиҙелә. Әгәр ошондай сағыштырыу мөмкин булһа, "Уран" атамаһын да, телебеҙҙә архаик эпохаларҙан бирле һаҡланып ҡалған Урал топонимы кеүек үк, беҙҙең заманда ла башҡорттоң боронғолоғон белдереүсе феномен сифатында ҡарау урынлылыр.**

# АТЫБЫҘ - УРАН, ЗАТЫБЫҘ БАШҠОРТ БЕҘҘЕҢ



Хәҙерге заман этнологияһында уран ырыуының килеп сығышы ҡатмарлы һәм әлегә бер төрлө генә аңлатып булмай торған ғилми проблема булып ҡала. Тарихи яҙма-тикшеренеүҙәр (историография) өлкәһендә уран ырыуы менән бәйле байтаҡ ҡына ғилми хеҙмәттәрҙе атап була. XX быуатта йәшәгән төрөк дәүләт эшмәкәре һәм ғалим Мехмет Фуат Кёпрюлюҙең осман төрөктәре хаҡындағы әҫәрҙәрендә уран исемле ҡәүем дә иҫкә алына. Башҡорт этнологы Рәил Кузеев "Башҡорт халҡының килеп сығышы" исемле фундаменталь хеҙмәтендә уран ырыуы башҡорттарының дыуан ырыуы менән ҡәрҙәш булыуы хаҡындағы фаразын бәйән итә. Билдәле булыуынса, күренекле ғалим үҙенең ғилми яҙмаларында, тарихи сығанаҡтарҙан тыш, халыҡ араһында киң таралған риүәйәттәрҙе лә ҡуллана. Әлеге осраҡта ул Яңауыл районының Ҡарман ауылында табылған бер боронғо ҡулъяҙмала урандарҙың ата-бабаларының береһе сифатында Дыуан Һаҡал исемле кеше аталыуына таяна. Ғалим ошо исемде "Монголдарҙың йәшерен тарихы" тарихнамәһендә иҫкә алынған Дорбен тигән монгол ҡәбиләһенә нигеҙ һалыусы Дува-Сохор менән сағыштыра. Ул "дыуан этнонимын монголдарҙың дурбан (дюрбэн) ҡәбиләһе атамаһы менән идентификациялап (бер үк, тип иҫәпләп) була", - тип яҙа. "Күренеүенсә, урандарҙың этногенетик риүәйәттәре билдәле рәүештә дыуан ҡәбиләһе генеалогияһы менән бәйле", - тип фараз итә этнолог. Ғалим дыуан-уран исеме аҫтында башҡорттар составына ҡушылған этник төркөмдәрҙең заманында Үҙәк Азияла йәшәгән монгол йәиһә төрки-монгол мөхитенән сығыуын раҫлар өсөн етерлек дәлилдәр булыуына һылтана. Р.Ғ. Кузеевса, II мең йыллыҡ баштарында улар Арал буйы далаларында йәшәп, ҡара-ҡатай, табын һәм ҡыпсаҡ этносәйәси берләшмәләре тәьҫирендә этник трансформацияға дусар була, ә һуңынан Көньяҡ Урал тарафтарына күсеп китә.

Хәҙерге тарихсыларҙан Салауат Хәмиҙуллин Р.Ғ. Кузеевтың уран ырыуы хаҡындағы ҡайһы бер фекерҙәрен бер ни тиклем кимәлдә тәнҡит күҙлегенән ҡарау кәрәк, тип иҫәпләй. Унынса, беренсенән, "дыуан" һәм "дурбан" этнонимдарын бер үк, тип әйтеү өсөн нигеҙ юҡ. "Дурбан" ("дюрбэн", "дорбен") атамаһы монголса "дүрт" һанын аңлата, ә алдараҡ телгә алынған монгол юлбашсыһы Дува-Сохорҙың тап дүрт улы булып, уларҙың вариҫтары дүрт тармаҡлы Дорбен-ирген ҡәбиләһен хасил итә. Ошо ҡәбиләнең тәү бабаһы Дува-Сохор Сыңғыҙхан бабаларынан булған Добун-Мергендың оло ағаһы тип һанала. XIV быуат тарихсыһы Рәшид ад-Дин дә дурбандарҙың монгол-нирундар, йәғни ысын монголдарға ҡарауы хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған.

XVI быуатҡа ҡараған "Шейбани-намә" әҫәрендә Шейбани хандың олатаһы булған күсмә үзбәктәр дәүләтенә нигеҙ һалыусы Әбелхәйер ханға (1412-1468) теләктәшлек белдергән ҡәбиләләр араһында дурман (монголса - дорбэн) ҡәүеме лә теркәлгән. Ә XVII быуатта рус документтарында теркәлгән "дуван" исемле башҡорт ырыуының ошо ваҡыт арауығында ғына дурмандан дыуанға әйләнеүен ысынбарлыҡҡа тап килә, тип әйтеп булмай.

Шулай итеп, дурман - дыуан (дуван) этнонимдарын бер үк ҡәбиләгә ҡарауын раҫлау үтә бәхәсле. Шул уҡ Нуғай Урҙаһында дурмен һәм дыуан этнонимдары бер үк ваҡытта иҫкә алына.

Дыуан этнонимы нигеҙендә ысынбарлыҡта, күрәһең, Алтын Урҙа дәүләттәрендә "дуван" титулын йөрөтөүсе социаль ҡатлам кешеләре атамаһы ята. Мәҫәлән, Ҡаҙан ханы Мөхәммәт-Әминдең нуғай хакимы Муса мырҙаға ҡоҙалашыу мәсьәләһе буйынса һөйләшеү өсөн үҙенең Хушкилде исемле дуванын ебәреүе хаҡында 1489 йылда теркәлгән яҙма бар. Шул уҡ Нуғай Урҙаһында дуван вазифаһы булыуы хаҡында тикшеренеүсе Б. Кочекаев былай яҙа: "Дувандар бейҙең төрлө дипломатик һәм финансҡа ҡараған бойороҡтарын үтәгән, дипломатик хат алышыу алып барған, сит ил илселектәрен ҡаршы алған, бей янындағы совет сәркәтиптәре булған, сит ил кешеләре алып барған транзит сауҙаға һалынған пошлина йыйыуҙы етәкләгән, ҡул аҫтындағы халыҡтан һалым йыйған һәм хөкөм итеү функцияһын үтәгән".

Шуныһы ҡыҙыҡлы, Дыуан-Әйле шәжәрәһендә ошо ырыуҙың баш бабаһы сифатында Майҡы бейгә бер туған булған Юлбуға күрһәтелә. Ә Майҡы бейҙе шул уҡ табын, ирәкте, балыҡсы, танып ырыуҙары башҡорттары үҙҙәренең тәү бабаһы итеп таный. Әйткәндәй, 1725 йылда башҡорт ерҙәренә махсус рәүештә килгән Көнгөр бургомистры Юхнев үҙе төҙөгән башҡорт олоҫтары исемлегенә Дыуан-Табын олоҫон да теркәп ҡуйған. Әле аталған ырыуҙар менән бер рәттән, әйлеләрҙең, дыуан-әйлеләрҙең дә төп генетик маркеры R1a - M198 булған хәлдә, уран ырыуы вәкилдәренең N1c гаплотөркөмөнә ҡарауы асыҡланды. Был шулай уҡ уран башҡорттарының дыуандар менән яҡын нәҫелдәш булмауын күрһәтә. Тимәк, уран шәжәрәһендәге теркәлгән Дыуан Һаҡал исемле тәү бабаның бер нисек тә дыуан ырыуына мөнәсәбәте булмай, был бары тик ошо легендар шәхес биләгән вазифа менән бәйле атама-ҡушамат булыуы ғына мөмкин, тип фараз итергә ҡала. Ә бит дыуан ырыуының формалашыуы Алтын Урҙа дәүеренә ҡараһа, уран этнонимы бынан бик күпкә алдараҡ осорҙарҙы сағылдырған яҙма сығанаҡтарҙа осрай. Тап шуның өсөн этнолог Р.Ғ. Кузеевтың уран һәм дыуан ырыуҙарының бер сығышлы булыуҙары хаҡындағы фаразы менән килешеп булмай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Советтар Союзының икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә йәшәүсе совет хеҙмәтсәндәренең тәрән тылда күрһәткән фиҙаҡәрлеге - Ҡыҙыл Армияның үлемесле алыштарҙа еңеүгә өлгәшеүенең ныҡлы нигеҙе ул. Ошо героик дәүерҙә күҙәтелгән фронт һәм тыл берлеге халыҡтар тарихында быға саҡлы күрелмәгән ысынбарлыҡ феномены булып ҡабул ителде. Данлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһының һуғышҡа ингән тәүге көндәренән башлап, яугирҙар һәм уларҙың ғәзиз тыуған ере - Башҡортостан араһында тығыҙ бәйләнеш һис бер өҙөлмәй. Архивтарҙа һаҡланып, бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән тарихи документтар шул замандың тере ауазы кеүек ҡабул ителә. Ғөмүмән, башҡорт атлыларының яуҙарҙа ҡатнашыу тарихын тап ошо документтар аша аныҡыраҡ күҙ алдына килтереп була. Гәзитебеҙ биттәрендә баҫылып килгән атлы дивизиябыҙ хроникаһында был документтарҙың бер нисәһен, эпоханың сәйәси һәм тел үҙенсәлектәрен тулыһынса һаҡлап, һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

**Өфө ҡалаһы пионерҙары һәм уҡыусыларының 112-се Башҡорт атлы дивизияһына яҙған хаты.**

***1942 йыл 10 август.***

Һаумыһығыҙ, беҙҙең туғандарыбыҙ, һөйөклө атайҙарыбыҙ, ағайҙарыбыҙ. Күптән түгел беҙ "Красная звезда" гәзитендә Башҡорт дивизияһының фронттағы эше хаҡында уҡыныҡ. Һеҙҙең хаҡта шулай аҙ яҙылыуы беҙҙең өсөн бик йәл булды, беҙ Һеҙҙең турала уҡырға ла уҡырға һәм ҡәҙерле, һөйөклө яугирҙарыбыҙ хаҡында күберәк белергә теләнек. Беҙгә иптәш Нафиков йәл булды. Уның хаҡында уҡығанда беҙ иланыҡ. Яҡындарыбыҙ беҙҙең, иптәш Нафиков өсөн ҡанлы эттәрҙән үс алығыҙ, зинһар, ҡәһәр төшкөрө гитлерсыларҙы туҡмағыҙ, уларҙың баштырын сабып өҙөгөҙ, мәрхәмәт күрһәтмәгеҙ.

Беҙ немец һалдаттарының Кубандә, Белоруссияла, Украинала беҙҙең тиҫтерҙәребеҙҙе нисек яфалауҙары хаҡында күп уҡыйбыҙ. Беҙҙең ҡулдарыбыҙ көсһөҙөрәк әле, фронтҡа барыр өсөн бәләкәйерәкбеҙ әле, әммә беҙ үс алырға теләйбеҙ, үҙ күҙҙәребеҙ менән күргәндәребеҙ өсөн үслебеҙ. Яңыраҡ Өфөгә, Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йортона ата-әсәләре фашистар тарафынан язалап үлтерелгән балаларҙы килтерҙеләр. Беҙҙең башҡорт халҡы ул балаларҙы ташламаны, Бөрөнән делегация килеп, барса баланы тәрбиәгә алып ҡайтты; улар фотоға төшкән саҡта, күрергә тип, күп халыҡ йыйылды, ҡайһы ҡатын-ҡыҙҙар илашты.

Хәҙер бер аҙ үҙебеҙ тураһында. Беҙ яҡшы йәшәйбеҙ. Өфөнән күп уҡыусылар колхоздарға китте һәм унда яҡшы эшләйҙәр, уңыш йыйыу башланды инде, уңыш бик яҡшы, беҙҙең балалар утауҙа эшләне, бик шәп эшләнеләр, ғөмүмән, колхоздарҙа бик яҡшы эшләйҙәр.

8-12 йәштәге балалар өсөн пионер лагерҙары ойошторолған. Өфөлә элекке ял йорттарында лагерҙар ойошторолған. Бөгөн беҙ рус драма театрында йыйылдыҡ, беҙгә Һеҙҙең фронттағы эштәрегеҙ хаҡында һөйләнеләр. Беҙ бәләкәй балаларҙы тағы ла яҡшыраҡ ҡарашырбыҙ, фронтта булған яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам итербеҙ. Дарыу үләндәре, металл һыныҡтары йыйырбыҙ. Беҙ быларҙың барыһының да ҡайҙа кәрәклеген аңлайбыҙ.

Ҡәҙерлеләребеҙ, һөйөклөләребеҙ беҙҙең, беҙҙең хаҡта борсолмағыҙ, беҙ яҡшы йәшәйбеҙ, бына күрәһегеҙ, хатта беҙҙең күбебеҙ пионер лагеренда ял итә алды. Беҙ Һеҙҙән үтенеп һорайбыҙ, беҙгә йышыраҡ яҙығыҙ, һәм иң мөһиме, беҙ Һеҙҙең бөтөнөгөҙҙән дә ҡыйыуыраҡ һәм тәүәккәлерәк булыуығыҙҙы үтенәбеҙ, һәм беҙ башҡорт дивизияһының үҙенең боевой эштәре өсөн гвардия исемен алыуын бик теләйбеҙ. Һеҙҙән үтенәбеҙ, фашистарҙы ҡырығыҙ, был кеше ашаусыларҙы юҡ итегеҙ, беҙҙең еребеҙҙе ҡурҡыныс йыртҡыстарҙан азат итегеҙ. Һеҙгә нимәләр ебәрергә, ниҙәр тураһында белешергә, ни эшләргә кәрәклеге хаҡында беҙгә яҙығыҙ. Беҙ барыһын да эшләрбеҙ. Ну, әлегә. Уңыштар теләйбеҙ.

Сәләм менән Өфө ҡалаһы пионерҙары һәм уҡыусылары.

(ЦГИА РВ. Ф. 1458. Оп. I. Д. 15. Лл. 62-63.) Хаттың нөсхәһе рус телендә, бында башҡортсаға тәржемә итеп бирелде.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Сабырлыҡ һәм күндәмлек ни эшләптер яйлап негатив күренештәрҙең башланғысы булып ҡала. Тимәк, сабырлыҡ һәм күндәмлек менән бер ҡатар икенсе төрлө фиғелдәрҙе лә һалыу, өйрәтеү, аңлатып үҫтереү кәрәк ҡыҙҙарға.***



*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!*

**"Һаумыһығыҙ. Аптырап йөрөнөм дә һеҙгә яҙып ҡарарға булдым. Минең кеүек ҡатындар хаҡында яҙғандарығыҙҙы илап уҡыным, тап минең тормошто һүрәтләйһегеҙ. Ирем менән 17 йыл йәшәйбеҙ, 3 балабыҙ бар. Ни тиклем оҙағыраҡ йәшәйбеҙ, ул шулай ҡотора бара. Көн һайын эсеп ҡаңғыра, балалар биҙеп бөттө. Мине ураған һайын өйҙән ҡыуып сығара, туҡмай. Туғандары ҡурҡып бөттө, күршеләр ҡыҫылмай. Полиция ғаиләгә беҙ ярҙам итә алмайбыҙ, китегеҙ, ти ҙә ҡуя. Ошо 17 йылда күргәндәремде теҙеп яҙһам, бер ҡурҡыныс кино һымаҡ булыр ине. Һуңғы хәл бигерәк яман булды. Үҙем ярай инде, үҫмер ҡыҙыма бәйләнгән, Аллам һаҡлаған ярай ҙа... Китергә теләйем. Тик ҡайҙа, кемгә? Балаларҙы нисек итермен? Мине әҙерәк кенә ҡыйыуыраҡ булырға өйрәтегеҙ әле? Нимәнән башлайым икән?.."**

• "Әсәйемә ярҙам иткем килә. Атай гел башына һуғып, иҫәр итеп бөттө. Хәтере юҡ, вис онота, бер нәмәне ҡат-ҡат һөйләй. Атай еще "тауыҡ баш, тупой" тип көлөп ултыра. Әсәй былай туҡмалыуға бөтөнләй алйыр тип ҡурҡам. Айырылып ҡайҙа барам, тип илай. Миңә әле 18 генә йәш. Нисек итеп ҡарайым икән?"

# НИҢӘ ТУҠМАЛЫП ЙӘШӘҮГӘ КҮНӘҺЕҢ?

## Был һорау ғаиләһендә йәберләнеп йәшәүсе ҡатынға

"Нимә тип кенә яҙһам да, хәлемде аңлата алмаҫ һымаҡмын... Бөгөн төнө буйы ҡайҙа китергә икән тип уйлап сыҡтым. Йоҡлап китһәм, теге ир ҡайтып боларыр, ул килеүгә баҙға булһа ла төшөп йәшенеп өлгөрәйем тип ултырам..."

"Өләсәйемдә өйөндә насар ҡарайҙар. Этеп-төртөп мунсаға алып баралар, йәки үҙен сығарып ебәрәләр. Теге мәл ҡолап бөткән, тәне күгәргән. Пенсияһына уға бер нәмә лә алмайҙар. Асығам тип һөйләй. Полицияға яҙһам, быларҙы нисек иҫбатларға? Уны иҫәрләнгән ҡарсыҡ, тип әйтәсәктәр генә..."

Бына ошолай башлана миңә килгән смс-хаттарҙың күбеһе.

Ғаиләлә йәберләүгә ҡаршы закон тормошҡа ашырылыу юлында. Һәр хәлдә, депутаттар беҙгә шундай мәғлүмәт бирә. Был закондың тәртиптәре һәм ҡорбанды ла, тиранды ла үҙ урынына ҡуйыу юлдары ни рәүешле юлға һалыныр - әйтеүе ҡыйын. Ысынлап та, иң ауыр социаль мәсьәләләрҙең береһе булып сыҡты был.

• Билдәле хоҡуҡ һаҡлаусы Алена Попованың кәңәштәре буйынса, йәберләүсене язаға тарттырыу ошондай тәртиптә булырға тейеш: туҡмалған ҡатын травмпунктҡа мөрәжәғәт итә, яраларын теркәтә. Полиция туҡмалыу буйынса экспертиза үткәрергә тейеш. Әгәр был туҡмалыу итеп теркәлһә, уның буйынса административ тикшереү эше үткәрелә (ст. 6.1.1. КоАП РФ "Побои"). Артабан эш район судына ебәрелә. Ә инде ҡатын еңелсә генә тән яралары алған икән, полиция материалдарҙы мировой судьяларға тапшырыу тураһында ҡарар сығара ( 115-се статья УК РФ "Умышленное причинение легкого вреда здоровью"). Туҡмалған ҡатын үҙе барып, енәйәт эше асыуҙы һорап ғариза яҙа. Һәм ике осраҡта ла туҡмаусыны ике йыл дауамында яуапҡа тарттырып була.

Эйе, закон тарафынан бына ошолай ҡәтғи тәртиптәр ҙә яҙыла, әммә тормошта былар эшләмәй. Сөнки ҡыйырһытылған ҡатын-ҡыҙ был юлдарҙы үтеп сығырлыҡ көскә эйә түгел. Ундай аҙымдар яһарлыҡ һәм барын йырып сығырлыҡ рухи көсө булһа, ул ҡорбан да булып ҡалмаҫ ине, шулай бит? Әлеге мәсьәләне яҡындан өйрәнеп, бер йыл дауамында йәберләнеүсе күп кенә ҡатын-ҡыҙ менән аралашып, ҡорбандарҙы үрҙә теҙеп яҙылған закон тәртиптәре яҡлай алмауын аңланым. Мин дөйөм Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары хаҡында һүҙ алып бармайым. Ә айырым менталитетҡа эйә булған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, бигерәк тә үҙебеҙҙең ауыл ҡатындары хаҡында һөйләмәксемен.

• Беҙҙә ҡыҙ балаға нимә һеңдерелә? Эйе, кейәүгә барыу, ир ҡатыны булыу, балалар тыуҙырып үҫтереү. Был уға былай ҙа тәбиғәт тарафынан һалынған һәм шуға өҫтәп тәрбиә шундай. Бик яҡшы! Шулай булырға тейеш тә. Унан килә нимә һеңдерәбеҙ ҡыҙҙарға? Сабырлыҡ, баҫалҡылыҡ, күндәмлек һәм башҡалар. Сәләмәт ғаиләләрҙә ҡатындарҙың был ғәҙәттәре бары тик биҙәк кенә, шулай ҙа булһын, ти. Артабан талапһыҙлыҡ, үҙеңде баһалай белмәү, ҡәҙерһеҙгә күнеү, төрлө кәмһетеүҙәрҙе өнһөҙ күтәреү, агрессияны тәҡдир итеп ҡабул итеү. Сабырлыҡ һәм күндәмлек ни эшләптер яйлап негатив күренештәрҙең башланғысы булып ҡала. Тимәк, сабырлыҡ һәм күндәмлек үҙҙәре генә айырым яҡшы тәрбиә күрһәткесе була алмай, улар менән бер ҡатар икенсе төрлө фиғелдәрҙе лә һалыу, өйрәтеү, аңлатып үҫтереү кәрәк ҡыҙҙарға. Ә нимәләрҙе? Кем белә?

**Екатеринбург өйәҙе табибы Д.П. Никольский яҙмаларында: "Башҡорт ҡатындарына ғаиләлә урыҫ ҡатындарына ҡарағанда еңелерәк, сөнки уларҙың ирҙәре сәбәпһеҙгә тауыш ҡуптармай, туҡмамай. Был башҡорт ир-егеттәренең эсмәүе менән аңлатыла", - тигән юлдар теркәлгән. Йөрәккә май булып яғыла был һүҙҙәр: башҡорт ирҙәре эсмәй. Һәм шул эсмәгән ирҙәргә тип баҫалҡы, күндәм, сабыр ҡатындар үҫтерелгән дә инде. Үкенескә ҡаршы, милләткә эскелек килеп ингәндән алып ҡатын-ҡыҙға сабырлыҡ аръяғындағы хәүефһеҙ тормошто бер кем дә гарантиялай алмай...**



• Башҡорт ауылында ғаиләлә йәберләнгән ҡатындың хәле ниндәйерәк? Ул кемдән реаль ярҙам ала ала? Был һорауға яуаптарҙы булған хәлдән сығып анализлайыҡ. Күптән түгел Баймаҡ районынан бер ҡатын яҙҙы. Ире туҡмай, ҡатын йортона ҡайтып инә алмай, балаларына ҡарата ла насар мөнәсәбәт. Хәлдәр, әлбиттә, ябай тел менән генә һөйләп бөтөрөрлөк түгел, йәберләүҙең балаларға ҡурҡыныс һәм әшәке алымдары ла күҙгә салына. Йыйып әйткәндә, енәйәттең бөтөн төрө лә бар. Быға тиклем бер нисә ҡатынға Өфө социаль ярҙам үҙәктәре аша ярҙам ойоштора алғас, шуларға шылтыраттым, ҡатындың телефон номерын бирҙем. Ҡатын телефон аша миңә һөйләгәндәрҙе белгестәргә лә еткерҙе. Әммә Өфөлә урын булмай сығып, эште Баймаҡ ҡала һәм район Ғаилә хеҙмәтенә күсергәндәр икән һәм унда... барыһы ла "ауылса" хәл ителгән. Ғаилә хеҙмәте етәксеһе ниндәйҙер ябай ауыл ҡатынының уларҙы урап үтеп, Өфө һынлы Өфөгә хәбәр ебәреп ятыуын оҡшатмаған һәм ул телефон аша ҡатынды, йомшаҡ итеп әйткәндә, шелтәләгән. "Аҙыраҡ ҡына сабыр булып булмаймы? Ир менән йәшәү өсөн дә аҡыллы булырға кәрәк", - тигән ул бөгөн-иртәгә башын ҡайҙа тығырға белмәгән ҡатынға. Ул ғына ла түгел, хәбәр ҡатындың эшенә лә еткерелгән, хәлде ире лә белгән. Былар барыһы ла Баймаҡ ғаилә хеҙмәте үҙәгенең "ярҙамы" булған.

Телефон аша үкһеп илаған ҡатындың был хәбәренән һуң, сираттағы тапҡыр ярҙам һорап Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы рәйесе урынбаҫары, депутат Эльвира Айытҡоловаға мөрәжәғәт иттем. Эльвира Ринат ҡыҙы Баймаҡ районы хакимиәте менән бәйләнешкә инеп, был мәсьәләне иғтибар үҙәгенә алыуҙы һораны. Шунан ғына тәгәрмәс тәгәрәп китте. Баймаҡ ғаилә үҙәге етәксеһе менән үҙем дә бәйләнешкә индем. "Һеҙ ярҙам һораған ҡатынға ниндәй мөнәсәбәт күрһәттегеҙ?" тигән һорауҙы бирҙем. Оҙаҡ яуап бирмәй торҙо. "Мин уны шылтыраттым да туҙҙырҙым", - тип әйтә алмай бит инде шундай үҙәк белгесе. Унан хеҙмәттең эштәре, план буйынса үткәргән саралары тураһында, компьютерҙар, белгестәр етешмәүе хаҡында оҙайлы һөйләшеү (дөрөҫөрәге аҡланыу) булды. "Мин был урында өс ай ғына эшләйем", "Тимәк, мин, һеҙҙеңсә, тәжрибәһеҙ белгес" тип, сиктән-сиккә ырғыу ҙа биҙәмәне етәксене.

• Әлбиттә, ҡатын хаҡында ла мәғлүмәт йыйҙыҡ, уның хаҡында "эсмәй, балаларын яҡшы ҡарай, әхлаҡлы, эшләй" тинеләр. Сөнки, йыш ҡына ауыр хәлдә ҡалған ҡатын-ҡыҙ үҙе лә "йәшел йылан" менән дуҫ булып сыға. Тик был икенсе осраҡ. Һәм Баймаҡ Ғаилә хеҙмәте етәксеһе лә йәберләнеүсе ҡатын тураһында "Өйө бар, ғаиләлә ике машина, ире шәхси эш алып барған хәлле кеше" тигән ҡылыҡһырлама бирә. Ошо уҡ һүҙҙәрҙе депутатҡа Баймаҡ ҡала хакимиәтенән дә әйткәндәр. **Һәм әлеге тәңгәлдә иғтибарҙы бына нимәгә йәлеп иткем килә. "Өйөлө, эшле, хәлле" йәшәгән ҡатын, тимәк, уларса ярҙам итә торған категорияға инмәй. Ярҙам һораусы мотлаҡ эскән, балаларын ҡарай алмаған, йәшәр урынһыҙ ҡатын ғына булырға тейеш. Ә тормошта күпме "эшле һәм хәлле" ҡатындар ҡорбан ителә?**

Баймаҡ районында булған хәлдең дауамын да яҙып үтәйек. Депутат ярҙамы менән механизм хәрәкәткә килтерелгәс, ҡатынға Баймаҡ ОДН хеҙ-

*✓ Бүлмә һайын әбей-һәбей ҡул эше менән булып, сәй эсеп ултыра, бабайҙар шахмат уйнай, гәзит уҡый. Ҡарттар йорто шулай була икән тигән уй ҡалған башта. Ә әле үҙем йөрөп сыҡҡандан һуң яҡты хәтирәләр юҡҡа сыҡты.*



мәтенән дә килгәндәр һәм эш араһында "Һеҙгә йәки айырылырға, йәки, был хәлгә күнгәс, улай шауламаҫҡа ине. Ни эшләп ул "желтая пресса"ға мөрәжәғәт иттегеҙ? Проблемаларынды әхирәтеңә барып һөйләп, ултырып бер ярты эсеп, күңелеңде бушатырға ла ҡайтырға ине", тигән "кәңәш" биргәндәр.

Әлбиттә, районда ҡатын өсөн тейешле булған "бөтәһен дә" эшләгәндәр, уға бары рухи яҡтан ярҙам итеүсе генә табылмаған. Барыһы ла унын әлеге "тауыш ҡуптарыуын" хупламауын белдергән. Оялтҡандар, өгөтләгәндәр, тыйғандар ҡатынды, ҡыҫҡаһы, күндергәндәр. Һуңғы һөйләшеүҙә ул үҙе лә шулай тине: "Күпмегә түҙер был йәнем, апай, белмәйем... Әммә мин инде ярҙам һорап ҡысҡыра алмайым..."

**Ғаиләлә йәберләнеүгә дусар ҡатындарҙың барыһына ла тигәндәй бер һорауҙы бирәм һәм әлеге ҡатынға ла бирҙем уны: ни өсөн туҡмалып йәшәүгә күнәһең? Һәм уларҙың барыһында ла тигәндәй оҡшаш яуаптар: Ҡайҙа барайым? Мин кемгә кәрәк? Балаларҙы ҡайҙа итәйем? Сығып китеп, яңы урында барыһын да яңынан башларға ҡурҡам. Ҡыйыулығым етмәй. Мине кем унан (йәберләүсенән) яҡлаша? Эшем юҡ, һөнәрем юҡ.**

• Эйе, яңы тормош башлау - ул шундай ҡурҡыныс һәм хәл еткеһеҙ ауыр һымаҡ тойола. Әммә ваҡыт бизмәненә һалып үлсәгәндә, тиран эргәһендә үткәрелгән ғүмер бер нисек тә баһалыраҡ һәм яҡшыраҡ була алмай. Эскән, һуғышҡан атайҙы күреп, шул йәшәүгә әсә менән бергә күнергә мәжбүр булған балаларҙың күңел торошон һәм травмаларын да иҫәпкә алһаң, йыш күҙәтелгән үлтерелеү осраҡтарын да өҫтәһәң, был тормошто дошманыңа ла теләмәҫ инең. Бына ошоларҙың барыһын белгән хәлдә лә ҡатындар аҙаҡҡаса тиклем түҙә, яҙмышҡа ҡаршы аҙым яһай алмай. Ни өсөн шулай? Беренсенән, ҡорбан роленә ингән ҡатын-ҡыҙҙың көрәшер рухи көсө булмай. Икенсенән, ҡатынды яҡларға тейешле хөкүмәт органдарының хеҙмәте дөрөҫ ҡоролмаған. Ҡатындарға ярҙам итеү хеҙмәте системаһын бөтөнләй икенсе ҡоролошта яһарға кәрәк, минеңсә. Мәҫәлән, йәберләнеүсенән (ҡатындан, баланан, оло кешенән) сигнал килде икән, уны шул көнөндә үк барып алып, йәберләүсенән һәм баҫым яһаусы йәмғиәттән айырырға. **Йәберләнеүсегә иң беренсе сиратта тыныслыҡ һәм хәүефһеҙлек тәьмин итергә кәрәк. Полиция, социаль хеҙмәт белгестәре һәм башҡалар унан һорау алып йонсотмаһын, ҡурҡытмаһын ине. Былай ҙа һуңғы аҙым сигенә еткән ҡорбанды формалағы кешеләр маҙаһыҙламаһын, ауыл кешеһен бит хәрби форма былай ҙа ҡуҙғыта, уны баҙнатһыҙ, сараһыҙ итә. Бигерәк тә рәсми ҡағыҙҙар тултыртыу, талапсан һорауҙарға яуап биреү, һәр белгескә хәлде ентекләп һөйләү йәберләнеүсене тағы ла бер тапҡыр кәмһетеү генә ул. Йәберләнеүсе бит енәйәт ҡылыусы түгел, ул үҙе ҡорбан, йылдар ағымында баҫылып йәшәүгә дусар булған йән эйәһе.** Бындай хәлдәрҙә иң беренсе йәберләнеүсене һәм уның балаларын йәберләүсенән айырыу һәм психологтар кеүек махсус һөнәри белгестәр менән генә аралаштырыу. Полиция, ОДН, социаль хеҙмәттәр белгестәре йәберләнеүсе улар менән һөйләшеүгә әҙер булғас ҡына килһен йәки йәберләнеүсенең психологтар менән һөйләшеүҙәрен махсус тәҙрә аша күҙәтеп өйрәнһен. Был тәңгәлдә, әлбиттә, хоҡуҡ һаҡлау органдары үҙ эштәренең нескәлектәрен үҙҙәре яйға һала ала.

Икенсе сәбәп, шулай итеп, йәберләнеүселәрҙең рәсми хеҙмәттәрҙән ҡурҡыуы, биҙрәүендә. Башта телгә алынған Алена Попованың кәңәше, йәғни, полиция саҡыртыу, яраларҙы теркәтеү һәм суд юлында йөрөү ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының барыһының да (бигерәк тә ҡорбан хәлендәгеләренең) хәленән килә торған эш түгел. Хатта ки, уларҙы туҡмаусыға ҡарағанда ошо юл нығыраҡ ҡурҡыталыр әле.

Өсөнсөнән, йәберләнеүсе ҡатын-ҡыҙға яңылыш кәңәш биреүсе йәмғиәт. "Түҙә бир, үҙгәрер, аҡыл ултырыр, донъяғыҙҙы әрәм итмә, балаларҙы атайһыҙ үҫтермә, яңғыҙ йәшәүе еңел түгел" тигән өгөтләүҙәр йыш ҡына ҡатындарҙы кире сигенергә мәжбүр итә. Ә инде ҡурҡыныс хәлдәр сығып ҡуйғанда, ошо уҡ "кәңәшселәр", ғәҙәттә, "беҙ белмәнек" тиәсәктәр. Миҫал өсөн генә Учалы трагедияһын алайыҡ, ут күршеләре лә, туғандары ла, дуҫтары ла ғаиләлә ҡатындың йыш ҡына йәберләнеүен "белмәгән" булып сыҡты. Иманым камил, шул бахыр ҡатынҡай "китәм" тип уҡталғанда, шул уҡ туғандары һәм яҡындары уға "түҙә бир" тигәндәрҙер. Тимәк, бында ла йәберләнеүсегә бары тик аҡыллы кәңәштәр һәм иң яҡшыһы, белгес менән һөйләшеү, шул аҙымды яһау өсөн аҡыл көсө бирә алыр кешеләр менән аралашыу кәрәк. Һәм йәберләнеүсе был әҙерлекте аноним рәүештә лә үтә алырға тейеш. Йәғни, үрҙәге хеҙмәт эсенә ошо ярҙам да индерелергә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күрәһегеҙ, йәберләнгән ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына ярҙам итеү еңел генә эш түгел. Бында тотош системаны үҙгәртергә һәм реаль файҙа килтереү йүнәлешенә бороу талап ителә. Һәм был хеҙмәттә осраҡлы, белемһеҙ, эш хаҡы өсөн йөрөгәндәр түгел, ә грамоталы белгестәр генә эшләргә тейеш. Ауыл ҡатын-ҡыҙының үҙаңын үҙгәртеү бер быуын ғүмерҙә генә мөмкин дә булмаҫ, ә хоҡуҡи тәртиптәрҙе ысын ярҙам күрһәтерлек итеп үҙгәртеп ҡороу артыҡ оҙайлы ваҡыт талап итмәҫ ине. Юғиһә, ниндәй генә закон ҡабул ителгәндә лә, йәберләнеүселәрҙе нисек кенә тартҡылағанда ла, ҡорбандар һаны кәмемәҫ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!*

# ҠАРТТАР ЙОРТО - ҠАЙҒЫ ЙОРТОМО?

**Яңғыҙ ир кешене урынлаштырыу өсөн урын эҙләгәндә республиканың бер нисә ҡарттар йортона мөрәжәғәт итергә тура килде. Беҙҙең герой ғәрип, әммә аҡылы теүәл, үҙен хеҙмәтләндерә, көсө бар. Себерҙә эшләп ялға сыҡҡанлыҡтан, пенсияһы ла юғары ғына. Уға медицина ярҙамы булған, аҙыҡ-түлек менән тәьмин иткән, йыйыштырыусылары тәрбиәләгән махсус урын кәрәк булып, республикалағы бер шәхси ҡарттар йортонда туҡталдыҡ. Баҡтиһәң, беҙҙең республикала түләүле ғәриптәр йорттары юҡ икән. Уларҙың барыһы ла "ҡарттар йорто" тигән исем аҫтында.**



Ҡарттар йортонда йәшәүҙең иң беренсе яҙылмаған шарты - һине килеп күреп, тикшереп йөрөүселәр булмаҫҡа тейеш. Беҙҙең осраҡта ла шулай булды. Клиент ирекле инеп-сығып йөрөй алмай һәм уға килеүселәр ҙә эскә үткәрелмәй. Үтеү түгел, хәл белешеп тә булмай булып сыҡты. Күп тә тормай, быныҡ сәбәптәре асыҡланды ла. Унда мәхшәр икән! Яҡлаусыһыҙ ҡарттарҙың бер нәмәгә лә хоҡуғы юҡ, ти. Унда бары иҙән йыуыусылар ғына хакимлыҡ итә икән. Әбей-һәбейҙе, эсеп эшлектән сыҡҡан ҡарттарҙы, ғәриптәрҙе теләһәләр һуғып ебәрәләр, теләһәләр ашһыҙ тоталар, теләһәләр йыуыныу бүлмәһенән мәхрүм итәләр. Ә түләүҙе айына шыҡылдатып һалдырып алалар, пенсияң күсмәһә, бер көн, бер минут тотмайҙар.

Беҙҙең герой ҡарттар йортонда ике ай йәшәне, әллә нисә тапҡыр персонал менән ғауғаға инде. Ҡарттарҙы яҡлашып, әбейҙәрҙе һуҡҡылаған санитарҙар, техничкалар менән әләгешеп бөттө. Пансионаттың директорын саҡыртып-саҡыртып та, бер генә лә күрешә алманы. Ике айҙан "Бында минең йөрәгем сыҙамай" тип сығып, бер ҡалала ҡуртымға фатир алып, медицина хеҙмәткәре яллап йәшәүгә күсте. Һәм шул йортта булып сыҡҡан ваҡытын һаман яман төш кеүек итеп иҫләй, ҡалған йәшәүселәрҙе йәлләп, шундай шарттар тыуҙырған йорт етәкселеген һүгеп йыуана.

Ҡарттар йорто ял йорто түгел, уныһы бар. Әммә һуңғы ваҡытта телевизорҙан күрһәтелгән ҡарттар йорто һәм республикабыҙҙағы шундай бер учреждениелағы хәл-ваҡиғалар был урындарҙың ысынлап ҡайғы йорто булыуын күрһәтте. Дәүләт учреждениеһы булһынмы, шәхси асылған ололарҙы, ғәриптәрҙе ҡарау йорто булһынмы, унда бит яҡлауға, ҡарауға мохтаж кешеләр өсөн яуаплылыҡ ята. Уларҙың пенсияһын тартып алып, аслы-туҡлы, ҡаҡ-һалҡында тотоу, уның өҫтәүенә, ҡурҡытыу, һуғыу, бикләү һәм башҡа яза төрҙәрен ҡулланыу - ул матди йә рухи яҡтан аҡлаймы үҙен? Минеңсә, бер яҡтан да аҡламай. Ундай йорттарға, әйтерһең, иң яуыз, иң ҡаты күңелле хеҙмәткәрҙәрҙе генә йыйғандар, тиерһең. Әллә шундай битараф, яҡшылыҡтан ваз кискәндәрҙе генә микән...

"Ҡарттарҙы һин бағып ҡара" тиеүселәр ҙә булыр һәм уларҙың һүҙе дөрөҫ тә һымаҡ. Күптәренең ярауы аҫтында, аҡылдары шыйығайған, мыжыйҙар, онотолар, буталалар. Әммә был сәбәптәрҙең береһе лә кешелекһеҙлекте аҡламай. Ҡарттар йортона барып инеүҙәрендә уларҙың үҙҙәренең дә ғәйептәре етерлектер, шулай ҙа, былар ҙа мәрхәмәтһеҙлекте аҡламай. Ҡасандыр үлтереүсе, урлаусы, балалар ташлаусы, эскесе әҙәмдәр булһалар ҙа, бөгөн ярҙамға мохтаж, бала хәлендә ҡалғандарға изгелекле булыу - ул әҙәмилек билгеһе. Әгәр яманға яман, насарға насар ғына булып ҡалһаҡ, был донъя ҡайҙа барыр? Берәү ҙә ҡартлығында яңғыҙ ҡалыуҙан, кеше көнлө булыуҙан һаҡланмаған. Әжәл ғәли йәнәптәренең кемде ниндәй хәлдә килеп табырын бер Аллаһ ҡына беләлер...

Бер ваҡыт, ике меңенсе йылдарҙа булһа кәрәк, Баймаҡ районының Төркмән ауылында ҡарттар йорто була торғайны һәм шул хаҡта гәзиткә яҙырға тура килгәйне. Төрлө райондарҙан йыйылған ине ололар. Һәм шундағы мөнәсәбәт, йылы мөхит, таҙалыҡ хәтерҙә ҡалған. Бүлмә һайын әбей-һәбей ҡул эше менән булып, сәй эсеп, сөкөрләшеп ултыра, бабайҙар шахмат уйнай, гәзит уҡый ине. Ҡарттар йорто шулай була икән тигән уй ҡалған башта. Ә әле үҙем шундай йорттарға йөрөп сыҡҡандан, республика яңылыҡтарынан, ҡарттар йортондағы янғын афәтен ишетеүҙән күңелдә һаҡланған яҡты хәтирәләр юҡҡа сыҡты. Кешелектең иң ябай мөнәсәбәтенә, мәрхәмәткә мохтаж булған етем ҡарт-ҡороно, балаларҙы, ғәриптәрҙе йәберләргә, шулар иҫәбенә туйынып йәшәргә, таларға, өлөштәренә төшөргә, яҙаларға, уларҙың көсһөҙләгән үҙҙәренең бысраҡ нәфселәре файҙаһына тотонорға ынтылып торғандар ҡайҙан килеп сыға икән? Ҡарттар, балалар, ғәриптәр йорттары етәкселәре, хеҙмәт коллективы, был учреждениеларҙың йәшәйешен күҙәтеүсе өлкәләр, министрлыҡтар шул хәтлем дә битарафмы эштәренә? Был һорау үҙенән-үҙе телдән ысҡына. Сөнки Әбйәлил районындағы ҡарттар йорто көл-күмергә ҡалып, ҡорбандар билдәле булғас, республикабыҙҙың Хеҙмәт, ғаилә һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова был йорт хаҡында "белмәй" ҙә булып сыҡты (!). Әммә был ғына яуап уны аҡлаймы? Йәғни, шул дәрәжәләге етәксенең үҙ биләмәһендәге тотош бер ҡарттар йортон белмәй ҡалыуы уны һәм башҡаларҙы енәйәти яуаплылыҡтан азат итәме? Үкенескә ҡаршы, етәкселектең бәләнән ҡотолоп ҡала торған иң еңел юлы ошо.

Ҡарттар һәм балалар йорттары кәмемәҫ тә һәм уларҙың йәшәйеше артыҡ үҙгәрмәҫ тә инде ул илдә. Был йорттарҙа ҡалдырылғандарҙың утыҙ процентының ғына ата-әсәһе һәм балалары юҡ, тип билдәләй бит статистика. Тимәк, был күренештәр йәмғиәттең үҙе һайлаған, үҙе сәбәпсе булған күрһәткестәре. Иң тәүге сиратта был ғаилә тәрбиәһенең аҡһауы. Балаларынан, ололарынан һәм ғәриптәренән баш тартмаҫлыҡ кимәлгә етә алырмы икән берәй ваҡыт кешелек? Билдәһеҙ...

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**



Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

Повесть

## ТЫЛСЫМЛЫ ТАЯҠ

Рауил менән тормоштарына бәйле ҡайһы бер хәлдәргә, мәлдәргә асыҡлыҡ индергәндән һуң, Сара философия китаптарына тотондо. Фәйләсуфтарҙың тормош, йәшәйеш тураһындағы уйланыуҙары, парадокс фекерҙәре оҡшап китте әле уға. Ҡаҙына торғас, үҙе өсөн Плутархты асты. "Плутарх. Өҫтәл артындағы әңгәмәләр". Ай-һай, теш үтерлекме быныһына? Заманында Гай Цезарь тураһында күп ишетергә, уға арналған киноларҙы ҡарарға тура килгәйне. Плутарх был император тураһында ҡыҙыҡ ҡына мәғлүмәттәр теркәп ҡалдырған. "Һәм алыш була, бында Помпей енеүсе була, ләкин ул енелгән яҡты эҙәрлекләмәй, ә кире үҙенең лагерына ҡайта. Цезарь әйтә: "Әлеге мәлдә енеү улар ҡулында, ләкин уларҙың береһе лә енеүгә өлгәшә белмәй".

Шулай, Сара ла үҙен берәүҙән дә еңелгән тип тойорға тейеш түгел. Енеү саралары төрлөсә. Күп кенә хафаларға һалған, ваҡыты-ваҡыты менән көйҙөрөп алған улы Ирек тә сессияны уңышлы тамамланы. Был да енеү. Алда мине ҙурыраҡ эштәр көтә, тигән ышанысын нығытыр өсөн йәнә китапҡа текләне: "Фарнак Понтийскийҙы бер удар менән ҡыйратҡандан һуң, ул дуҫтарына шулай тип яҙа: "Килдем, күрҙем, еңдем". Ҡыҙыҡ, Сара был һүҙҙәрҙең кемдеке икәнлеге тураһында уйланғаны юҡ ине. Цезарь...

Һағынып көткән балаһының ҡайтып төшөүе Сара өсөн әлеге мәлдә иң оло ҡыуаныстарҙың береһе. Тәүге көндәрҙә Ирек менән Өфө урамдары буйлап та, сауҙа үҙәктәрен дә ҡыҙырҙылар, Сара балаҡайына аҡсаһын йәлләмәне, иң тәмле туҡланыу урындарына алып барып һыйланы, нимә теләй, шуны алып бирҙе. Буш ваҡытында үҙе лә газ плитәһе эргәһенән китмәне. Унан Ирек туғандарына ҡунаҡҡа китте, бер нисә көндән йылмайып ҡайтып инде:

- Әсәй, дуҫтарым менән бер аҙнаға ял йортона китәбеҙ.

Сара ризалашты, дуҫтары янында ла булһын, артабан Ирек менән бергәләп эшләйһе эштәр бар. Былай быуыны ныҡ шикелле, һәр хәлдә, Силәбенән үҙгәреп ҡайтты, ҡыйыу ғына фекерләй, теге йәки был мәсьәлә буйынса үҙ ҡарашын асыҡ әйтә, бәхәсләшеп тә китә. Бер аҙна эсендә улын түҙемһеҙлек менән көтөп алды.

- Залға обой йәбештерергә ине, балаҡайым.

Ирек ауыр һуланы.

- Әсәй, минән ниндәй обой йәбештереүсе сыҡһын? Ундай эшкә атайым оҫта, һинән дә, минән яҡшыраҡ эшләйәсәк. Ҡайтҡанын көтәйек.

Аңлашылды. Бөтөн эште атайға ҡалдырмаҡсы, эшкә әрһеҙ Рауилына бик оҡшамаған шул балаҡайы. Өйгә һирәгерәк ҡайта башлауы бер ҙә ҡыуандырмай. Иптәштәрен күрәм, ти ҙә, сыға ла китә. Юҡ, Сара ҡаршы түгел, улының класташтары һәйбәт, аралары әҙәлмәүен ул хуплай ғына. Шулай ҙа телефондан бөтөнләй ят кешеләр менән гәпләшеүе һағайта төштө.

- Улым, мин беләмме ул Аликты? - тип һораны бер көндө.

Ирек баш сайҡаны.

- Юҡ, әсәй. Минең яңы дуҫтар етерлек!

- Ә класташтарың?

- Улар менән хәҙер ҡыҙыҡ түгел. Яңылары күңелле халыҡ. Нинә, бала-сағамы ни мин, кеше айыра беләм! Борсолма.

Ирек һорап та тормай, "Лада"ға ултырып сыға ла китә, бер тапҡыр ремонт яһалды бит инде машинаға, һәм балаҡайы "бөтән ултырмайым", тип һүҙ биргәйне. Вәғәҙәһен тиҙ онотто. Берике көн хатта өйгә ҡайтып ҡунманы. Улының тормошона артыҡ ҡыҫылырға ярамай, шулай ҙа яңы дуҫтарының кемлеген асыҡлау зыян итмәҫ:

- Ярай, әсәй, һуҡранма. Беҙ, йәштәр, күңел асыу клубтарына йөрөйбеҙ. Тусовкалар була. Төнө буйы һөйләшеп ултырабыҙ. Үҙебеҙҙең уйындар етерлек, беҙҙең өсөн төн ҡыҫҡа, үтә лә китә.

Бына шулай, нимә тип әйтһә лә, улының яуабы бар, ауыҙҙы яба ла ҡуя. Хәҙер Сара иренең вахтанан ҡайтҡанын түҙемһеҙлек менән көтә, Рауил өйҙә булғанда, улы былай иркен ҡыланмаҫ. Атай кеше улына ла, үҙенә лә эш таба белә.

Бөгөн тағы ла Ирек ҡайтманы. Улын көтөп арыған Сара йоҡларға һуң ғына ятты. Таң атыр атмаҫтан, Ирек ҡайтып инде һәм йоҡлап ятҡан әсәһе эргәһенә дөбөр-шатыр килеп теҙләнде.

- Әсәй, улар кеше өйөнә төштөләр!

- Кемдәр? - Әле йоҡоһонан айнып бөтмәгән Сара күҙҙәрен саҡ-саҡ асып, аптырап улына текләне.

- Алик, уның дуҫтары! Мин дә улар менән бергә инем бит! Нисек итергә, әсәй? Нимә эшләргә?

Ярһыулы ҡурҡҡан тауышты ишетеп, Сараның йөрәге жыу итеп китте. Иректең күҙендә йәш тамсыһы күреп, улын ҡосаҡлап алды.

- Туҡта, улым... Ашыҡма. Мин бер нәмә лә аңламайым. Улым, мин һине ҡотҡарам. Ниндәй бәлә булһа ла йолоп алып ҡалам, тик йәшермәй бөтәһен дә һөйлә.

Улының аңлатыуынса, улар кис иптәштәре менән күңел асыу үҙәгендә байрам итәләр. Алик үҙенең ике дуҫы менән була. Бер аҙҙан Аликтың Рената исемле йөрөгән ҡыҙы ла әхирәттәре менән килеп ҡушыла. Төнгә икеләрҙә Алик табындаштарына шулай тип иғлан итә:

- Хәҙер минең бер таныштарыма инеп сығабыҙ. Унан Ренаталарҙа байрам дауам итә! Шулай бит, Рената!

Алик әшнәләре менән бер машинаға ултыра. Ҡыҙҙарҙы үҙенең машинаһына тейәп алған Ирек улар артынан эйәрә. Бына улар Ағиҙел ярында урынлашҡан ике ҡатлы йортҡа килеп етәләр.

- Был ҡәлғәгә һәр теләгән кеше инә алмай, унда ҡыйыуҙар ғына инергә тейеш, - ти Алик. - Ирек, беҙ һине яҡшылап белмәйбеҙ. Ләкин ҡыйыулығыңа шикләнмәйем. Һин минең янда булаһың!

- Нимә эшләргә тейешмен был йортта?

- Ҡурҡма. Бында минең туғандарым йәшәй. Улар бөтөн кампанияны ҡабул итмәй. Аҡыллыларҙы ғына индерәләр.

Иптәштәренә ҡыҙыҡ, улар кемуҙарҙан һаһылдашалар. Күңелгә шик төшөр ине, ләкин йорт ишеген Алик үҙе аса. Эскә ингәс, ул туп-тура залдағы шкаф янына үтә. Ирекҡә шуны асып, кәштәнән ҡумтаны алып бирергә ҡуша. Ирек ҡумтаны ала. Теге асырға ҡуша. Ирек ул әйткәнсә эшләй.

- Бармы эсендә берәй нәмә?

Ирек иркен һулай, сөнки шкатулка буш була. Уның яуап биргәнен дә көтмәй, Алик стенанан бер картинаны ала, ә артында - сейф. Һаҡлағыстың кодын белгәндер, йәһәт кенә асып, унан бер төргәкте кеҫәһенә һала һәм "киттек" тип ишаралай. Ирек:

- Егеттәр, был урлашыу, минең ҡатышлығым юҡ, - ти.

- Ауыҙыңды яп!

- Алик, һин бит туғандарыма барабыҙ, тинең!

- Туғандарыма. Ләкин мин бит һине улар менән күрештерәм, тимәнем.

- Әллә беҙҙе һатмаҡсыһыңмы?

Ул арала Аликтың әшнәләре Иректе ике яҡтан шаҡарып тотоп алалар. Ә телефоны Алик ҡулына күсә.

- Өнөң сыҡмаһын, бергә урланыҡ! Хәҙер һин беҙҙең менән.

Алик бер ҡуштанына:

- Хәҙер уға телефонындағы дәлилде күрһәт! - тип бойора.

Иректе ҡумта тотҡан мәлендә фотоға төшөрөп алғандар икән. Бына шунда ғына Ирек үҙен нимә өсөн файҙаланғандарын аңлап ҡала...

- Яңы алған телефоныңды алып ҡалдылармы, улым? Ә иҫкеһе ҡайҙа?

- Иҫкеһе өйҙә ята, әсәй.

- Шунан.

- Беҙҙе тотһалар, йәки кемдер беҙҙе тотторорға маташһа, телефоның һәлмәк улика буласаҡ. Ул ошо урланған төйөнсөк араһында ятасаҡ, белеп ҡуй, - тине Алик. - Ҡабатлайым, һин хәҙер беҙҙең менән.

Сара битен услап тотто, хәрап итәләр бит балаҡайын! Ҡалайтып булһа ла телефонды ҡулға төшөрөргә кәрәк, юғиһә, Иректе ҡурҡытып, теләгән енәйәттәрен эшләтә алалар. Эстәге яныуҙы өрөп сығарырға иткәндәй, әсә "уф-ф-ф..." тине һәм ҡапыл, башын ҡалҡытып, тәүәккәл тауыш менән һораны:

- Алик ҡайҙа тора? Йәшәгән урыны бармы? Адресы кәрәк.

Улы, гәйепле ҡарап, һүҙһеҙ генә баш сайҡаны. "Адресын белмәүе насар..." Сара телен шартлатты. Алик ҡына түгел, уның ике әшнәһе тураһында бөтөнләй бер нәмә лә белмәй икән дә баһа. Үәт бер ҡатлы бала! Ҡайҙалыр күңел асыу үҙәгендә танышҡан да, шуларҙың татлы телдәренә алданып, барыһын да яҡын дуҫтар иҫәбендә йөрөткән. Иректең хәйләһеҙ бер йорт ҡошсоғо икәнен жуликтар үҙҙәре үк аңлағандарҙыр, шуға уны ҡармаҡтарына эләктергәндәр ҙә инде.

Артабан бурҙар Аликтың Рената тигән ҡыҙы йәшәгән йортҡа юл алалар. Байрам шунда дауам итә. Тегеләр шаҡтай иҫергәс, кемдәрелер йоҡоға киткәс кенә, Ирек уларҙың ҡулынан ысҡына ала.

Дөрөҫөрәге, Рената уға ҡасырға ярҙам итешә. Ҡыҙ уға үҙенең еңел булмаған хәлен дә һөйләп ала. Бынан бер нисә ай элек ул бай эшҡыуарҙарҙың йортона йыйыштырыусы булып урынлаша. Шунда хужабикәнең ҡыйбатлы биҙәнеү әйберҙәре һалған сейфын күреп ҡала. Был турала Аликҡа һөйләгәс, тегеһе кодты белергә ҡуша. Артабан Рената ярҙамында аҫҡыстың дубликатын эшләтеп ала. Ҡыҙ аҙаҡ ҡурҡыуға төшөп, был йорттан эштән китә, ләкин Аликтан ҡотола алмай. Хужалар әлеге мәлдә ҡайҙалыр сит илдә ял итә, шунан файҙаланып, Алик өйгә төшөргә булып китә. Ҡыҙ ҡасандыр уны тыңлап, аҫҡыс эшләткәненә үкенә, ләкин...

Нисек тә Иректе бәләнән йолоп алырға кәрәк, Сара уртын сәйнәне, нимә эшләргә? Әсә сәғәткә ҡараны. "Сәғәт ете, тимәк, Алик әле тегендә, шул ҡыҙ янында". Һуҙырға ярамай!

- Улым, беҙ хәҙер былай итәбеҙ, иң башта Алик тураһында нимә беләһең, ошонда теркә. Фамилияһы, тыуған йылы булһа, бик яҡшы. Рената тинеңме? Яҙ адресын.

Улы белгәнен блокнот битенә яҙып бирҙе. Әсә төнө буйы йоҡламағанлыҡтан күҙҙәре һуҙылған Ирекҡә йәлләп ҡарап алды.

- Әлегә кәрәгең юҡ, бер аҙ серем итеп алаһың. Бар,бар! - Улын эткесләп-төрткөсләп бүлмәһенә индереп ебәрҙе лә, Илдар ағаһына шылтыратты. - Ағай, минә Алик Базаров тигән егет тураһында мәғлүмәт кәрәк. Үҙеңдең каналдарың аша белеш. Хәҙер үк кәрәк, үтенәм.

- Ай, Алла!.. - Ағаһының ризаһыҙ тауышы ишетелде. - Тағы ниндәй эш ҡырҙың, Сара?

- Ант итеп әйтәм. Минең ҡыҫылышым юҡ. Бик яҡын кешемә ярҙам итергә кәрәк, зинһар, ағай.

- Сара, мин һине бик яҡшы беләм, гел үҙ башыңа бәлә эҙләй ҙә йөрөйһөң. Асыҡ итеп әйтәм, минән бер ниндәй ҙә ярҙам көтмә. Ишеттеңме?

- Ағай!

- Ишеттеңме, тием! Хуш бул! - Илдар шулай тине лә, телефонын һүндерҙе.

Сара сәбәләнеп усын уҫҡа ышҡыны. Нимә эшләргә? Ағаһының ярҙамынан тыш, улын ҡотҡарып булмай. Был юлы ул Мәүсилә еңгәһенә шылтыратты.

- Еңгәй, ағайыма әйтсәле, минә бер кеше тураһында мәғлүмәт кәрәк. Мине тыңламай!

- Хәҙер яйлап ҡына аңлатырмын. Сабыр бул, ыуаланма.

Әл дә бөтәһен дә аңлап торған еңгәһе бар. Ысынлап та, бер нисә минуттан Илдар үҙе шылтыратты.

- Ну һине... - тип ауыр һуланы ағаһы. - Инде еңгәң аша эш итә башланыңмы? Теге мәл бер әхирәтеңдең "серен сискән" инең. Иренең курткаһынан ят ҡатындың хатын табып алған, имеш. Нимә уйлап һөйләнең уны, башың бармы һинең, юҡмы?

- Ағай, һинең ғаиләң, һинең имендегең өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙермен. Эйе, һөйләнем, һеҙҙең өйҙә бөтәһе лә яҡшы икәнен аңлағас, тынысландым. Минә шунан артыҡ бер нәмә лә кәрәкмәй.

Тағы бер нисә минуттан ватсапҡа Алик тураһында белешмә килеп төштө." А. Базаров сығышы менән Свердловскийҙан. Мәктәп йылдарынан уҡ иҫәптә тора: кеше талап йөрөгәндәр, иптәше ултыра, ә Базаров шартлы хөкөм ителә. Бынан бер нисә йыл элек төрмәгә эләгә, ике йыл ултырып сыға. Өфөгә килеп сығыуына шулай уҡ ике йыл. Даими эшләгән урыны юҡ".

Эйе, Алик Ирекҡә ҡарағанда тормошто күберәк күргән егет. Шулай ҙа уны ҡурҡытырға була. Тик нисегерәк, ни рәүешле? Килдем. Күрҙем. Еңдем... Көсөргәнешле уйҙан Сараның ҡашы төйөрөлдө, йоҙроҡтары йомарланды. Риана! Бына кем кәрәк Сараға!

Ул өҫкө ҡатҡа осоп барып менде, тиергә була, һәм Риананың ишек төймәһенә бар көсөнә баҫты. Бына йоҡонан айнымаған, асыла алмайынса һуҙылған күҙҙәр уға текләне.

- Риана, бурысыңды ҡайтарыр ваҡыт етте!

Риананың күҙҙәре маңлайына менде, унан йөҙө инәлгән, йәлләткән төҫ ала башланы. Сара ҡатынға иҫенә килергә ирек бирмәйенсә фарман бирҙе:

- Йыйын!

- Бу-бур... Бөгөн ҡайтарам...

- Хәҙер үк!

Һуҙылған күҙҙәр түңәрәкләнде, даһрайҙы. Йоҡоһо тамам осто.

- Бер әҙәм аҡтығына алып барам. Харам байлыҡ йыя. Тиҙ бул, Регина! Тиҙ!

- Талайбыҙмы?

- Талағанды тартып алабыҙ!

Сара ашығып-ҡабаланып хәлде аңлатырға кереште, "ыһы-ыһы!" тип, һәр һүҙен йоторҙай булып тыңлаған Риананың күҙҙәрендә хәҙер ут тоҡанды.

- Минең бурыс шуның менән түләнәме? Улайһа, ныҡ итеп өҫкөтөргә кәрәк! - Ҡатын стенкаһынан униформа һөйрәп сығарып, шуны кейә башланы. - Полиция формаһына оҡшағанмы? Беҙ бит разбойниктар янына барабыҙ.

Сараның күҙенә кобура салыныу менән, тыны ҡыҫылды.

- Был нимә!?

- Эй-й, буш был кабура! Нияз йәш сағында бер хәрби ведомствола һаҡсы булғайны, - Риана башына усы менән һуҡты. - Миндә бита бар. Бына ул ҡурҡыныс!

Бер секундтан хужабикә суҡмар ҡосаҡлап тора ине инде. "Ҡалай сос был!" - тип аптырап ҡуйҙы Сара.

Ирек әйткән адрес буйынса, иҫке ағас йортто тиҙ генә барып таптылар. Сара "Лада"һын ышығыраҡ урынға ҡуйҙы. Риана артҡы ултырғыста ятҡан битаға ымланы:

- Алайыммы?

Сара "Юҡ" тип баш сайҡаны. Шунан икенсе ҡатҡа күтәрелделәр. Ҡыңғырау эшләмәй, Риана кемуҙарҙан дөбөрләтергә кереште. Бер аҙҙан ишек яйлап асылды. Унда сәсе-башы туҙған бер ҡыҙ күренде.

- Һеҙгә нимә-ә-ә?

Ул һүҙен әйтеп бөтөрмәне, Риана ҡыҙҙы эскә этеп ебәрҙе лә, атылып инеп китте. Сара унан ҡалышманы.

- Полиция! Ҡайҙа Алик?

Ҡурҡыуынан ауыҙы ҙур асылған ҡыҙ мөйөштәге диванға күрһәтте. Риана Аликтың юрғанын һыпыра тартып алды:

- Тор! Йортҡа төшкәнегеҙ өсөн ҡулға алынаһығыҙ! - тип ҡалын тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе. Был тауыштан Рената хатта торған урынында һикереп китте. Айнып бөтмәгән егет әле бер нәмә аңламай ине.

- Алик Базаров! - Сара уға иҫкә килергә ирек бирмәйенсә, телефонына ағаһынан килгән яҙыуҙы уҡырға кереште. - Сығышы менән Свердловскийҙан. Мәктәп йылдарынан уҡ иҫәптә тора...

- Һеҙгә нимә кәрәк? - тине Алик телен көс-хәл менән әйләндереп.

- Кисә һеҙ төшкән йорт - видеокүҙәтеүҙә. Видеояҙмалар беҙҙең ҡулда. Икегеҙ ҙә телефонығыҙҙы бында! Йәһәтерәк! - тип Сара фарман бирҙе.

Ул телефонды тикшергән арала, Риана һорау яуҙырырға кереште.

- Кем һеҙгә адресты өйрәтте? Кем һеҙгә ярҙам итеште? Исем-шәрифтәре? Тағы нимә урланығыҙ?

- Һеҙ бында закон буйынса... - тип Алик нимәлер әйтә башлағайны, Риана уны яман тауыш менән бүлдерҙе.

- Өй уратып алынған! Бер ишара етә, бында әҙегеҙ ҙә ҡалмаясаҡ!

**(Дауамы бар).**

*ИЖАД МАЙҘАНЫ*

# ШИҒЫРҘАРЫБЫҘҘЫ...

## башҡа халыҡтар ҙа уҡыһын ине



**Хәтеремдә, өлкән улым Салауат мәктәптә башланғыс синыфтарҙа уҡый ине әле (хәрби ҡаласыҡта рус телендә уҡыны), бер саҡ: "Иҙел бит ул, Иҙел бит ул, тәрән бит ул, киң бит ул..." тип йырлап йөрөнө-йөрөнө лә: "Атай, иҙел нимә була ул?" - тип һорап ҡуйҙы. "Иҙел - йылға исеме. Башҡортостанда Ағиҙел йылғаһы бар, Волганы "Иҙел" тип кенә атайҙар..." - тинем. Салауат әлеге йырҙы үҙенсә урыҫ теленә тәржемә итеп, көйләп маташа: "Идель ведь она, Идель ведь она, глубокая ведь она, широкая ведь она..." Шунан аптырап миңә баға: "Атай, ә нишләп урыҫсаһы йәмһеҙ килеп сыға был йыр һүҙҙәренең?" "Туранан-тура тәржемәләһәң, әлбиттә, шулай йәмһеҙерәк килеп сыға инде ул. Беҙҙең тел, һөйләм төҙөлөшө бөтөнләй башҡаса бит, - тип, үҙемсә аңлатырға тырыштым уға. - Шиғырҙың йөкмәткеһен мөмкин тиклем һаҡларға тырышып, өр-яңынан тәржемә итергә кәрәк инде уны..."**

Үҙем дә бала сағымдан шиғырҙар уҡырға яраттым. Башҡортса, хатта урыҫса ла. Ныҡ ҡына күңелгә ятҡандарын хәтерләп ҡалырға тырыша торғайным. Яҡшы шиғыр үҙенән-үҙе тиерлек ятлана ла ҡуя инде ул. Урыҫ телендәгеләренән Пушкиндыҡы нығыраҡ оҡшай ине. Һигеҙенсе синыфтан һуң "Русская литература"нан имтихан биргәндә "Расскажите наизусть свое любимое стихотворение" тигән һораулы билет эләккәйне. "Евгений Онегин"ды һөйләй-һөйләй, имтихан комиссияһы ағзаларын ялҡытып бөткәнем хәтеремдә. "Етер", - тигәс кенә туҡтаным. Яттан белгән башҡорт шиғырҙарының, йыр һүҙҙәренең урыҫ теленә тәржемәһен күреп ҡалһам, мотлаҡ иғтибар итеп, уларын да ятлап алырға тырыша инем. Әрме хеҙмәте дәүерендә шағирҙарыбыҙҙың урыҫсаға ауҙарылған шиғырҙарын хеҙмәттәштәремә лә уҡып ишеттергеләй торғайным. Шул ғәҙәтемде әлеге көнгәсә ташламағанмын. Үкенескә, бәғзеләренең тәржемәселәрен хәтерләп ҡалмағанмын, әммә, ана шул шиғырҙарҙы башҡа телгә күсереүселәрҙең үҙҙәренең дә ифрат оҫта телле шағирҙарҙан булыуы хаҡында әйтеү кәрәк. Ҡадир Даяндың "Шайморатов генерал" шиғырының тәүге куплетын белмәгән кеше юҡтыр:

*Башҡорттар китте һуғышҡа,*
*Оҙатып ҡалды күк Урал;*
*Ат уйнатып, алдан бара*
*Шайморатов генерал.*

Бөйөк Еңеүҙең сираттағы бер юбилейы яҡынлашҡас, һуғыш ветерандарына арнап, рус телендә бер журнал сығарғайнылар. Ана шуның тышында ошо куплетты уҡып киләндем:

*Шли башкиры на войну,*
*Провожал Седой Урал.*
*Впереди на аргамаке*
*Шаймуратов генерал...*

Матур, шулай бит. Үкенескә, тәржемәсеһе хаҡында мәғлүмәт юҡ. Мәшһүр Шәйехзада Бабичыбыҙҙың шиғырҙарын да бик матур итеп тәржемәләгәндәр. Ғәзим Шафиҡов ағай тарафынан урыҫсаға әйләндерелгән "Башҡортостан" тигән шиғырын ғына алып ҡарайыҡ:

*Башҡортостан -*
*гөлбостан, рәйханостан, нурбостан,*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән,*
*башҡорт атлы арыҫлан...*

"Боҫтан" һүҙе ғәрәпсәнән "баҡса" тигәнде аңлата. Илһөйәрлек рухы менән һуғарылған, үҙенсәлекле яңғыраған шул шиғырҙың ошо куплеты урыҫ телендә түбәндәгесә яңғырай:

*Цветоносный дивный стан,*
*светоч наш Башкортостан!*
*Постигал здесь бренный мир*
*лев по имени Башкир...*

Шулай уҡ, Мостай Кәримдең "Үлмәҫбай" трилогияһының "Тәүге һунар", тигән өлөшөнөң башҡортса һәм урыҫса варианттарын тулыһынса ятлап алып, ҡасандыр сәхнәлә лә бер нисә тапҡыр сығыш яһау бәхетенә ирешкәйнем. Нәҡ тә Пушкиндыҡы һымаҡ, үҙенән-үҙе хәтерҙә ҡалып ҡына торған был шиғырҙы бала сағымдан уҡ яттан беләм. Башҡорттоң һәр төрлө матур йолаларын, шул иҫәптән, һунарсылыҡ ғөрөф-ғәҙәтен иҫкә алып, Бөйөк Ватан һуғышы мәлендә Үлмәҫбай исемле башҡорт егетенең, төп геройҙың мажараларын мауыҡтырғыс итеп һүрәтләгән был әҫәрҙе уҡыуы - үҙе бер ял. Юморға бай, шул уҡ ваҡытта ғәйәт ҡыйыу башҡорттоң дошман штабына хәйләләп үтеп инеп, немец офицерын нисек итеп әсиргә алыуы хаҡында ләззәтләнеп уҡыйһың. Хикәйәт төп геройҙың исеменән һөйләнелә. Унда ошондай бер ҡыҙыҡ эпизод бар:

*...Доклад яһайым үҙенә:*
*"Үлмәҫбай атлы булам,*
*Тау башҡорто тоҡомонан,*
*Салауат затлы булам..."*

Офицер уға: *"...Башҡорт?.. Башҡорт?.. Ниндәй януарға оҡшаш?"* - тигән сәнскеле һорауын бирә.

*...Яуапты тапҡыр ҡайтарам:*
*"Ғәфү итегеҙ мине:*
*Нимес башын ҡырт-ҡырт ҡырҡа, -*
*ана шул башҡорт инде..."*

Үлмәҫбайҙың немецҡа биргән ана шул яуабын әҫәрҙә урыҫ теленә түбәндәгесә тип тәржемәләгәндәр (үкенескә, тәржемә авторын хәтерләмәйем). Ошо урынын һыным ҡатҡансы көлә-көлә уҡый инем:

*Стой! Ни с места! А иначе,*
*Сам поймешь, наверняка,*
*Что башкир на деле значит*
*Для тебя - секир башка...*

Бала саҡтан, ололар мәжлестәрҙә йырлаған йырҙарҙы ла күптәребеҙ ишетеп үҫтек бит инде. Улар араһында һағышлы, күңелдәргә үтеп инерҙәйҙәре лә бар. Шуларҙың, айырыуса йәш ғүмерҙе, Тыуған яҡты һағыныу хаҡында йырланғандарының бик күбеһе хәтеремдә.

*Сәскә инек илдәрҙә,*
*Сәселдек сит ерҙәргә.*
*Тағы ла сәскә булыр инек,*
*Ҡайтһаҡ Тыуған илдәргә...*

Ю.Андианов, Ф.Хәкимовтар тарафынан оҫта итеп тәржемәләнгән бындай йырҙар урыҫ телендә лә һағышлы яңғырай. Милләттәштәребеҙ генә түгел, урыҫса белгән башҡа халыҡтар ҙа илай-илай тыңламалы йырҙар бар шул халҡыбыҙҙа:

*Был на Родине цветком,*
*Вяну я в краю чужом.*
*Стал бы вновь живым цветком я -*
*Окажись в краю родном...*

Шул уҡ тәржемәсе әҙиптәребеҙ тарафынан шаян таҡмаҡтар ҙа урыҫ теленә йәтеш кенә итеп күсерелгән. Иғтибар итәйек:

*Бейе-бейе Хәйбулла,*
*Бейегән кеше бай була!*
*Бейегән кеше бай булһа ла,*
*Кеҫә яғы һай була...*
*Ты спляши нам, Хайбулла!*
*Пляшущий богат всегда.*
*Пляшущий - богат всегда,*
*Хоть в кармане - пустота...*

Әлеге Салауат улымдың "Иҙел бит ул..." тигән йырҙы руссаға әйләндереп маташҡанын күргәс, бер ваҡыт үҙем дә бер аҙ ғына тәржемәләүгә ҡыҙығып киткәйнем. Башҡорт халыҡ йыры "Буранбай"ҙы урыҫ теленә әйләндереп ҡараным.

*Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ*
*Буранбайҙың яҙған хаттары.*
*Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,*
*Зар илайҙыр ауыл ҡарттары...*

Барыбыҙға ла таныш булған был йырҙың үҙем тәржемәләгән варианты ошолай килеп сыҡты:

*Лист за листом письма Буранбая*
*Из сурового Сибирского края*
*Читали старики - односельчане,*
*Горькие слезы утирая...*

Ошо арала ғына күптәребеҙ әҫәрҙәрен яратып уҡыған ҡәләмдәшебеҙ Мәүлит ағай Ямалетдинов мәрхүм булып ҡалды. Тиҫтәләгән китап авторы, үҙе дин юлында булған был шағирыбыҙҙың шәриғәт ҡанундарын дөрөҫ кенә итеп сағылдырған шиғырҙары күп. Уның робағиҙар йыйынтығын айырыуса яратып уҡыным. Әленән-әле ҡабатлап уҡыйым, уларҙың ҡайһы берҙәрен ятлап та алғанмын. Шулар араһында ошондай дүрт юллыҡтар бар:

*Ғүмер - бүләк, ә бит уның Эйәһе бар!*
*Быны һүҙһеҙ аңлар, кемдең мейеһе бар.*
*Шундай гүзәл, ҡабатланмаҫ бүләк өсөн*
*Шөкөр итеп Уға башты эйәһе бар...*

Нимәһе менәндер Ғүмәр Хәйәмде, ҡай бер яғы менән мәшһүр Аҡмуллабыҙҙы хәтерләткән был ҡәләм оҫтаһының ана шул шиғырын да руссаға тәржемәләп ҡарарға булдым:

*За жизнь, что дана нам однократно*
*Обязаны мы Аллаху, больше - никому!*
*За неповторимый этот дар прекрасный*
*Велел Он поклоняться Ему - Одному.*

Китапханаларҙа башҡорт яҙыусыларының шиғырҙары, проза әҫәрҙәре, халыҡ ижадының рус теленә күсерелгәндәре күп кенә. Ана шул тәржемәләнгән китаптарҙы башҡа халыҡтарға ла йышыраҡ уҡытһындар ине. Республикабыҙҙағы төп милләттең мәшһүр кешеләрен - батырҙарын, яҙыусыларын улар ҙа белһендәр, тигән теләгем бар. Әрмелә саҡта госпиталгә ҡаралырға килгән бәғзе Өфө егеттәренең (мәҫәлән, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин урамында йәшәгән) берәүһенән: "Кем ул М. Ғөбәйҙуллин?" - тип һораша башлап, һалдаттың: "Не знаю, наверное писатель какой-нибудь..." - тигән һымағыраҡ яуабына ғәжәпләнә инем. Шәкирйән Мөхәммәтйәнов һымаҡ, дошман амбразураһын күкрәге менән ҡаплаған был батырҙы белмәгән кеше бөтә Башҡортостанда юҡтыр, тип уйлай инем шул... Бындай хәлдәр егерме биш йылдар элегерәк була торғайны. Бәлки, хәҙер башҡасараҡтыр ҙа... Үҙем педагог һөнәрле булмағас, уҡыу программалары менән әллә ни таныш түгелмен. Мәктәптәрҙә, тел өйрәнеүсе башҡа уҡыу йорттарында хәҙер ошо мәсьәләгә лә ҙур ғына әһәмиәт биреләләр, моғайын, тигән өмөттәмен.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Халыҡ иҫәбен алыуҙың мәғлүмәттәре ҡиммәт, сөнки йомғаҡтар буйынса халыҡтың йәше, енесе, иҡтисади хәле, белеме, йәшәү шарттары баһалана һәм шуның нигеҙендә илдә төрлө социаль-иҡтисади программалар булдырыла.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ӘСӘЙЕҢӘ ОҠШАҒАНҺЫҢМЫ?

■ Баланың интеллект кимәлен билдәләйәсәк гендар уға әсә кешенән күсә, ти ғалимдар. Сөнки был гендар Х-хромосома менән бәйле. Был осраҡта иһә "ҡулайлаша белгән гендар" тураһында һүҙ бара, улар балаға әсәнән күсһә - эшләйҙәр, ә атанан күсһә, баҫылып ҡалалар. Шулай ҙа атайҙарҙың гены фекерләй белеү ҡеүәһенә йоғонто яһамай, тип уйлау хата, ти профессор Дженнифек Дельгадо. Улар баш мейеһенең хис-тойғолар һәм инстинкт, шулай уҡ асығыу тойғоһо, агрессия өсөн яуап биргән өлөшөндә туплана. Әсәйҙән күскән күҙәнәктәр мейенең фекерләү, ҡабул итеү, хәтер, телмәр өсөн яуап биргән өлөшөндә йыйыла. Тик бөтөн нәмә лә гендар менән бәйле түгел икән. Бынан бер нисә йыл элек Миннесота штаты эксперттары асыҡлауынса, бала үҙенең әсәһенә ныҡ яҡын булһа, 2 йәшендә үк ҡатмарлы абстракт уйындар уйнай башлай ала, ныҡышмалыраҡ була, проблемалар килеп тыуғанда артыҡ бошоноп бармай. Вашингтон тикшеренеүселәре раҫлауынса, әсәһенең иғтибарын һәм яҡлауын тойған балаларҙың гиппокамп күләме ҙурыраҡ була. Баш мейеһенең был өлөшө белем алыуға, уны хәтерҙә ҡалдырыуға яуап бирә.

■ Баланың кәйефе, эмоциональ интеллект кимәле, шулай уҡ өлкән тормоштағы уңышлылығы уның рационынан тора, тип иҫәпләй ғалимдар. Баланың туҡланыу ғәҙәте 6-10 йәштәрҙә формалаша. Үкенескә күрә, улар был мәлдә чипсы, шоколад кеүек "дөрөҫ" булмаған ризыҡты күпләп ашай. Рәсәйҙә бөтөн сирҙәрҙең 50 проценты дөрөҫ туҡланмауҙан килә, тип иҫәпләй табиптар. Педиатрҙар шуға ла бәләкәйҙән баланың нимә ашауына иғтибар итергә кәңәш бирә. Иң "дөрөҫ" продукттар исемлегендә тәүге урында һөт ризыҡтары тора икән. "Ғәҙәти генә майһыҙландырылған йогурт та көндәлек кальций нормаһын тулыландыра, әммә быны ата-әсәләрҙең күбеһе белмәй ҙә", - ти педагог-методолог Наталья Чалая.

■ Америка ғалимдары кешенең киләсәк портретын төҙөп ҡараған. Вашингтон университеты хеҙмәткәрҙәре - тикшеренеүсе һәм рәссам Николай Ламм менән генетик Алан Кван 100 мең йылдан һуң йәшәйәсәк кешеләрҙе һүрәтләргә тырышҡан. Уларҙың күҙаллауы буйынса, эволюция, ген инженерияһы һәм космосты үҙләштереү кешенең тышҡы ҡиәфәтен нигеҙҙән үҙгәртәсәк. Тикшеренеүселәр фекеренсә, эволюция һөҙөмтәһендә баш мейеһе ҙураясаҡ, һөҙөмтәлә, маңлай ҙа киңәйәсәк. Бөгөнгө көн өсөн нормаға әүерелгән ген инженерияһы киләсәктә кешенең ҡиәфәтен үҙгәртеүҙә үҙ ролен уйнаясаҡ. Мәҫәлән, ата-әсәләр үҙҙәренең балаларының "генетик составы"н, шул иҫәптән, күҙҙәр, сәс төҫөн һайлай аласаҡ. Дөйөм алғанда, кешенең тышҡы йөҙө уның ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүе менән бәйле буласаҡ. Тикшеренеүселәр фаразлауынса, йөҙҙәр артыҡ симметрик һәм бер-береһенә оҡшаш була барасаҡ.

■ Ҡытайҙа етештерелгән уйынсыҡтарҙың 90 проценты - сәләмәтлек өсөн зарарлы. Уларҙың йә хәүефһеҙлеген билдәләүсе документтары юҡ, йә санитар-химик, токсикологик күрһәткестәре тап килмәй, йә маркировкаһы дөрөҫ түгел. Шулай уҡ "дөрөҫ булмаған" уйынсыҡтарҙың тауышы ла ҡолаҡты ярып алып бара, ти белгестәр. Магазин кәштәләрендә составында фенолформальдегид кеүек ағыулы матдә табылған уйынсыҡтар ҙа осрай. Бындай уйынсыҡтар балаларҙың тын юлына насар тәьҫир итә, аллергия тыуҙыра.

БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2020

# ЫҢҒАЙ ҠАРАШ БУЛДЫРЫУ...

## журналистарға ла бәйле




**Былтыр ил өсөн мөһим ваҡиға - Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы үтергә тейеш ине. Мәғлүм булыуынса, ул һәр 10 йыл һайын уҙғарыла тип билдәләнһә лә, тормош үҙенең төҙәтеүҙәрен индереп тора - көтмәгәндә тотош илде ҡурсаланыуға мәжбүр иткән тажзәхмәт арҡаһында октябрҙә үткәреләсәк кампания киләһе йылдың апреленә күсерелде. Шулай булһа ла, ул "2020" тамғаһы менән үтәсәк, уның логотибы, эмблемаһы, девизы (слоган) ла үҙгәреш кисермәй, бары тик уҙғарыу датаһы ғына бер аҙ артҡа шылдырылды.**

Дәүләт статистикаһы Федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы (Башҡортостанстат) ойоштorған видеобәйләнеш форматындағы конференцияла ла ошо хаҡта һүҙ барҙы һәм мөһим мәсьәләләр ҡаралды. Сарала республика киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре, ҡыҙыҡһыныусы яҡтар ҡатнашты. Башҡортостанстат етәксеһе Әкрәм Ғәниев иҫәп алыу яҡынайған һайын уның аныҡ сиктәре асыҡланыуы, башҡарыласаҡ эштәр күләменең төҫмөрләнеүе һәм онлайн уҡыуҙар, вебинарҙар ойошторолоуы хаҡында һөйләп үтте: "Бөгөнгө киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән осрашыу йәмғиәтте ошо мөһим сараны ниндәй дәрәжәлә ыңғай ҡабул итеүгә бергәләп әҙерләүебеҙгә бәйле, сөнки коронавирус эпидемияһы аралашыуҙы, халыҡтың мөнәсәбәтен ҡатмарлаштыра. Ә халыҡ иҫәбен алыу - дәүләттең халыҡҡа туранан-тура мөрәжәғәт иткән һәм мәғлүмәтте уның үҙенән алған киң күләмле сараларҙың береһе. Халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы мәсьәләләре буйынса даими рәүештә ил һәм республика башлыҡтары, ҡыҙыҡһыныусы ведомстволар кимәлендә (муниципаль кимәлгә тиклем) фекер алышыуҙар үткәрелә, ә инде халыҡта ыңғай ҡараш тыуҙырыу бурысы - киң мәғлүмәт сараларының әүҙемлегенә һәм уларҙың был сараның зарурлығын аңлатыуына бәйле. Федераль мәғлүмәт саралары материалдары тотош илгә тәғәйенләнгән, әммә айырым биләмәләрҙә йәшәүселәр ошо территория буйынса мәғлүмәт менән ҡыҙыҡһына. Шуға күрә республиканың һәр кешеһе, һәр бәләкәй ауыл гражданы үҙен ошо мөһим кампанияның мөһим звеноһы тип тойорға тейеш.

Күптәр халыҡ иҫәбен алыуҙы милләтте билдәләүгә генә ҡайтарып ҡалдырырға тырышһа ла, уның мәғлүмәттәре ҡиммәтерәк һәм һимматерәк, сөнки йомғаҡтар буйынса халыҡтың йәше, енесе, ғаилә мөнәсәбәттәре, иҡтисади хәле, белеме, йәшәү шарттары баһалана һәм шуның нигеҙендә илдә төрлө социаль-иҡтисади программалар булдырыла", - тине Әкрәм Мөхәмәт улы.

Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡ етәксеһе урынбаҫары Марат Ғәзизов республиканың киң мәғлүмәт сараларының ведомство-ара төҙөлгән медиаплан буйынса эшләүен белдерҙе. Бөгөн Башҡортостанда киң мәғлүмәт саралары алты телдә сыға. Әлеге ваҡытта уларға төп талап булып иҫәп алыу кампанияһының бурыстары һәм тезистары менән таныштырыу, уҡыусыларға ҡыҙыҡлы һәм оператив мәғлүмәт еткереү, аңлатыу эштәре алып барыу тора. Әйткәндәй, киң мәғлүмәт саралары редакциялары иҫәп алыу ваҡыты күсерелһә лә, мәғрифәтселек эшен планға ярашлы дауам итә, барлығы 2,5 мең самаһы материал донъя күргән һәм уларҙың һаны көндән-көн арта бара.

Башҡортостанстаттың һаулыҡ һаҡлау буйынса халыҡ статистикаһы бүлеге начальнигы Римма Үтәшева Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың төп бурыстары һәм принциптары менән таныштырҙы: "Был сара - ул халыҡ иҫәбен генә алыу түгел, ул илдәге демографик, иҡтисади, социаль торошто асыҡлау булһа, сараның төп принциптарына барлыҡ халыҡтың иҫәбен, иҫәп бланкыларындағы һорауҙарға кешенең үҙенән туранан-тура яуап алыу, кешенең үҙбилдәләнешен асыҡлау, граждандар биргән мәғлүмәттең конфиденциаллеге һәм уның һаҡланыуы инә, - тине Римма Борисовна. - Сарала барлыҡ граждандар ҙа иҫәпкә алынырға тейеш. Бының өсөн методология эшләнгән. Ҡыҫҡаса ғына итеп әйткәндә, билдәле ваҡытта Рәсәй Федерацияһы территорияһында булған барлыҡ халыҡ, ваҡытлыса Рәсәйҙә булған сит ил граждандары һәм асарбаҡтар иҫәпкә индерелергә тейеш.

Иҫәп алыуҙа һәр кеше үҙенең йорт хужалығы аша иҫәпләнә. Йорт хужалығы тигәндә йорт, фатир, бүлмә, коммуналка, шулай уҡ коллектив йорт хужалыҡтары - социаль, медицина һәм башҡа шундай учреждениелар күҙ уңында тотола. Асарбаҡтар ҙа мотлаҡ иҫәпкә алынасаҡ, әммә айырым категория буйынса.

Иҫәп алыуҙы өс төрлө үтергә мөмкин: беренсеһе - Госуслуги порталы аша иҫәп алыу бланкыларын үҙең тултыраһың; икенсеһе - иҫәпсенең һәр бинаны шәхсән йөрөп, һорауҙарға яуап алыуы формаһында; өсөнсөһө - стационар иҫәп алыу участкаларында. Шулай уҡ иҫәп алыуҙы Күп функциялы үҙәктәрҙә үтергә мөмкин. Стационар участкаларҙа ла, МФЦ-ла ла иҫәп алыу шулай уҡ электрон форматта үткәрелә, һуңынан респондентҡа электрон код бирелә. Иҫәп алыусы килгән ваҡытта гражданин ошо кодты әйтеп йәки күрһәтеп үҙенең (ғаилә ағзаларының) иҫәп алыу үтеүен раҫлай.

Рәсәй территорияһы төрлө сәғәт һыҙаттарында урынлашҡанлыҡтан, халыҡ иҫәбен алыу унда 1 апрелдә 00.00 сәғәттә башлана. 1-25 апрелдә интернет иҫәп алыуы үтә, унда һәр кем үҙаллы ҡатнаша ала. 1-30 апрелдә төп иҫәп алыусылар эш башлай һәм улар интернет иҫәп алыуҙа ҡатнашмаған участкаларҙа һәм контроль тикшереүҙә йөрөйәсәк. Шулай уҡ ошо осорҙа стационар участкалар ҙа эшләй. Бөгөнгө пандемия шарттарында халыҡ өсөн интернет иҫәп алыуҙа ҡатнашыу уңайлыраҡ та, хәүефһеҙерәк тә. Бының өсөн тәү сиратта Госуслуги порталында шәхси кабинет булдырырға кәрәк. Бер йорт хужалығынан бер кеше теркәлһә лә етә, сөнки бер иҫәп яҙмаһы булһа, ул бөтөн ғаилә ағзаларын иҫәпкә ҡуя. Әгәр бер бинала бер нисә ғаилә йәшәһә, мәҫәлән, коммуналь фатир, унда һәр ғаиләнең үҙенең иҫәп яҙмаһы булырға тейеш һәм ошо ғаиләнән бер кеше унда барлыҡ ғаилә ағзаларын иҫәпкә ҡуя. Стационар участкаларҙа иҫәп алыу үткән кеүек, интернетта үҙаллы иҫәп алыу үткәс тә килгән кодты һаҡларға йәки яҙып алырға кәрәк. Иҫәп алыусы килгәс, шул кодты күрһәтергә кәрәк. Әммә иҫәп алыусы ғаилә ағзаларының барыһы ла иҫәп алыу үткәнме икәнлеге тураһында белешә, быны асыҡлау өсөн һорауҙар бирә ала.

Бөгөнгә барлыҡ ойоштороу эштәре үтәлгән, ил территорияһы иҫәп алыу участкаларына бүленгән, уларҙың сиктәре билдәләнгән. Был карта-план иҫәпселәрҙең планшетына индерелгән. Иҫәп алыу кампанияһына ирекмәндәр ҙә йәлеп ителә. Росстат менән Росмолодежь араһында ошо турала килешеү төҙөлдө, февралдә ирекмәндәр йыйыла башлаясаҡ. Улар махсус уҡыу үткәс, стационар участкаларҙа эшләйәсәк, башҡа сараларға йәлеп ителәсәк.

Иҫәп алыуға өс иҫәп алыу бланкыһы раҫланған. Беренсеһе (Л формаһы) - РФ территорияһында йәшәгән һәр гражданға айырым тултырыла һәм ул үҙ эсенә 23 һорауҙы ала. Икенсеһе (П формаһы) - иҫәп алыу ваҡытында Рәсәйҙә ваҡытлыса булған сит ил граждандары өсөн. Был банкыла 7 һорау. Өсөнсөһө (В формаһы) - кеше йәшәгән һәр бинаға төҙөлә һәм халыҡтың йәшәү шарттарын сағылдырасаҡ. Бөгөнгә Башҡортостанда барлығы 1235 - иҫәп алыу, 7417 - иҫәп, 1237 стационар участкаһы ойошторолған. Барлығы 11377 кешене, шул иҫәптән 9894 - төп персоналды, 1483 резерв составын уҡытырға кәрәк. Иҫәп алыусы булып 18 йәше тулған, махсус уҡыу һәм халыҡ менән аралашыу курстары үткән, планшетта эшләй белгән гражданин эшләй ала".

Башҡортостанстат етәксеһе урынбаҫары Рөстәм Ғатауллин вебинарҙа ҡатнашыусыларҙы иҫәп алыуҙың махсус рәсми сайты, шулай уҡ Башҡортостанстаттың рәсми сайтындағы махсус бүлек, ундағы мәғлүмәттәр һәм уларҙы нисек ҡулланыу мөмкинлеге менән таныштырҙы. Әйткәндәй, киң мәғлүмәт сараларында донъя күргән һәм интернет селтәренә (сайтҡа, социаль селтәрҙәргә) ҡуйылған материалдар, әгәр махсус рубрикала бирелһә, Башҡортостанстаттың махсус бүлегенә автоматик рәүештә эләгә, ә инде улар булмағанда, материалдарҙы grw@bashstat.ru; vpn_irr@bashstat.ru адрестарына һалырға мөмкин. Әгәр материалдарығыҙҙың Рәсәй сайтына эләгеүен йәки эҙләү системаһында табылыуын теләһәгеҙ, уға рус телендә "ВПН2020", кампания слоганы йәки социаль селтәрҙәрҙә махсус хештег ҡуйырға кәрәк.

Әйткәндәй, www.strana2020.ru сайтында мәғлүмәттәр ябай һәм аңлайышлы, иң мөһиме - ҡыҙыҡлы итеп бирелгән, шул уҡ ваҡытта унда төрлө конкурстар ҙа уҙғарыла. Әлеге ваҡытта, мәҫәлән, мартҡа тиклем "Мин иҫәп алыуҙы һүрәтләйем" рәсемдәр конкурсы һәм викторина бара. Ә Госуслуги порталында электрон иҫәп алыу бланкыларын тултырып ҡарарға ла мөмкин.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

✓ *Айыуға биш метр тирәһе ара ҡалдырып туҡтаным, бер аҙ ҡарап торҙом һәм тағы ла яҡыныраҡ барырға булдым. Хайуан бик ҡаты йоҡлай ине. Ҡыҙыҡ булып китте лә, тегегә таяҡ менән төрттөм.*



*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...*

**Минеңсә, дәүләт инспекторы һөнәре донъялағы иң ҡыҙыҡлыһы, сөнки ул тәбиғәт менән шул тиклем яҡын, хатта уның тәрән серҙәрен дә белә кеүек. Ҡурсаулы биләмәләрҙе һаҡлаусылар һәр ваҡыт янғындарға, ташҡынға әҙерҙәр, хайуан-ҡоштарҙың иҫәбен алалар, күҙәтеүҙәр алып баралар, үҫемлектәр донъяһында, тәбиғәттә булған бер үҙгәреште лә иғтибарһыҙ ҡалдырмайҙар - шунда уҡ ғилми хеҙмәткәрҙәргә был турала хәбәр итәләр. Ә һеҙҙең бар йәһәттән дә килгән, шәп тәбиғәт һаҡсыһы менән танышҡығыҙ килер инеме?**

# АЙЫУҘЫ БАҪТЫРҒАН...



Урманды ихлас яратыусы, йәнлек-ҡоштар, тәбиғәтте ишетеп тоя белеүсе, бал ҡорттары тураһында бик күп мәғлүмәткә эйә Сабит Сәғит улы Ғәлин "Шүлгәнташ" ҡурсаулығында 1992 йылдан алып эшләй. Хеҙмәт юлын лаборант булып башлаған егет, ошо уҡ ойошмала дәүләт инспекторы булып эшләгән атаһы хаҡлы ялға киткәс, уның обходтарын ҡабул итә, ата-бабаһынан тапшырылып килгән солоҡсолоҡ кәсебен дә мираҫ итеп ала. "Шүлгәнташта" эшләүсе ҡайһы бер дәүләт инспекторҙарының солоҡсо ла булыуы ойошма өсөн оло мәртәбә һанала - ҡурсаулыҡ бит Бөрйән бал ҡорттарын һаҡлау эшен алып бара. Сабит Сәғит улының солоҡсо булыуынан тыш, тағы ла бер шәп шөғөлө бар: ул ябай түмәрҙән "һә" тигәнсе һауыт-һаба, йә сувенир эшләп ҡуя, һүрәтте лә бик оҫта төшөрә. Әммә Сабит ағайҙың иң мөһим, ҙур, яуаплы эше, моғайын, өлгөлө ғаилә башлығы булыуҙалыр. Ҡатыны Гөлназ апай менән улар өс батыр ул һәм бер ҡыҙ тәрбиәләйҙәр.

Сабит ағай менән уға ярҙамсы булып урманға солоҡтарҙы ҡарау, иҫәп алыу эше менән сыҡҡан хеҙмәттәшенә бер ҡасан да күңелһеҙ булмай. Шәхсән үҙемә уның менән урманға сәйәхәт ҡылыу бик оҡшай, сөнки тәбиғәт, хайуандар, хатта үҫемлектәр тураһында дәүләт инспекторы бик мауыҡтырғыс итеп һөйләй белеүе менән ауыҙына ҡаратып ҡуя. Уның хикәйәттәре араһында Бөрйән кешеһе өсөн иң ҡыҙыҡлыһы, әлбиттә, айыу тураһындағылары булыр. Ҡарап тороуға буйсанлығы менән артыҡ айырылмаған дәүләт инспекторының айыу тиклем айыу артынан ҡыҙыҡ күреп баҫтырып йөрөүенә таң ҡалырлыҡ. Унан йыш ҡына фотолар һәм урман яңылыҡтарынан торған хәбәрҙәр алам. Мәҫәлән, үткән яҙҙың матур бер көнөндә Сабит ағайҙан ошондай хәбәр килде: "Кисә ҡар өҫтөндә айыуҙың яңы эҙҙәренә юлыҡтым - урман хужаһы ҡурсаулыҡтың сигенән генә үтеп киткән". Шунда уҡ фото ла килеп төшә: яҙғы урманда ҡар әле күп кенә һәм унда айыу эҙҙәре күренеп ята. "Ҙурлығы 18 см тирәһе", тип тә өҫтәгән. "Яҙҙан алып өсөнсө тапҡыр юлығам инде. Бына бөгөн ауылдаштарым тайыштабанды көпә-көндөҙ күҙәткән. Ул өйҙәребеҙ эргәһендәге тауҙа йөрөгән". Башҡа ауылдар халҡы өсөн был сенсация, әлбиттә. Ә мәксүттәр ауылдың бындай көтөлмәгән ҡунағына өйрәнеп бөткән инде. Тик көҙҙөң ғәҙәти сыуаҡ көнөн ҡара болот ҡаплағандай итеүсе ваҡыттар ҙа була - тап ошо мәлдә тайыштабандар бик йыш мал-тыуарға һөжүм итеп, тамаҡлап ҡуя.

Айыуҙар - бик аҡыллы хайуандар. Бер нисә йыл элек тайыштабан был ауылда өйҙәргә бик яҡын килергә лә шөрләмәне. Ҡыуа башлағас, ул урман яғына йүнәлгән. Тик ҡурсаулыҡ биләмәһенә сикте сыҡҡас та ултырып алып, кешеләрҙе күҙәтә башлауына ауыл халҡы таң ҡала. Ҡурсаулыҡта үҙенә бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамай икәнен хайуан да белә.

Әңгәмәсемдән Бөрйән урмандары хужаһы тураһында берәй ҡыҙыҡлы хәл һөйләүен һорауым булды, Сабит ағай осҡонланып янған күҙҙәрен бер аҙ ҡыҫа төштө, йөҙөнә йылмайыу ҡунды, ҡулдары менән иҙәп күрһәтеп, хәбәрен башланы: "Минең менән был хәл үҙемдең артыҡ ныҡ ҡыҙыҡһыныусан, хатта бер аҙ иҫәр булыуым арҡаһында килеп сыҡты. 1995 йылдың мартында обходта йөрөп ятам. Ҡар күп булғас, саңғыламын. Ҡайтып барғанда айыу эҙҙәрен күреп ҡалдым. Ҡыҙыҡһыныуым шул тиклем көслө ине - тегене ҡыуып етергә булдым. Йылғанан алыҫ түгел ҡарағай тора ине, уның аҫтында ҡар ireп бөтөп, утрау барлыҡҡа килгән. Һәм ошо утрауҙа йомғаҡ кеүек йомарланып (уның ҡолаҡтары ғына күренеп тора ине)... айыу ята. Айыуға биш метр тирәһе ара ҡалдырып туҡтаным, бер аҙ ҡарап торҙом һәм тағы ла яҡыныраҡ барырға булдым. Хайуан бик ҡаты йоҡлай ине. Ҡыҙыҡ булып китте лә, тегегә таяҡ менән төрттөм. Тайыштабан ҡапыл артҡы аяҡтарына үрә баҫты. Бына һиңә, мә! Урман хужаһы йоҡлап ятҡанында бәләкәс кенә күренә ине, баҫҡас, минән дә оҙон булып сыҡты! Беҙ бер-беребеҙгә ҡарап тора башланыҡ. 10-15 секунд ҡына ваҡыт үткәндер, әммә был мәл мәңгелеккә һуҙылған кеүек тойолдо. Ниһәйәт, айыу ҡасты. Ә мин ултыра төштөм. Бик оҙаҡ иҫемә килдем, хатта тәүҙә аяҡтарым тотмай ыҙалатты. Үҙ-үҙемде тиргәп бөтә алманым".

Бына шундай ҡурҡыу белмәҫ, тәүәккәл, үҙ эшен яҡшы белеүсе, һәр эшкә оҫта дәүләт инспекторы эшләй "Шүлгәнташ"та.

**Ләлә ХӘЙБУЛЛИНА,**
**"Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт биосфера ҡурсаулығы хеҙмәткәре.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР

## Кеше өсөн нимә мөһимерәк?

Өс хикмәт эйәһе кеше өсөн нимә мөһимерәк - үткәнеме, бөгөнгөһөмө, әллә киләсәгеме, тигән һорауға үҙ-ара бәхәс ҡорған. Берәүһе шулай тигән:

- Үткәнем арҡаһында мин, шөкөр, ошо бөгөнгө хәлемдәмен. Үткәнемдә нимәгә өйрәнгәнмен, әле шуларҙы яҡшы беләм. Мин үҙемә ышанам, сөнки элек ниндәй эшкә тотонған булһам, хәҙер ҙә шул эштәрем уңышлы килеп сыға. Элек оҡшаған кешеләр әлегә тиклем минең күңелемә хуш, йәки шундайҙарға оҡшағандар менән эш алып барырға тырышам. Бына һеҙгә ҡарайым да, әлүк минән көләрөгөҙҙө һәм миңә ҡаршы төшөрөгөҙҙө белеп торам. Сөнки элек тә бәхсләшкәнебеҙ бар ине. Элекке һабаҡ булғас, һеҙҙең шундуҡ ҡына мин әйткәндәр менән ризалашмаҫығыҙҙы ла белеп торам.

- Эйе, һин әйткәнгә мин ҡаршымын, - ти икенсеһе. - Әгәр ҙә һин уйлағанса ғына булһа, кеше үрмәксе шикелле көнөн-төнөн үҙенең ҡылыҡ-ғәҙәттәренең ауында ғына сырмалыр ине. Кешене киләсәге генә яһай. Әлеге мәлдә нимә эшләй беләм, нимәгә оҫтамын - мөһим түгел, киләсәктә миңә нимә кәрәк буласаҡ - мин шуға өйрәнергә тырышам. Ике йыл элек ниндәй булғанмын тигән хәтирәгә ҡарағанда, ике йылдан ниндәй буласаҡмын, тигән һорау ысынбарлыҡҡа яҡын, ул тормошсан. Сөнки минең эш-ғәмәлдәрем үткән менән бәйләнмәгән, ә кем буласаҡмын, кем булырға тейешмен тигән киләсәккә ынтылыш менән бәйле. Шулай уҡ миңә, элекке таныштарыма ҡарағанда яңылары нығыраҡ оҡшай. Ә һеҙҙең менән ошолай һөйләшеү-аралашыу ҡыҙыҡ, ул минең өсөн - мауыҡтырғыс көрәш һәм көтөлмәгән фекерҙәр боролошо.

- Һеҙ бер нәмәне иҫегеҙҙән сығарҙығыҙ, - ти өсөнсөһө. - Үткән дә, киләсәк тә беҙҙең башыбыҙҙа, уй-фекерҙәребеҙҙә генә йәшәй. Үткән үтеп киткән, ул юҡ. Киләсәк әле килеп етмәгән. Үткәнде хәтерләйһегеҙме, киләсәк тураһында хыялланаһығыҙмы, һеҙ барыбер хәҙерге заманда йәшәйһегеҙ. Тик хәҙерге заманда ғына нимәнелер үҙгәртеп була, ә үткәнгә лә, киләсәккә лә беҙ хужа түгел. Үткәндәр тураһында хәтирәләр һағышландыра, киләсәк тураһында уйлау һағайтмай ҡалмай - бары тик әлеге мәлдә, хәҙерге заманда ғына бәхетле булырға мөмкин.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА**
**әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢ МЕНӘН КИЛЕШ

Шәхес булараҡ үҙеңдең ысын баһаңды аңлау - үҙ-үҙеңә ышаныс тәрбиәләүҙең тағы бер мөһим факторы. Асылда иһә, үҙең тураһында нимә уйлайһың, шуның һөҙөмтәһе проблемалар тыуҙыра. Тормош раҫлауынса, һин бер ваҡытта ла үҙең тураһындағы фекереңдән яҡшыраҡ була алмайһың.

Үҙ-үҙеңде ыңғай баһалау - ул үҙ һәләтеңде йәки ҡаҙаныштарыңды интеллектуаль ҡабул итеү генә түгел. Был һинең үҙ-үҙең менән шәхси килешеүең. Үҙ-үҙеңде ыңғай баһалауҙы үҫтереү - ул эгоизм түгел. Асылда, маҡтансыҡ кеше үҙ-үҙен кире яҡтан баһалау билдәләренең береһен күрһәтә.

Үҙ-үҙеңде ыңғай баһалай белеүеңде үҫтереү - кешене бәхетле яһау ысулы ғына түгел. Был бөтә тормошоң ҡоролорға тейешле нигеҙ. Әгәр һин азат булырға теләһәң, был бурысҡа етди ҡарарға тейешһең, кире осраҡта, үҙ-үҙеңде түбән баһалау йылдар үтеү менән тағы ла көсәйәсәк, һәм һин әле үҙ-үҙен йәлләп өйҙә ултырыусылар сафын тулыландырасаҡһың.

Үҙ-үҙеңде түбән баһалауҙың өс төп сәбәбе бар. Беренсеһе ата-әсәңдән күскән еңелеү концепцияларына ҡайтып ҡала. Икенсе сәбәп - мәктәп йылдарында уҡытыусыларҙың кире баһаһы һөҙөмтәһендә төҙөлгән кәмселектәр, уңышһыҙлыҡтар исемлеге. Өсөнсө сәбәп - ғәйеплелек һәм лайыҡһыҙ булыуға баҫым яһап, кире дини тәрбиә биреү. Иң элек, тәүге сәбәпкә туҡталайыҡ.

Әгәр ата-әсә үҙен башҡаларҙан кәм итеп иҫәпләһә, балалары ла үҙен түбән итеп тоя һәм һөҙөмтәлә өйҙә йәки мәктәптә ябай ғына проблеманы ла хәл итә алмай. Бөтәһе лә тәүге тапҡыр хата аҙым яһағас, баланы "насар ҡыҙыҡай" йәки "насар малай" тип атауҙан башлана. Һин был һүҙҙәрҙе яңылыш аңлап, үҙеңде "насар" тип иҫәпләйһең, ә ысынында иһә, һинең ҡылығың ғына насар булған бит.

"Насар балалар" булмай. Һәр балала берҙән-бер "насар" нәмә - иң яҡшы һөҙөмтәгә илтеүсе "аңлау"ҙың булмауы. Үҙен "насар малай" тип иҫәпләп, бала быным үҙ талабын ҡәнәғәтләндереү сараһының ғына яңылыш булыуын аңламай. Әгәр бала быны аңларға өйрәнмәһә, ул үҙен төҙәлгеһеҙ насар тип иҫәпләйәсәк. Был тойғо аҙаҡтан эҙмә-эҙлекле рәүештә оялыуҙа, үҙ-үҙе менән ризаһыҙлыҡта, выждан ғазабында һәм иң насары - үҙен ғәйепле итеп тойоуҙа сағыласаҡ.

Баланы ағаһы, апаһы йәки күршеләрҙең балалары менән сағыштырып әрләгәндә лә унда үҙен түбән баһалау тойғоһо үҫешә. Әгәр ата-әсәй үҙенең тәнҡитен "Һинең кеүек шәп малай былай эшләргә тейеш түгел ине бит" тигән һүҙҙәр менән белдерһә, бындай реакция булмаҫ ине.

Ата-әсәнең икенсе хатаһы - үҙ балаһының ҡабатланмаҫлығын аңламау йәки танымау. Ҡайһы бер ата-әсә, балаһының тойғоһо, теләге, фекере менән иҫәпләшмәйенсә, "атайың (әсәйең) ни эшләргә кәрәклеген һинән яҡшыраҡ беләләр бит инде", тип әйтеүсән. Бала быны үҙен ихтирам итмәү тип ҡабул итә.

Бындай балалар, ғәҙәттә, үҫкәс тә үҙ-үҙенә ышанмай, баҙап ҡалыу һөҙөмтәһендә теләгән маҡсаттарына өлгәшә алмай.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 18 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.40, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]
0.30 Д/ф "Большой белый танец". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 13.00.
13.00, 18.40 "60 минут". [12+]
14.00, 17.00, 20.00 Вести.
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Рая знает". [12+]

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Монахини в бегах". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 19 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.25, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]
0.30 Д/ф "Гарик Сукачев. То, что во мне". [18+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Рая знает". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" /Череповец/. КХЛ.**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Горбун". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 20 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.25, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]
0.30 Д/ф "Воины бездорожья". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Рая знает". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00, 5.00 Д/ф "Черный генерал". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ничей". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 21 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.30, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Д/с Премьера. "Япония. Обратная сторона кимоно". [18+]
0.30 Д/ф Премьера. "Неизвестная Антарктида. Миллион лет назад". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Рая знает". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.50 Хоккей. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любой день". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 3.20 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.10 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Х/ф Премьера. "Красотка в ударе". [12+]
23.25 Х/ф "Анна и король". [0+]
1.55 Х/ф "Река не течет вспять". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
1.45 XIX Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орёл". Прямая трансляция.
4.05 Т/с "Рая знает". [12+]
4.53 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Мосфильм. Фабрика советских грез". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 19.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00, 5.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00, 3.45 Х/ф "Манон-70". [16+]**
**2.15 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**3.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**6.00 "Бай". [12+]**

## 23 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Джентльмены удачи". Все оттенки Серого". [12+]
11.15, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.05 Д/ф Премьера. "И неба было мало, и земли..." К 100-летию Арно Бабаджаняна. [12+]
15.00 Вечер музыки Арно Бабаджаняна. [12+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.05 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "После свадьбы". [16+]
1.00 Х/ф "Обезьяньи проделки". [12+]
2.35 Модный приговор. [6+]
3.25 Давай поженимся! [16+]
4.05 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.15 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Без любви". [12+]
1.10 Х/ф "Путь к себе". [12+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Зимнее чудо". Концерт БГФ им. Х.Ахметова. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Мустанг". [16+]**
**2.30 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 24 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Личные обстоятельства". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.10 Ледниковый период. [0+]
17.25 Премьера. "Я почти знаменит". [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.50 Концерт Максима Галкина. [12+]
23.00 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.00 Д/ф "Обыкновенный фашизм". К юбилею Михаила Ромма. [16+]
2.20 Модный приговор. [6+]
3.10 Давай поженимся! [16+]
3.50 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20, 1.30 Х/ф "Зойкина любовь". [12+]
6.00, 3.20 Х/ф "Только ты". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 Когда все дома.
10.10 "Сто к одному".
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.20 Т/с "Входя в дом, оглянись". [12+]
18.00 Танцы со Звездами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТеқә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Йырҙарҙа йылдар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**
**18.45 Дело совести. [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Кафе де Флор". [16+]**
**2.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**4.30 Посмотрим... [6+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (5) дүшәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |
| 19 (6) шишәмбе | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 20 (7) шаршамбы | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 21 (8) кесе йома | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 22 (9) йома | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 16:01 | 17:31 | 19:01 |
| 23 (10) шәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 16:03 | 17:33 | 19:03 |
| 24 (11) йәкшәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 16:05 | 17:35 | 19:05 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Планлаштырылған графикка ҡарамай, отпускыға декретта булғандарҙың ирҙәре, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ҡатындары, ауырлы ҡатындар, 3 йәшкә тиклем бала тәрбиәләгән әсәләр иҫәп тота ала.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҠУРАЙЫ ЮҠТЫҢ ӨНӨ ЮҠ, ӨНӨ ЮҠТЫҢ КӨНӨ ЮҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**2-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡаҙан. Назаров. Йола. Ҡалас. Яҫтыҡ. Бикбаев. Марка. Алдыр. Умарта. Тоҡом. Бет. Ҡойҡа. Осло. Ниәт. Йомаҡ. Опера. Имам. Хужа. Яу. Асман. Менелай. Ниәтшин.

**Вертикаль буйынса:** Мифтахов. Ҡарасҡы. Альманах. Нота. Уҙаман. Сбруй. Ҡазый. Бутҡа. Агент. Лаборатория. Мурҙа. Нивх. Йән. Ява. Ҡойма. Лото. Ысыҡ. Ҡор. Арҡан.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 ғинуар "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+
**20 ғинуар "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов) 12+
**21 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**22 ғинуар "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**23 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 12+
**24 ғинуар "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 ғинуар "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 12+
**22 ғинуар "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+
**24 ғинуар "Чиполлино"** (Дж. Родари), әкиәт. 12.00, 14.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23-24 ғинуар "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 12.00, 14.00, 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 ғинуар "Нам звезды кроткие сияли"** Т. Сәйфуллин исемендәге БР Дәүләт академия хор капеллаһы концерты. 6+
**22 ғинуар "Һаҡмар һандуғасы"** Х. Әхмәтов иҫтәлегенә концерт. 6+
**23 ғинуар "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+
**24 ғинуар "Weekend с органом"** (Э. Хәйретдинова). 15.00 6+

## БР Милли музейы

**31 ғинуарға тиклем "Йәм-йәшел шыршы энәләрендә ялтыр мөғжизә..."** Яңы йыл ретро уйынсыҡтары күргәҙмәһе.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ*

# ҠАСАН ЯЛ?

**Рәсәй Хеҙмәт министрлығы отпускыны рәсмиләштереүҙең нормаларын аңлатты**

Отпуск графигы календарь йыл еткәнгә тиклем ике аҙнанан да һуңға ҡалмай рәсмиләштерелергә һәм килешелергә тейеш. "РФ Хеҙмәт кодексының 123-сө статьяһы талаптарына ярашлы, отпуск графигы эш биреүсе өсөн генә түгел, ә хеҙмәткәрҙәр өсөн дә мотлаҡ. Был процедура, отпускыға ғариза яҙыуҙан тыш, бөтөнләй ҡаралмаған - эш биреүсе хеҙмәткәргә йыл һайын бирелә торған түләүле отпуск биреү тураһында бойороҡ ҡына сығара (ул башланғансы ике аҙна ҡалғас, был хаҡта хеҙмәткәр ҡултамғаһын ҡуйып таныша). Әгәр эш биреүсе датаһын үҙгәртергә теләмәһә, хеҙмәткәр график буйынса бирелгән отпускыһын файҙаланыуҙан баш тарта алмай. Ике яҡтың килешеүе буйынса ғына уны күсерергә мөмкин", - ти Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы етәксеһе урынбаҫары Оксана Ванскова.

Хеҙмәт министрлығы графикта отпускыны аныҡ датаһыҙ, айын ғына күрһәтеп тә яҙырға мөмкин, тип аңлатты. Ғәмәлдәге закон хеҙмәткәрҙәрҙең айырым категорияһына: балиғ булмағандарға, 12 йәшкә тиклемге өс йәки унан күберәк бала тәрбиәләгәндәргә, 18 йәшкә тиклем инвалид бала тәрбиәләгән ата-әсәнең (опекундың, попечителдең) береһенә, хәрби хеҙмәт һәм 1995 йыл 12 ғинуарҙағы "Ветерандар тураһында"ғы Федераль законда ҡаралған башҡа төркөм ветерандарына, маҡтаулы донорҙарға отпускыһын йәйге йәки үҙҙәренә уңайлы мәлдә файҙаланыу хоҡуғын бирә.

Бынан тыш, планлаштырылған графикка ҡарамай, отпускыға декретта булғандарҙың ирҙәре, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ҡатындары, ауырлы ҡатындар, 3 йәшкә тиклем бала тәрбиәләгән әсәләр (уларға үҙенең сираттағы түләүле отпускыһын декреттыҡына ҡушырға мөмкин) иҫәп тота ала. Был иҫәптә 3 йәшкә тиклем баланы тәрбиәгә алған хеҙмәткәрҙәр ҙә бар. Уларға йыл һайын бирелгән түләүле отпуск төп эш буйынса ял менән бер үк ваҡытта бирелә. Йыллыҡ түләүле отпускыһы 28 календарь көндән ашыу булған хеҙмәткәрҙәр отпускыһының бер өлөшөн аҡсалата компенсация менән ала ала (РФ Хеҙмәт кодексының 126-сы статьяһы).

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СУСҠАҒА - ХӘҮЕФ

**Башҡортостанда сусҡалар өсөн хәүефле Африка тағуны (Африканская чума свиней) таралыуға юл ҡуймауға бәйле саралар күрелә.**

Республика биләмәһенә Африка тағуны инеү хәүефе ҙур, тип белдерҙе Рәсәй ауыл хужалығы күҙәтеүе хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы. 2020 йылдың башынан Рәсәйҙең 33 төбәгендә сусҡалар өсөн хәүефле Африка тағуны буйынса имен булмаған 265 пункт теркәлде. Әлеге ваҡытта илдең күп төбәгендә һатылған сеймалда, әҙер ит продукцияһында тағун вирусы осрауы тураһында мәғлүмәт бар. Республикала әле 5512 баш ҡабан сусҡаһы иҫәпләнә, хужалыҡтарҙа 470 200 баш сусҡа аҫрала. Ауырыуға юл ҡуймау буйынса карантин сараларын үткәргән ваҡытта сир табылған урындан 20 километрға тиклем радиуста сусҡа юҡ ителә. Төбәк биләмәһендә әлегә 12 сусҡасылыҡ предприятиеһы тикшерелде. Вирус йоғоу хәүефе тәү сиратта шәхси хужалыҡтарға янай. Африка тағуны буйынса эпизоотик хәлде иҫәпкә алып, Рәсәй ауыл хужалығы күҙәтеүе хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы һаҡланыуҙың урта һәм юғары кимәле статусы бирелгән субъекттарға предприятиела тикшереү ойоштороорға, етешһеҙлектәр асыҡланһа, уны төҙәтеү сараларын күрергә тәҡдим итә. Предприятиеның хеҙмәтләндереүсе персоналы менән иҫкәртеү эшенә, үткәреү режимына, аҙыҡ һәм сусҡа ташыусылар менән хеҙмәттәшлеккә айырым иғтибар биреү мөһим. Бөтә һорауҙар буйынса Рәсәй ауыл хужалығы күҙәтеүе хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы һәм Ветеринария идаралығының рәсми сайтында "ҡыҙыу линия" телефоны буйынса йәки күрһәтелгән ойошмаларҙың белгестәренә туранан-тура мөрәжәғәт итергә кәрәк.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

**Бөгөн донъяла кешегә күп нәмә - һүҙ һәм эш ирке, ижади азатлыҡ, демократия һәм башҡалар рөхсәт ителә. Һанай китһәң, бик күп улар, беренсе ҡарашҡа йәмғиәткә артыҡ зыяны ла, файҙаһы ла булмаған һымаҡ ғәмәл-күренештәр. Әммә уларҙан һуң бит ҡылынған ҡылыҡ, яҙылған һүҙ, яһалған һүрәт барлыҡҡа килә, улар иһә һәр күргән, ишеткән, ҡараған кешенең хәтерендә ҡала.**

# СӘНҒӘТМЕ, ҒИБРӘТМЕ БЫЛ?



Әйтергә теләгән фекерем һуңғы көндәрҙә интернетты шаулатҡан "картиналар" тураһында. Авторы Алена Савельева тип теркәлә. Иғтибар итергә тейешме беҙ уның был "картиналарына"? Әллә күҙгә элмәҫкә, һаңға һуҡмаҫҡамы? Әллә милли атрибуттарыбыҙҙы, символдарыбыҙҙы түбәнһетеү итеп ҡабул итергәме? Бәлки, һүрәттәрҙе сәнғәттең беҙ аңламаған ҡатмарлы бер үҙенсәлеге тип кенә күрергәлер? Ошондай һорауҙарҙы, моғайын, күптәр үҙенә бирел ҡарағандыр. Мин дә һорауҙар алдындамын, аңларға, һүрәттәр аша килгән мәғлүмәтте аңға дөрөҫ итеп тәңкләп һалырға тырышам...

Сәнғәттең ню (йәғни, шәрәлек, тән өлөштәрен күрһәтеү, яланғас булыу) жанры тип кенә ҡабул итке лә килә "картиналарҙы". Аҙмы рәссамдарҙа, скульпторҙарҙа, кинола ошондай уҡ шәрәлек сағылдырыла! Борон-борондан килгән һәм ҡабул ителгән сәнғәт үҙенсәлеге бит инде был. Тик! Бында бит башҡорттоң милли символдары, милли кейемдәре, милли музыка ҡоралы! Бында милләттең брендлы символдары: ҡурай, селтәр, бал... Ысынында, әгәр ошо атрибуттар булмаһа, әлеге һүрәттәрҙе бәреү ҙә күҙгә лә элмәҫ ине. Тимәк, улар һүрәттәргә тап шул иғтибарҙы йәлеп итеү, күрһәтеү, тамашасы табыуҙы маҡсат итеп индерелгән.

Дәүләт символдары - ул флаг, герб, гимн. Улар һәр дәүләттең тәбиғәтен, булмышын күрһәтеүсе атрибуттар. Дәүләт символдарын мыҫҡыл итеү, үҙгәртеү, боҙоу административ һәм енәйәт яуаплылығына тарттырыла. Ә республика, милләт символдарын шәрә әҙәмдәргә тағып, кейҙереп ҡуйыу - ул дәүләт символдарын мыҫҡыл итеүгә инмәймә икән? Ҡурай бит беҙҙең республика гербында теркәлгән, ул Башҡортостан Республикаһының ил кимәлендә рәсми теркәлгән территориаль бренды. Селтәр бөгөн башҡорт ҡатынҡыҙҙарының төп милли биҙәгенә, визиткаһына әйләнде. Башҡорт балы патентланған, һаҡланыусы сауҙа маркаһы булып тора. Тағы ла нимәләр өҫтәргә бында?

Рәссамдың үҙ ҡарашы, фантазияһы, ул башҡорт донъяһын шулай күрә, тип тә әйтер ҡайһы берәүҙәр. Уларҙың да фекере хаҡлыҡҡа тура килә кеүек. Ижад кешеһенең уй һәм хыял ҡомары әллә ҡайҙарға менеп йә төшөп китеүе бар. Тик! Күп милләтле республика халҡының һәр береһенең милли ҡиммәттәрен ҡәҙерләү, һаҡлау һәм кәмһетмәүгә хоҡуғы бар. Милләт-ара боҙолошоу, үҙ-ара дошманлыҡ хистәрен уятыуға этәргес барлыҡ эштәр ҙә шулай уҡ яуаплылыҡҡа тарттырыла, тип аңлайбыҙ беҙ. Әлеге һүрәттәр авторы ла яуапҡа тарттырылырға тейеш түгелме икән ни?

Әйткәндәй, Вера Фролова тигән рәссамдың башҡорт донъяһын сағылдырған тиҫтәләгән картиналары бар. Уларҙа ла башҡорт символы булған атрибуттар, милли кейемдәр һәм башҡалар һүрәтләнә. Тик уларҙа бик яҡты, матур, әхлаҡлы күренештәр сағылдырыла. Тимәк, был рәссам үҙ асылынан, булмышынан сығып ижад итә. Ә Алена Савельеваның булмышы ниндәй икән һуң? Быныһын инде хоҡуҡ һаҡлау органдары тикшерергә тейештер, моғайын.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘЙТМӘҺЕН КЕШЕ,

## әйтеп торһон эше

Наҙан "Мин еңдем" тиер, аҡыллы "Юл бирҙем" тиер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Власҡа ынтылыу ҡурҡыуҙан килә. Кешеләрҙән ҡурҡмағандар улар өҫтөнән идара итергә ынтылмай.

**(Б. Рассел).**

Нимә ул еңелеү? Ул - мәктәп, ул - тағы ла камилыраҡ бер үргә тәүге аҙым.

**(У. Филлипс).**

Ахмаҡтар ашау һәм эсеү өсөн йәшәй, йүнле кешеләр йәшәү өсөн ашай һәм эсә.

**(Сократ).**

Күңелһеҙ кешеләрҙе тыңлап, өмөтһеҙ әҙәмдәрҙе төҙәтергә тырышып, алтын ваҡытыңды әрәм итмә. Был - ауырыу маҡсаттар һәм алдатҡыс ынтылыштар.

**(О. Уайльд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ярлы ғына балыҡсының ауына ҙур бер балыҡ эләгә. Ул балыҡтың эсенән аҫыл таш табып ала. Шатлығы эсенә һыймаған балыҡсы был ташты һатыр өсөн намыҫлы, гүзәл бер оҫтаға алып бара. Оҫта ташҡа оҙаҡ ҡына текләп тора ла: "Ҡызғаныс, миндә булған барлыҡ алтын был таштың хаҡын ҡаплай алмай, - ти һәм таш хужаһына дәүләттең гүзәл батшаһына барырға кәңәш итә. Сөнки ул был таштың тулы хаҡын түләй алырлыҡ берҙән-бер кеше була.**

**Шулай итеп, балыҡсы батшаға килеп, уға ҡиммәтле хазинаһын күрһәтә.**

**Батша ташҡа оҙаҡ ҡына текләп тора ла: "Һиңә 4 сәғәт ваҡыт бирәм. Алтын-көмөш һаҡланған келәтемә ин дә, шул ваҡыт эсендә был ташҡа алмашҡа йәнең теләгәнсә алтын-көмөш һайлап ал", - ти.**

**Балыҡсы келәткә ингәс, ундағы хазинаны, тау-тау булып өйөлгән алтын-көмөштө күреп, аҡылынан яҙыр сиккә етә. Ул үҙенә: "Ярай, ваҡытым күп әле. Бер тоҡ алтын алһам, бөтә балаларыма ла етәсәк", - тип, бер өйөм алтын өҫтөнә ҡырын ятып, хыяллана башлай: "Тауыҡ кетәгендәй генә өйөмдө - һарайға, ишәгемде атҡа әйләндерәм; ҙур ер биләмәһе һатып алам", - тип хыялға батып ятып, ул тамам донъяһын онота. Күпмелер ваҡыттан ул келәт һаҡсыһының тауышынан иҫенә килеп, һиҫкәнеп китә.**

**- Эй, фәлән! Тор урыныңдан! Һиңә бирелгән ваҡыт тамам.**

**- Тукта-а, бер ус ҡына алтын алырға рөхсәт ит...**

**- Юҡ, һиңә бирелгән ваҡыт тамам! - келәт һаҡсыһы балыҡсыны келәттән төртөп сығарып ебәрә. Мескен балыҡсы үҙенең емерек өйөнә бер нәмәһеҙ, буш ҡул менән ҡайтып китә..."**

ЯҢЫ КИТАП

# ХӨРМӘТ ҮТӘШЕВТЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ?




**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев тураһында "Таштуғайҙың ике батыры: Хөрмәтулла Үтәшев. Тормошо һәм ижад юлы" исемле китап-альбом донъя күрҙе. Төҙөүселәре - Динара Ҡәйүмова һәм Зөлфиә Ҡарабаева.**

Тиҙҙән Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында һәм Үтәшевтарҙың тыуған яғы - Хәйбулла районында китаптың исем туйы була. Уны Өфөнөң китап магазиндарында һатып алырға мөмкин. Динара Ҡәйүмова һөйләүенсә, китап "Сәхнә генералы - Хөрмәтулла Үтәшев", "Халыҡ һөйөүе - мәңгелек", "Тыуған бишек - киң донъяға ишек", "Ата-әсәйем мөхите" исемле бүлектәрҙән тора. "Фактуралы, оҙон буйлы Хөрмәтулла Үтәшев героик-романтик амплуалағы ролдәр менән дә (сөнки улар еңел бирелә һәм актер уларҙы шәп башҡара) сикләнеп ҡала алыр ине, әммә артист үҙен киң диапазонлы оҫта итеп танытты. Эпик пландағы киң күләмле ролдәрҙән тыш, ул сағыу, комик һәм эксцентрик, хатта гротеск жанрындағы ролдәр тыуҙырҙы: Салауат, Степан Разин, Сынғыҙхан, Кемаль Ата Төрк, Эдип һәм Гарпагон, Юлғотло, Нөгөш... Ошо төрлө жанрҙағы, төрлө стилдәге һәм төрлө эстетик тәбиғәтле ролдәрҙә лә Хөрмәтулла Үтәшев үҙен иркен тоя. Тәү сиратта, Үтәшевтең ҡуш йөрәкле булыуы, ҡыйыулығы, сәхнәлә уйнарға көслө теләге һәм ҡәҙимгә ҡалыптарҙы ҡурҡыу белмәйенсә боҙоуы ғәжәпләндерә", - тип яҙа китаптағы мәҡәләһендә театр тәнҡитсеһе Галина Вербицкая.

"Тыуған бишек - киң донъяға ишек" бүлеге Хәйбулла районы башлығы Рөстәм Шәриповтың сәләмләүе менән асылған: "Заманында майҙандарҙы шаулатҡан, бер һабантуй бәйгеһендә лә бил бирмәгән, майҙан ғына түгел, ялан батыры ла булған Ғаззали Үтәшев - сиҙәм ерҙәрендә иген сәсеүрып, Тыуған еренә фиҙакәр хеҙмәт иткән. Ғаззали батыр үҙенең аҡылы, тормошҡа ҡарашы, тәжрибәһе менән яҡташтары араһында абруй ҡаҙана, ихтирамға лайыҡ була. Үҙенән һуң лайыҡлы балалар ҡалдыра. Ғаззали батырҙың улы - республикала ғына түгел, Рәсәйҙә, хатта сит илдәрҙә лә танылыу тапҡан Башҡортостан Республикаһының, Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Хөрмәтулла Үтәшев - районыбыҙҙың ғорурлығы".

Китаптың өсөнсө һәм дүртенсе бүлектәре Хөрмәтулла Ғаззали улының хәтерләүҙәренә ҡоролған: бала саҡтың сағыу иҫтәлектәре, мәктәп һәм студент йылдары, әрме хеҙмәте, театр донъяһына аяҡ баҫыу, ижад юлы, етәксе һәм укытыусылыҡ эше... Был хәтирәләр барыһы ла халыҡсан, ябай тел менән яҙылған, китапты уҡыусылар ҙурҙәрен мауыҡтырғыс ваҡиғалар уртаһында йөрөгәндәй хис итә.Һуңғы бүлектә автортарҙың бер туған апаһы Фәриғә Күсәкованың иҫтәлектәре һәм шиғырҙары, Рәүеф Собханғоловтың Ғаззали батыр тураһында мәҡәләһе баҫылған.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тираҙы - 3400
Заказ - 19/01

1 582218 911006 21003